ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Кискеүфө

26-1
октябрь - ноябрь
(ҡарасай - ҡырпағай)
2019
№43 (877)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Һәр бөйөк эш ябай, етди, һиҙелеп бармаған шарттарҙа башҡарыла. Ялтырауыҡтар, шау-шыуҙар, кәперенеүҙәр астында һөрөп тә, сәсеп тә, төҙөп тә, хатта фекерләп тә булмай.

(Лев Толстой).

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Бабич рухы…

туғандарҙы ла берләштерә **5**

Балағыҙ телен…

йәнһүрәттәр боҙамы?

6

Дини йола менән…

милли йола айырыламы? **8-9,15**

Тайыштабан тураһында…

ысынбарлыҡ

12

ТВ-программа **14**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Урал аръяғында Башҡорт дәүләт медицина университетының филиалын төҙөү тураһында тәҡдим индерҙе, ошо яңылыҡты нисек ҡабул иттегеҙ?

Тәлғәт ЗӘЛҠӘРНӘЕВ, Башҡорт дәүләт медицина университеты профессоры: Бөгөн беҙҙең республикаға врачтар күп кәрәк. Башҡорт дәүләт медицина университеты күп белгестәр әҙерләп сығара, әммә йәштәр башҡа төбәктәргә һәм хатта сит илдәргә эшкә китә. Шуға күрә, Урал аръяғында БДМУ-ның филиалын асыу бик ваҡытлы тәҡдим булып яңғыраны. Ректорат рөхсәт итһә, үҙем дә унда барып уҡытып килергә ризамын. Сөнки сығышым менән Әбйәлил районынанмын, яҡташтарыма медицина белеме бирергә бик тә теләр инем. Урал аръяғында юғары белемле табиптар әҙерләү бик һәйбәт башланғыс буласаҡ һәм уны тиҙерәк тормошҡа ашырырға кәрәк. Вуз филиалы мотлаҡ Сибай ҡалаһында урынлашырға тейеш, сөнки ул Урал аръяғының үҙәге. Сибайҙа медицина колледжы ла бар, ул буласаҡ уҡыу йортоноң базаһы була ала.

БДМУ-ның филиалы республикаға кәрәкле педиатрия, хирургия, кардиология буйынса йәш белгестәр әҙерләр, моғайын. Унда шулай уҡ халыҡ медицинаһы өлкәһе буйынса ла белем биреү ҡамасау итмәҫ ине. Сөнки беҙ бөтә ауырыуҙарға ҡаршы дарыуҙар ғына ҡулланып өйрәнгәнбеҙ, ә ҡайһы бер осраҡта врачтың пациент менән бер ултырып һөйләшеп алыуы ла файҙа бирә бит. Ошо төбәк кешеһенең көнитмешен, тормош хәлен яҡшы белгән һәм ошонда үҫкән үләндәрҙең шифалы көсөн сирҙәрҙе иҫкәртеү өсөн ҡулланырға тәҡдим итә белгән табип яҡшыраҡ баһаланыр халыҡта. Бөгөн ауыл ерендә врач булмағанлыҡтан күп кенә участка дауаханалары ябыла, бына ниндәй мәсьәләне тәү сиратта хәл итергә тейеш вуздың яңы тармағы. Ҡайһы бер район хакимиәте башлыҡтары ла был йәһәттән ниндәйҙер саралар күргә ашҡынып тормай, килгән кешегә торлаҡ мәсьәләләрен хәл итеүе лә еңелдән түгел. Ә бына Урал аръяғында БДМУ филиалы асылһа, унда яҡынтирәлә урынлашҡан ауылдарҙан абитуриенттар йыйылһа, үҙ тыуған төйәгендәге дауаханаға эшкә төшһәләр, уларға йәшәү шарттары булдырыуы ла хөкүмәткә еңелерәккә төшәсәк бит. Ни тиһәң дә, йәш кешенең таяныр яҡындары ла эргәһендә була.

(Дауамы 2-се биттә).

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

Гәзитебеҙҙең 35-се һанында отставкалағы хәрби табип Хәлил Һөйөндөковтың "Алкоголизм яман ғәҙәтме, әллә ауыр сирме?" тип аталған мәҡәләһе баҫылып сыҡҡайны. Уға шаңдауҙар булыр әле, тип көтөбөрәк торғайныҡ, әммә бушҡа ғына - халыҡ өнһеҙ. Әммә ваҡыт үтә тора һәм йәмғәтселек аңында хаталы фекер нығына бара.

БАЛАҢ ҺИНЕ ҠАБАТЛАЙ…

Бөгөн республикала иғлан ителгән "Айыҡ ауыл" конкурсы сиктәрендә социаль селтәрҙәрҙә генә түгел, йәмғиәттә бәхәс бара: ысынлап та, нимә һуң ул алкоголизм? Конкурсты ойоштороусылар, табиптар, хатта йәмәғәтселек фекерен тыуҙырыусы журналистар ҙа уның яман сир булыуын раҫлай һәм нигеҙҙә, бар көстө, иғтибарҙы ошо сирҙе дауалауға, уны иҫкәртеүгә, хәҙер инде телмәребеҙгә көсләп индерелгән суррогат алкоголь һатыуға ҡаршы көрәшкә йүнәлтә.

(Дауамы 2-се биттә).

ИҒТИБАР!

ТОРАҒЫНДЫ…

тәртипкә килтер!

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған Указға ярашлы, 2020 йыл республикала "Тораҡ пункттар эстетикаһы" йылы тип иғлан ителде.

Документ тораҡ пункттарҙың эстетик тышҡы йөҙөн формалаштырыу һәм төҙөкләндереү кимәлен күтәреү, халыҡтың уңайлы йәшәүе өсөн шарттар булдырыу (газондар, тротуарҙар, ҡоймалар, яҡтыртыу күҙ уңында тотола), йәмғиәттә төҙөкләндереү һәм уңайлы йәшәү мөхитен булдырыу мәсьәләләренә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы күҙҙә тота. "Йылды ниндәйҙер абстракциялар менән атамаҫҡа, ә уны халыҡтың мәнфәғәттәренә яуап биргән аныҡ, аңлайышлы эштәргә арнарға, тигән тәҡдимебеҙ бар. Граждандарҙы борсоған мөрәжәғәттәрҙе тикшерҙек. Тирә-яҡты төҙөкләндереү, ҡалаларҙа, ауылдарҙа уңайлы мөхит булдырыу бик мөһим", - тине республика Башлығы.

12+

✓ *Ысын сирле дарыу ҡабул итмәгән осраҡта оҙаҡ йәшәй алмай, ә эскән кеше, әгәр уның күҙ алдында һәр саҡ үҙенә саҡырып шайтан һыуы ултырмаһа, ул ошо ғәҙәтен икенсе планға ҡуйып, йәшәүҙе дауам итәсәк.*

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

БАЛАҢ ҺИНЕ ҠАБАТЛАЙ...

(Башы 1-се биттә).

Ғәмәлдә, алкоголизм сирме, әллә яман ғәҙәтме? Әлбиттә, яман ғәҙәт. Быны бер генә миҫал менән раҫларға мөмкин. Мәҫәлән, ниндәйҙер ауыр сир менән сирләүсене һәм эскесене кеше йәшәмәгән утрауға алып барып, бер айлыҡ аҙыҡ-түлек менән ҡалдырып китһәң, дарыу ҡабул итмәгән сирленең тере ҡалыуы икеле, ә бына йәмғиәттә "сирле" тип ҡабул ителгән эскән кеше һин дә мин йөрөп ятасаҡ. Сөнки ысын сирле дарыу ҡабул итмәгән осраҡта оҙаҡ йәшәй алмай, ә эскән кеше, әгәр уның күҙ алдында һәр саҡ үҙенә саҡырып шайтан һыуы ултырмаһа, эргәһендә этил спиртынан эшләнгән, кешене алйотландырыусы башҡа эсемлектәр булмаһа, ул ошо ғәҙәтен икенсе планға ҡуйып, йәшәүҙе дауам итәсәк. Ошо фекерҙе раҫлау өсөн тағы ла бер миҫал килтермәксемен: иҫегеҙҙә булһа, Әхмәр Үтәбайҙың "Мин нисек эсеүҙе ташланым?" тип аталған үҙенең башынан үткән кисерештәре ғәзит биттәрендә лә, айырым китап булып та донъя күрҙе. Уны, әлбиттә, берәү ҙә кеше йәшәмәгән утрауға алып барып ташламаған, әммә ул күңелендә тыуҙырған ошо "утрауға" үҙен-үҙе биклəп, насар ғәҙәтенән арынырға көс тапҡан. Әгәр ул ниндәйҙер башҡа ауыр сир менән сирләгән булһа, дарыуҙан баш тартып, бөгөн тере булыр, уҡыусыларын үҙенең әҫәрҙәре, күҙәтеүҙәре менән ҡыуандырыр инеме икән?

Ни өсөн алкоголизм сир түгел, ә яман ғәҙәт һуң? Балалар тыуғанда уҡ аҡыллы булып, ер йөҙөндәге барлыҡ белемде үҙҙәрендә туплап тыуа, әммә система тәрбиәһе алған ата-әсәләр, балалар баҡсаһы, мәктәп, вуз, йәмғиәт уларҙан ошо белемде тиҙерәк сығарып бөтөрөргә тырыша, тигән ҡарашҡа күптән инанылған. Шуның кеүек, тыуған ваҡытта бер генә бала ла эскесе булып тыумай. Был алама ғәҙәттәргә улар ололарҙан күреп, йәмғиәттә көнө-төнө телевизор йәки башҡа каналдар аша һеңдерелгән пропаганда, магазинда йылтырашып ултырған төрлө шешәләр, хатта уларҙы билдәле йәшкә тиклем һатыуҙы тыйыу (тиҙерәк тәмләп ҡарағы килә) тураһындағы яҙыу аша ла өйрәнә. Шулай уҡ ғаиләләге байрамдарҙың эскегә ҡоролоуы, бала тыуһа - "тәпәй йыуыуҙар", һуңынан уларҙың һәр тыуған көнөн билдәләүҙәр ҙә (балаларға - компот йәки һут, ата-әсәләргә, башҡа ҡунаҡтарға - ҡатырағы) бала күңелендә "шулай тейеш", тигән ҡалып булдыра, уны ғәҙәткә индерә. Юҡҡа ғына: "Баланды тәрбиәләмә - үҙеңде тәрбиәлә, сөнки балаң барыбер һинең һүҙеңде тыңламаясаҡ, ә ҡылығыңды ҡабатлаясаҡ", - тимәйҙәр. Был юлдарҙан күренеүенсә лә, һүҙ тап ғәҙәт тураһында бара: бала өй эсендәге ғәҙәтте күрә, ҡабатлай. Аҡыллы, зиһенле ата-бабаларыбыҙ юҡҡа ғына, әҙәп төбө - ғәҙәт, тимәгән. Аңлағанға ишара был: әҙәп кенә түгел, насар ҡылыҡтар ҙа - ғәҙәттән.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Урал аръяғында Башҡорт дәүләт медицина университетының филиалын төҙөү тураһында тәкдим индерҙе, ошо яңылыҡты нисек ҡабул иттегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

Сәфәрғәли ЙӘНТҮРИН, биология фәндәре докторы, профессор: Был яңылыҡты бик ыңғай ҡабул иттем, сөнки кәрәкле эш. Ваҡытында Урал аръяғында прикладная математика, химия, биология фәндәре буйынса уҡытыусылар етешмәй ине. Сибай ҡалаһында Башҡорт дәүләт университеты филиалын асып, ошо мәсьәлә ыңғай хәл ителде. Шуның кеүек, был төбәкте кәрәкле врачтар менән дә тәьмин итеү өсөн киләһе ун йыллыҡҡа планлаштыра торған эш был. Яңы филиал йәш белгестәрҙе әҙерләү йәһәтенән генә түгел, әлеге көндә юғары квалификациялы фән кандидаттарын эшкә урынлаштырыу мөмкинлеген дә бирәсәк. Шуға, Өфөнән килгәндәрҙе генә түгел, ә урындағы интеллектуаль базаны файҙаланыуҙы ла күҙ уңында тоторға кәрәк. Яңы уҡыу йорто Сибай ҡалаһында асылһа, тағы ла шәп булыр ине. Сөнки ул, берҙән, башҡорт ҡалаһы, икенсенән, матди база ла, юғары белем биреү тәжрибәһе лә етерлек, өсөнсөнән, ҡалала медицина колледжы бар. Ғөмүмән, Башҡорт дәүләт медицина университетының филиалын булдырыу - етди проект, уны киләһе уҡыу йылына ентекле әҙерләп тормошҡа ашыра башлау кәрәктер.

Даян СОЛТАНҒУЖИН, БР Дәүләт Йыйылышы-Короллтай яныңдағы Йәштәр йәмғәғәт палатаһы ағзаһы, табип: Урал аръяғында Башҡорт дәүләт медицина университетының филиалын асыу стратегик йәһәттән дөрөҫ һәм мөһим ҡарар. Юғары белемле, квалификациялы яңы кадрҙар әҙерләү йәһәтенән бик кәрәкле эш. Яңы вуз медицина колледжы булған Сибай ҡалаһында урынлашһа, унда административ һорауҙарҙы ла еңелерәк хәл итеп буласаҡ. Шулай ҙа профессорҙар составын туплау һәм буласаҡ студенттарға практик белем биреүҙе ойоштороу мәсьәләһен дә тормошҡа ашыраһы бар. Дөйөм курс өсөн лекцияларҙы дистанцион рәүештә, онлайн бәйләнеш ярҙамында ла үткәрергә була һәм шуға был эш Өфө профессорҙары ярҙамында тиҙ арала яйға һалыныр, тип уйлайым. Ә бына табип өсөн иң мөһим практик белем биреүгә шарттар тыуҙырыуға ваҡыт кәрәк буласаҡ. Өфөлә был эш бик яҡшы ҡуйылған, студенттарға һәр төрлө йүнәлеш буйынса һөнәри оҫталыҡтарын камиллаштырыу өсөн шарттар бар. Шуға, филиал студенттарының практик белемен камиллаштырыу маҡсатында, бәлки, Өфөгә 2-3 айға уҡырға ебәрергә лә мөмкин булыр. Мәҫәлән, быға тиклем Башҡорт дәүләт аграр университетының Сибай филиалы эше тап шулай ҡоролғайны, студенттарға тәүҙә теоретик белем биреп, практик белемде Өфөлә алырға йүнәлтә инеләр. Әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, был филиал ике йыл ғына эшләп ябылды. Буласаҡ БДМУ-ның филиалын да ошо яҙмыш көтмәҫ микән, тип шикләнәм. Сөнки республика был өлкәлә кадрҙарға ҡытлыҡ кисерһә лә, төп вуз барыбер ҙә етәрлек белгестәр әҙерләй. Мәҫәлән, быйыл уҡыуҙы 1300-ҙән артыҡ студент тамамлап сыҡҡан, әммә бөтәһе лә һөнәре буйынса эшкә төшмәгән. Йәш кадрҙар әҙерләү менән бер рәттән, уларға эш шарттарын яҡшыртыу мәсьәләһе, аныҡлап әйткәндә, эш хаҡы күләмен күтәреү йәһәтенән дә үҙгәрештәр булырға тейеш. Сөнки бөгөн врачтың эш хаҡы уның иңенә һалынған яуаплылыҡ менән сағыштырғыһыҙ, төрлө отчет ҡағыҙҙарына күмелеп ултырыу һәм хоҡуҡ яҡлау органдарынан яҡлауһыҙ булыуы ла йәш белгестәрҙе ҡурҡыта. Шуға, хатта юғары уҡыу йортон тамамлаған осраҡта ла һөнәре буйынса тугел, ә ресторанфәләнгә эшкә китә, мөмкинлеге булғаны үҙ эшен асыуҙы хуп күрә. Әйтергә кәрәк, хатта "Макдоналдс"та эшләгән осраҡта ла ул аҡсаны дауаханала ҡарағанда күберәк таба. Сөнки врачтарҙың уртаса айлыҡ эш хаҡы 64 мең тиһәләр ҙә, беҙҙә врач ике-өс белгес урынына эшләргә мәжбүр булып ҡына ошо тиклем аҡса алыуы бар. Быныңөсөн врач үҙенең төп эшенән тыш өҫтәмә йөкләмә ала, тимәк, тултыраһы ҡағыҙ отчеттар һәм пациенттар һаны ике-өс тапҡыр күбәйә, иңгә алынған яуаплылыҡ арта. Шуға ла, яңы кадрҙар әҙерләү менән бер рәттән, һәр врачтың эш хаҡын 80-100 меңгә тиклем күтәреү йәһәтенән дә аныҡ ҡараҙҙар кәрәк. Исмаһам, сығарылыш уҡыусылары врач һөнәрен үҙләштереүгә теләп килер, йәш белгестәр һөнәре буйынса эшкә төшөргә ынтылып торор ине. Тағы ла, БДМУ-ның үҙендә бюджет урындары иҫәбен арттырып, Урал аръяғы дауаханаларына күберәк квота биреп һәм вуздың ҡеүәтен күтәреп тә кадрҙар әҙерләү мәсьәләһен хәл итергә булыр ине.

Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.

ИҒТИБАР!

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ ЯҘЫЛАЙЫҠ!

Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ әлеге ваҡытта 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индексы "Киске Өфө" гәзитенә 676 һум 02 тингә яҙыла ала. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы мәғлүмәтте таныштарығыҙға, әйләнә-тирәләгеләрегеҙгә лә еткерһәгеҙ ине.

Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек. Берҙән, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

Икенсенән, уҡыусыларыбыҙға даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торабыҙ икәнде белəһегеҙ. Был юлы ла гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер бүләккә **"Башкиры"; Фәүзиә Усмановаңың "Бөрйән йөрәге" (Беренсе китап; Икенсе китап); "Башҡорт халыҡ ижады"ның XV томы (мөнәжәттәр), Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"; Рәшит Шәкүрҙең "Йөрәктәге яҙмалар"; Азат Ярмуллиндың "У истоков Башкирской республики"; Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы фонды аудиокитабы, "Башҡортса дини календарь", Зәйнәб Биишеваның "Яҡтыға"** һәм "Китап" нәшриәтендә яңы баҫылып сыҡҡан башҡа китаптар менән бүләкләнер. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2019 йылдың президент гранттары конкурсында Башҡортостандың 55 коммерцияға ҡарамаған ойошмаһы еңеү яуланы. Уларҙы бойомға ашырыу өсөн 63,8 миллион һум йүнәлтелә. 2019 йылдың беренсе конкурсында Башҡортостан Республикаһының 38 коммерцияға ҡарамаған ойошмаһы 44,8 миллион һум йәлеп итте. Һөҙөмтәлә, быйыл президент гранттары конкурсында дөйөм суммаһы 108,5 миллион һумлыҡ 96 проект еңеүсе булды.

✓23-24 октябрҙә Өфөлә "Глобаллəшеү һәм полиэтник мөхит шарттарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте: тәжрибә һәм перспективалар" халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы ойошторолдо. Сараның маҡсаты - башҡорт телен, шулай уҡ глобаллəшеү дәүерендә Рәсәй халыҡтары телдәрен һаҡлау, үҫтереү һәм популярлаштырыу буйынса заманса йүнәлештәрҙе һәм фәнни тикшеренеүҙәрҙе өйрәнеү.

✓Башҡортостанда Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса әҙерләнгән "Рәсәй Федерацияһының һанлы иҡтисады" милли стратегияһының "Мәғлүмәт инфраструктураһы" проектын ғәмәлгә ашырыу башланды. Проект 100-ҙән алып меңгә тиклем кеше йәшәгән тораҡ пункттарҙа социаль әһәмиәтле объекттарҙа интернет үткәреүҙе күҙ уңында тота. Контракт шарттары буйынса, ағымдағы йылдың 1 декабренә тиклем оператор 722 социаль объектҡа интернет үткәргә тейеш.

✓"Башкиравтодор" акционерҙар йәмғиәте автопаркы 54 берәмек яңы техника менән тулыланды, улар предприятиеның 36 филиалы араһында бүленә һәм Башҡортостан райондарына юллана. Техника төбәк, муниципаль-ара һәм урындағы әһәмиәткә эйә юлдарҙы ремонтлау, төҙөү һәм тәртиптә тотоу өсөн файҙаланыла. Яңы юл техникаһы асҡыстарын Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тапшырҙы. Быйыл бөтәһе 97 берәмек техника, ә ҡалған өлөшөн йыл аҙағына тиклем һатып алыу күҙаллана.

✓Ҡариҙел ауылын урап үтә торған юл участкаһында яңы күпер һәм 10 саҡрымлыҡ юл асылды. Улар Бөрө - Таҙтүбә - Һатҡы юлының бер өлөшө булып тора. Эштәр бында өс йыл буйына барҙы. Проекттың дөйөм хаҡы 4 миллиард һумға баһалана, аҡсаны республика бюджеты бүлде. Төҙөлөштөң генераль подрядсыһы - "Башкиравтодор" акционерҙар йәмғиәте.

✓ *Ә гүзәл заттарыбыҙ хаҡындағы статистика тағы ла ҡурҡыныс: 2016 йылда Ҡытай ҡатын-ҡыҙҙарына ҡарағанда беҙҙекелер 6,8 һәм Һиндостанды-ҡыларға ҡарағанда 8,9 тапҡырға күберәк үлгән!*

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

Гәзитебеҙҙең эскелек хаҡында яҙылмаған һаны юҡтыр, моғайын. Бер яҡтан, бөтә донъя күләмендә, шул иҫәптән илебеҙҙә лә тәрән тамыр йәйгән бына ошо әшәке нәмәгә ҡаршы ҡәләмдәштәремдең матбуғатыбыҙ аша аяуһыҙ көрәшен күреп шатланһам, икенсе яҡтан, замана афәтенә әйләнгән был күренеш нығ ҡына хәүефкә һала.

АҘЫРАҠ ЭСӘЛӘР...

ҡытайҙар ҙа, һиндтар ҙа

Үткән йылдарҙа сыҡҡан өлкә гәзит-тәренең береһендәге кескәй генә бер мәғлүмәтте күреп, уға тағы һис кенә лә битараф булып ҡала алманым. Әллә ҡасанғы түгел ул - өс кенә йыл элекке. Алкоголь эсемлектәре эсеп үлгән кешеләр һаны хаҡында абсолют күрһәткестәр килтерелгәйне унда. Рәсәйҙә 2016 йылда ана шул шайтан эсемлегенән 43 мең ҡатын-ҡыҙ һәм 180 мең ир-ат яҡты донъя менән хушлашҡан икән. Үткән һандарҙа сыҡҡан мәҡәләләремдә "Илебеҙҙә йыл һайын меңәрләп кеше эскелек арҡаһында һәләк була", тип яҙғылай инем. Ғәфү итегеҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, яңылышҡанмын: "меңәрләп" түгел, ә тиҫтә, хатта йөҙәр меңләп икән дә баһа! Иҫ китерлек һандар! Һәр нәмә сағыштырыуҙа баҙығыраҡ күренә икәнен беләбеҙ.

Иғтибар итегеҙ: ошо бер йыл эсендә эскелектән үлгән кешеләр һаны Афған һуғышында 10 йыл дауамында һәләк булып ҡалған һалдат һәм офицерҙарға ҡарағанда яҡынса 22 тапҡырға күберәк! Һис бер һуғышһыҙ ҡырылабыҙ, йәмәғәт!

Иң башта иҫкә алып кителгән мәғлүмәткә ярашлы, абсолют күрһәткестәр буйынса Ҡытай һәм Һиндостандан ҡала - өсөнсө урындабыҙ (бер йыл эсендә Ҡытайҙа 59 мең ҡатын-ҡыҙ, 650 мең ир, ә Һиндостанда 42 мең ҡатын-ҡыҙ һәм 290 мең ир-егет эскелектән үлгән). Тәү ҡарауҙа "беҙ әле ҡытайҙыр һымаҡ уҡ түгелбеҙ икән" тип фекерләүселәр булыуы мөмкинлеген күҙаллап, абсолют күрһәткестәр менән мөрхәтһенмәй, шунда уҡ Ҡытай һәм Һиндостандың халҡын үҙебеҙҙең Рәсәй менән сағыштырып ҡараным. Беҙ Ҡытай халҡынан 9,4, ә Һиндостанлыларға ҡарағанда 8,7 тапҡырға аҙыраҡбыҙ икән (2016 йылдағы иҫәп менән, беҙҙә 146,5 миллион халыҡ булһа, Ҡытайҙа 1 миллиард 374 миллион, ә Һиндостанда - 1 миллиард 283 миллион кеше йәшәй). Эскелек арҡаһында һәр миллион кешегә күпме үлем тура килгәнен дә иҫәпләп сығарғас, сәстәрем үрә торҙо!

Беҙҙең ирҙәребеҙ хәмер сәбәбе менән ҡытайҙарҙан - 2,6, ә Һиндостанлыларға ҡарағанда 5,4 тапҡырға күберәк үлә лә баһа! Ә гүзәл заттарыбыҙ хаҡындағы статистика тағы ла ҡурҡыныс: 2016 йылда Ҡытай ҡатын-ҡыҙҙарына ҡарағанда беҙҙекелер 6,8 һәм Һиндостандыҡыларға ҡарағанда 8,9 тапҡырға күберәк үлгән! Беҙҙең илдәге эскелек арҡаһында яҡты донъя менән хушлашҡан ҡатын-ҡыҙҙар хатта Һиндостандың ирҙәренән дә уҙырып ебәргән. Һиндостанда бер йылда һәр миллион халыҡтан 226 ир хәмерҙән үлһә, беҙҙә - 294 ҡатын-ҡыҙ ана шул эскелек арҡаһында донъя ҡуйған!

Бына шулай, йәмәғәт, абсолют күрһәткестәр буйынса Ер йөҙөндә өсөнсө урында һаналһаҡ та, беренсе урынды башҡаларға бирмәйбеҙ икән...

Ауылдарыбыҙҙа, ҡалаларыбыҙҙа әҙәм сифатын юғалтҡан бәҙгә яҡташтарыбыҙҙы күреп борсолам. Айырыуса, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы йәлләйем. Ҡасандыр матур, һылыу, зифа буйлы, ысынлап та гүзәл зат булған, әммә бөгөнгө көндә биттәре шешенеп, күҙ төптәре күгәреп, танауҙары ҡыйшайып, ҡый контейнерҙарында соҡоноп йөрөгән йәп-йәш кенә һеңлекәштәрҙе күреп, кемдәрҙең генә йөрәге әрнемәй икән... Шулай булып тыумаған бит улар. Ҡасандыр бөхтә кейемле, әҙәпле, наҙлы был ҡыҙҙарыбыҙға кемдер ҡарап туя алмаған, ә кемдер уларҙы өҙөлөп һөйгән, иркәләгән дә булғандыр, әлбиттә. Әммә, күпмелер ваҡыттан, ифрат та "мәҙәни" рәүештә, хатта башҡаларҙан тартына-тартына, ғүмерендә беренсе мәртәбә шайтан эсемлегенән ауыҙ итә башлап, әкренләп кенә тәрән упҡынға тайып төшә лә башлағандыр улар. Бәлки, шул ваҡытта кемдеңдер аҡыллы кәңәшенә йәиһә ҡәтғи иҫкәртеүенә лә мохтаж булғандарҙыр...

"Беҙ бит улар һымаҡ күпләп түгел, ә эсә белеп кенә эсәбеҙ!.." тип хаталаныусыларға әйтер һүҙем. Аллаһы Тәғәлә күп эсеүҙе түгел, ә хәмерҙе бөтөнләйгә хәрәм ҡылған, йәғни, ҡәтғи тыйған. Ябай ғына итеп әйткәндә, 100 грамм йә 2 литр эсһәң дә гонаһы - бер үк. Раббыбыҙҙың бына ошо тыйыуын инҡар итеү була был!

Араҡы ҡолона әүерелеүҙән бер-беребеҙҙе, айырыуса йәштәребеҙҙе ҡурсалап ҡына торайыҡсы, ҡәҙерле милләттәштәр! Һәр мәжлесте хәмер менән оҙатып барыуҙан һәм шуны нормаға һанауҙан килә бит бына ошондай бәлә-ҡазалар. Балаларыбыҙ шундай "мәҙәни" мәжлестәребеҙҙе күреп үҫә! Балаларын "инде ҙурайҙы" тип һанаған ҡайһы бер ата-әсәләр хатта мәктәп сығарылышын да "шампан" менән билдәләүсән. Иҫерек стрелочник поезды яңылыш юлға бороп ебәргән һымаҡ, үҙ балаңа ифрат та хаталы, хатта төпһөҙ упҡынға тура юл күрһәтеү бит был. Ҡәҙерле ата-әсәләр, ғәзиздәребеҙҙең киләсәгенә битараф булмайыҡсы!

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

БЕҘҘЕКЕ ...

минекенән башлана

Бөгөнгө йәмғиәттәге ҡайһы бер күренештәргә ҡарайым да, ололарҙың ҡылығын балаларҙыҡына оҡшатам. Улар үҙҙәренекен, йәғни үҙ милкендә булған бөтөн нәмәне күҙ ҡараһы кеүек һаҡлай, ә дөйөм ҡулланыуҙа булған милекте, ниңәлер, үҙенеке итеп ҡабул итә алмай.

Баш ҡалала йыл һайын халыҡ өсөн, уларға йәшәү, ял итеү, уңайлы йәшәү өсөн мөмкин тиклем шарттар тыуҙырылырға тырышыла: яңы ял зоналары булдырыла, ихаталар төҙөкләндерелә, юл-транспорт инфраструктураһы яңыртыла. Әммә ошо хәстәрлекте баһаламаусылар ҙа бар шул. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, ҡаланың торлаҡ хужалығына йыл башынан 10 793 зыян килтерелгән, йәғни шунса вандаллыҡ ҡылынған. Йорттарҙың баҫҡыс майҙансыҡтары, абонент йәшниктәре, ут тоҡандырғыс-һүндергестәр, лифттар, ишектәр, эскәмйәләр, сүп һауыттары әленән-әле вандалдар тарафынан зыян күрә. Ниндәйҙер зыян эшләгәндән һуң, бәҙеләрҙең ҡысып торған ҡулдары тынысланып ҡалалыр, моғайын, әммә идара итеү ойошмалары ҡабаттан тергеҙеү-ремонт эштәре өсөн ошо йортта йәшәүселәрҙең, йәғни ошо уҡ вандалдарҙың ата-әсәһенең, күршеһенең, таныштарының һ.б. аҡсаһын тотоноуын ғына аңлап етмәй, шикелле.

Балалар һәм спорт майҙансыҡтарын, клумбаларҙы, сәскәлектәрҙе, сүп йыйыу өсөн ҡуйылған евроконтейнерҙарҙы, ҡоймаларҙың декоратив элементтарын, хатта туҡталыш павильондарын ҡыйратыу ҙа улар өсөн бер ни тормай. Әммә уларҙы тергеҙеү эштәре өсөн тағы ла һалымдарҙан һәм башҡа йыйымдарҙан тупланған бюджет тип аталған үҙ аҡсаһы сығып киткәнен генә аңламайҙар.

Үҙгәртеп ҡороуҙың коллективлыҡ тойғоһонан индивидуаллекте юғары ҡуйыу һөҙөмтәһелер был, моғайын. Һәр хәлдә, социаль тигеҙһеҙлек хөкөм һөргәндә дөйөм милекте "минеке" тип ҡабул итеү ауырыраҡ. Күңелдән бөтөн әйберҙе генә түгел, бөтөн Ер шарын үҙенеке итеп ҡабул иткән хәйләһеҙ баланы ҡыуып сығарҙы был тормош...

Франгизә ТАҺИРОВА.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

ТИГЕҘЛЕК...

беҙҙең файҙаға түгел

Гәзиттә лә күтәрелеп торған был темаға - милләтебеҙ өсөн ифрат мөһим бер сетерекле мәсьәләгә тура ҡарайыҡ. Башҡорт егет, ҡыҙҙары башҡа халыҡ вәкилдәре менән дә ғаилә ҡора.

Ҡатнаш ғаиләләрҙә ике яҡтың да йола, ғөрөф-ғәҙәттәре тигеҙ хөрмәт ителһә, ҡаһа ла һуң! Ғәмәлдә, был тигеҙлек беҙҙең файҙаға түгел: беҙҙекеләр "безнеке"ләрҙән еңел генә еңелеп, тиҙ арала икенсе арбаға күсеп ултыра. Ысынлап та, үҙеңдеке өсөн көрәшер кәрәк, ә былай, ризалаштың да ҡуйҙың... Аһһат бит! Беҙҙең ауылда борондан урыҫтар йәшәне. Бөтәһе тип әйтә алмайым, ләкин күптәре башҡортса тап-таҙа һөйләште. Бер кем уларҙы көслөп уҡытманы, өйрәтмәне. Улар үҙ теләге менән үҙҙәренең мәнфәғәттәрен яҡлар өсөн, кеше араһында ала ҡарға һымаҡ аңра булмаҫ өсөн, үҙҙәрен ауыл тормошонан мәхрүм итмәҫ өсөн өйрәнделәр телде. Телде, йолаларҙы белеп, ихтирам итә белеүҙәре арҡаһында аҫаба халыҡ менән яҡын аралашып, тигеҙ, татыу йәшәнеләр. Ауылыбыҙға татар кәләштәр алып ҡайтыусы ажар егеттәр ҙә булды, ләкин ғүмеремдә ул килендәрҙең береһенең дә башҡортса һөйләшә башлағанын ишетергә насип булманы. Бына ниндәй көслө халыҡ! Ҡайҙа, кем менән йәшәһә лә, үҙенекен һүҙ итә белеләр! Һоҡланырға, көнләшергә генә ҡала беҙгә...

Ҡайһы бер тәкәббер милләттәштәребеҙ үҙ мәҙәниәтенән, үҙ халҡынан ситләшкән мәлдә, башҡа аҡыллы милләт вәкилдәре беҙҙең бай рухиәтебеҙгә, бай мәҙәни хазиналарға ҡағылып, һыйынып, күңелдәрен байыталар, йән ләззәте кисерәләр. Мәрйә ҡыҙы Галина Сват күкрәгенә һалып ҡурайҙа уйнағанда, немец Вернер йәне менән бирелеп оҙон көйҙө йырлағанда йөрәкһенеүҙән алҡымдар ҡыҫылып, күҙгә йәштәр килә. Әллә мин генә шулай нескә хисле кешеменме икән? Ул һәләттәре менән милләттәштәренән ихтирам ғына түгел, оло абруй яулай улар, башҡалар күтәрелә алмаҫ үрҙәргә артылалар, үҙ булмышынан да юғарыраҡ өҫтөнлөккә эйә булыу бәхетенә өлгәшәләр. Рухлылыҡ ҡына түгел, аңлылыҡ өлгөһө түгелме ни улар беҙҙең ҡайһы бер аңһыҙ милләттәштәргә?..

Урал МОСТАФИН.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика етәксеһе Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле иғлан иткән флешмобты хуплауын белдерҙе һәм республиканан ситтә башҡарылған иң матур бейеү өсөн бүләк вәғәҙәләне. *#Башҡортбейеүенбашҡарам* флешмобы быйыл сентябрь айында башланды. Проектта ҡатнашыу өсөн башҡорт бейеүен бейергә һәм уны *#башҡортбейеүенбашҡарам, #башҡортбейеүенөйрәнәм* хештегтары менән интернетҡа һалырға кәрәк.

✓Өфөлә "Ҡурай даны" милли телепремияһы еңеүселәрен бүләкләйҙәр. Телепремияға 70 кеше күрһәтелгән. Уларҙы "Ҡурай" каналы тамашасылары тәкдим иткән. Еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы 5 ноябрҙә була. Проект етәксеһе Рита Өмөтбаева әйтеүенсә, "Ҡурай даны" көмөш миҙалы хужаларын телетамашасылар һайлай. Әлеге ваҡытта тауыш биргәндәрҙең дөйөм һаны - 47 мең кеше.

✓Башҡортостандың "Роспотребнадзор" идаралығынан киҫкен респиратор инфекцияһы менән сирләүселәрҙең күбәйеүе тураһында хәбәр иттеләр. Грипп теркәлмәй. Ауырыу кимәле эпидемик сиктән түбәнерәк. Республикала киҙеүгә ҡаршы прививка кампанияһы уҙғарыла. Бөгөнгә 817 мең кеше прививка эшләткән, уларҙың 178,9 меңе - балалар. Эпидемия миҙгелендә республикала 418 мең балаға һәм 1,4 миллион өлкән кешегә киҙеүгә ҡаршы прививка яһау күҙаллана.

✓"Рәсәй-1" телеканалында Сергей Брилевтың Башҡортостандың Бишбүләк районында тыуып үҫкән, Совет Рәсәйенең ғәрәп илдәрендәге беренсе тулы хоҡуҡлы илсеһе булған Кәрим Хәкимовтың яҙмышы тураһында сюжеты сыҡты. Сюжетта Кәрим Хәкимов йәшәгән йорт күрһәтелде.

✓27 йәшлек олимпия чемпионы, рапирасы һәм лейтенант Тимур Сафин VII Бөтә донъя хәрби уйындарында еңеү яуланы. Ҡытайҙың Ухань ҡалаһында яҡташыбыҙ финалда Франция спортсыһы Максим Потиҙы 15:9 иҫәбе менән еңде. Сафиндың "алтын"ы Рәсәй Хәрби көстәре йыйылмаһы иҫәбендә икенсе булды.

✓Мәскәүҙә VIII "Изгелек импульсы" премияһы лауреаттарын бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Премия йыл һайын социаль эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә өлөш индергән өсөн тапшырыла. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы "Киң мәғлүмәт сараһында социаль эшҡыуарлыҡты иң яҡшы яҡтыртҡан өсөн" номинацияһында премия лауреаты булды. Быйыл тағы бер лауреат исемен Лента-ру интернет-гәзите яуланы.

✓ *Парламент рәйесе һуңғы ваҡытта республика парламентының алкоголь һатыуҙы сикләүгә бәйле бер нисә закон ҡабул итеүен дә хәтергә төшөрҙө. Һуңғы ҡыңғырау, һабантуй уҙғарылған көндәрҙә, Белем көнөндә хәмер һатыу тыйыла.*

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

БАЛА ӨСӨН...

2020 йылдан Рәсәйҙә беренсе һәм икенсе балаға айлыҡ түләүҙәр күләме арта, тип хәбәр итә ТАСС, Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенә һылтанма менән. Әйтәйек, быйыл илдә түләүҙәрҙең уртаса күләме 11,2 мең һумға тиң икән, киләһе йылдан, төбәккә ҡарап, ул яҡынса 12 мең һум була. Түләүҙәр "Балаһы тыуған ғаиләләргә финанс ярҙамы" проектын ғәмәлгә ашырыу барышында арттырыла. Республиканың Хеҙмәт министрлығында билдәләүҙәренсә, 2020 йылдан ошо түләүҙәрҙе тәғәйенләү өсөн критерий үҙгәрә. Хәҙер йән башына уртаса килеме 1,5 йәшәү минимумы тәшкил иткән ғаиләләрҙең ошондай хоҡуғы булһа, 2020 йылдан 2 йәшәү минимумы критерийы индерелә. Өҫтәүенә, 2020 йылдан әлеге пособиеларҙы түләү ваҡыты балаға өс йәш тулғансы оҙайтылды. "Хәҙер Башҡортостанда пособиенең күләме - 9 182 һум. 2020 йылда ул 9 789 һумға еткерелә - 2019 йылдың икенсе кварталында бала өсөн билдәләнгән йәшәү минимумы күләме шундай", - тип асыҡлыҡ индерҙе Башҡортостан Хеҙмәт министрлығының матбуғат секретары Роза Кузьменко.

БЕР ҠАҒЫҘ...

Рәсәй Хөкүмәте, еренә еткереп эшләнгән осраҡта, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр буйынса берҙәм түләү документын индереү тураһында закон проектын хуплауы ихтимал. Әгәр закон проекты ҡабул ителһә, рәсәйлеләргә барлыҡ торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү ябайлаша. Үҙ сиратында, хөкүмәткә тарифтарҙың артыуын күҙәтеп барыу еңелләшә. Эксперттар фекеренсә, берҙәм түләү ҡағыҙы идара итеүсе компанияларҙың аҡсаны урлау хәүефен кәметә һәм иҫәп-хисапты асығыраҡ күрһәтә. Түләү ҡағыҙында түбәндәге юлдар барлыҡҡа килә: идара итеү, йортто тотоу һәм ағымдағы ремонт, коммуналь хеҙмәттәр һәм ресурстар, сүп-сар сығарыу һәм капиталь ремонт өсөн аҡса. Был документ бер юлы бер нисә бланкты алмаштыра. Бынан тыш, закон проекты авторҙары төбәктәрҙә иҫәп-хисапты үҙәкләштереү өсөн сығыш яһаны.

РУЛДӘ - ИҪЕРЕК

Владимир Путин иҫерек водитель ғәйебе менән үлемесле юл фажиғәһе өсөн енәйәт яуаплылығын көсәйтеү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, хәҙер юлтранспорт ваҡиғаһында һаулыҡҡа ауыр зыян килтерелгән осраҡта, иҫерек водителгә 3-тән 7 йылға тиклем иректән мәхрүм ителеү янай. Әле быныҢ өсөн 4 йылға иректән мәхрүм итеү ҡаралған. Авария ла кеше ғүмере өҙөлгән осраҡта, иҫерек водителгә яңы закон буйынса 5-12 йыл биреүҙәре мөмкин (элек 2-7 йыл). Ике һәм унан да күберәк кеше һәләк булған өсөн "иҫерек" юл-транспорт ваҡиғаларында ғәйеплеләргә 8-15 йыл янай (элек 4-9 йыл). Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 264-се статьяһының 2-се, 4-се һәм 6-сы бүлектәренә тейешле төҙәтмәләр индерелде.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

ҮЛЕМ ОСРАҒЫ КӘМЕРӘК

Ағымдағы йылдың 9 айында Башҡортостанда сәнәғәт етештереүе индексы 104,6 процент тәшкил итте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Рәсәй буйынса уртаса күрһәткестең 102,7 процент кимәлендә икәнен иҫәпкә алғанда, был бик һәйбәт күрһәткес булыуын белдерҙе.

Республиканың төҙөлөш комплексы күрһәткестәрен 2,7 процентҡа яҡшыртты. Торлаҡты файҙаланыуға тапшырыу 1,5 миллион квадрат метрҙан ашты, был уҙған йылдың ошо уҡ осоро күрһәткестәренән 11 процентҡа күберәк. Агросәнәғәт комплексында ыңғай тенденцияны һаҡлап ҡалыуға өлгәшелә, тип билдәләне республика етәксеһе. "Үҙебеҙҙең тәжрибәне, тәжрибәле кадрҙарҙың булыуын иҫәпкә алып, бында тағы ла әүҙемерәк эшләргә тейешбеҙ. Республика аграрийҙарға ярҙам күрһәтергә әҙер", - тине Радий Хәбиров, хөкүмәт вице-премьеры вазифаһын башҡарыусы Илшат Фәзрахмановҡа мөрәжәғәт итеп. Башҡортостанда халыҡтың үлем осраҡтары 3,8 процентҡа кәмене. "Күрелгән саралар комплексы беҙгә 3 меңгә яҡын кеше ғүмерен ҡотҡарырға мөмкинлек бирҙе. Юлтранспорт ваҡиғаларында һәләк булыу осраҡтары 8,8 процентҡа кәмене. Йәнә бер һан ҡыуандыра - хәмерҙән ағыуланып үлеү 7,1 процентҡа аҙайҙы. Ә Рәсәйҙә был күрһәткес 14 процентҡа артты һәм был, әлбиттә, шатландырмай. Был беҙҙә хоҡуҡ һаҡлаусыларҙың, муниципалитет башлыҡтарының, йәмәғәт ойошмаларының эштәре етди һөҙөмтәгә килтереүе хаҡында һөйләй", - тине республика Башлығы.

ЯҢЫ ЙЫЛДЫ - ЭСКЕҺЕҘ

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары Яңы йыл байрамдары осоронда хәмерҙе күпләп ҡулланыуҙы сикләү буйынса саралар әҙерләргә йыйына. Ошо проблема хаҡында хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә республика башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. "Яңы йыл каникулдарында төбәктә иҫерткес эсемлектәр һатыу йәһәтенән махсус саралар барырға әҙермен", - тине ул.

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев фекеренсә, республика Башлығы был проблеманы дөрөҫ һәм ваҡытында күтәреп сыҡты. "Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, оҙайлы яңы йыл байрамдарында хәмер эсеп, йәмәғәт тәртибен боҙоуҙар, енәйәттәр һаны артыуы даими билдәләнә. Бөтәһе лә мәҙәни байрам итә белмәй. Ошо проблеманы нисек хәл итеү тураһында уйларға кәрәк. Тыйыуҙар менән генә эш барып сыҡмаҫ. Халыҡтың билдәле бер категорияһында байрамда мотлаҡ алкоголь ҡулланырға тигән фекер йәшәй. Был "традиция" күптән бар. Шул уҡ ваҡытта йәмғиәттә кире тенденция - сәләмәт йәшәү рәүешенә ынтылыш күҙәтелә. Уны хупларға, Яңы йыл байрамдарында спорт һәм мәҙәни ял итеү мөмкинлектәрен киңәйтергә, күпселек халыҡты йәлеп итергә кәрәк. Икенсе яҡтан, ошо көндәрҙә спиртлы эсемлектәрҙе ирекле һатыуҙы сикләү өсөн республика ҡануниәтенә үҙгәрештәр индерергә мөмкин", - тип билдәләне республика парламенты спикеры. Дәүләт Йыйылышы әлеге мәсьәләне хәл итеү буйынса тәҡдимдәр ҡабул итә башланы ла инде. Уларҙы парламент сайтында ла ҡалдырырға була. "Киң йәмәғәтселекте үҙ-ара килешеп эш итергә саҡырабыҙ. Билдәләнгән темаға бәйле ҡануниәттә камиллаштырыу буйынса төрлө конструктив тәҡдимдәрҙе тыңларға әҙербеҙ". Парламент рәйесе һуңғы ваҡытта республика парламентының алкоголь һатыуҙы сикләүгә бәйле бер нисә закон ҡабул итеүен дә хәтергә төшөрҙө. Һуңғы ҡыңғырау һәм һабантуй уҙғарылған көндәрҙә, Йәштәр көнөндә, Белем көнөндә хәмер һатыу тыйыла. Республика халҡы был сараларҙы ыңғай ҡабул итте, уларҙы ҡулланыу тәжрибәһе күмәк халыҡ ҡатнашлығында үткәрелгән сараларҙа йәмәғәт тәртибенең һиҙелерлек яҡшырыуын күрһәтте.

УРМАНДАРҒА БАРҺАҢ...

Башҡортостанда йәшәүселәр үҙҙәренең смартфондарына бушлай "Башҡортостан Республикаһының урман картаһы" мобиль ҡушымтаһын күсереп алыу мөмкинлегенә эйә.

Ул Android һәм iOS операция системалары нигеҙендә эшләй. Ҡулланыусы урманды файҙаланыу тәртибен боҙоу осраҡтарын online, offline режимдарында фотоға төшөрөргә һәм мәғлүмәтте оператив тикшереүгә ебәрергә мөмкин. Башҡортостандың урман хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Марат Шәрәфетдинов Дәүләт Йыйылышының аграр комитеты ултырышында хәҙер ҡушымтаға ағас ултыртҡан йәки ҡырҡҡан участкаларҙың координата мәғлүмәттәре индерелеүе хаҡында һөйләне. Урман хужалығы хеҙмәткәрҙәренең дә мобиль эш ҡоралы барлыҡҡа килә. Ведомство башлығы республикала 390 кеше урманды һаҡлау менән шөғөлләнеүен билдәләне. Бөгөн бер инспекторға йөкләмә 14,6 мең гектар урман тәшкил итә. "Былтырҙан алып йыһан мониторингы системаһын файҙаланыу һөҙөмтәһендә рөхсәтһеҙ ағас ҡырҡыу осраҡтары һан буйынса - 34 процентҡа, күләм буйынса 12 процентҡа кәмене. Быйыл дөйөм майҙаны 1,5 миллион гектар тәшкил иткән ете урмансылыҡта йыһан мониторингы үткәрелде. Уҙған йылдан алып пилотһыҙ осоу аппараттарын да ҡуллана башланыҡ, киләсәккә маҡсат - законһыҙ урман ҡырҡыуҙы һәм янғындарҙы контролдә тотоу өсөн уларҙы даими файҙаланыу", - тине Марат Шәрәфетдинов.

ҒАИЛӘ ТАНЫТМАҺЫ

"Башҡортостанда күп балалы ғаиләләргә танытмалар бирә башланылар. Күп балалы статусын раҫлаған һәм магазиндарҙа, күңел асыу үҙәктәрендә, музейҙарҙа, театрҙарҙа төрлө ташлама, льгота алырға хоҡуҡ биргән рәсми документ республикала беренсе тапҡыр әҙерләнде", - тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Республикаһы Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан.

Танытма алыу өсөн Республика халыҡты социаль яҡлау үҙәге филиалына, йәиһә күп функциялы үҙәктең теләһә ниндәй офисына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Тәүге осраҡта танытманы - мөрәжәғәт иткән көндә үк, ә икенсеһендә 10 көндән һуң алырға мөмкин. Танытма алыу өсөн документтар йыйылмаһы ябай: ата-әсәнең паспорттары, никах йәки уны тарҡатыу тураһында таныҡлыҡ, ғаилә составы тураһында белешмә, бөтә балаларҙың да тыуыу тураһында таныҡлыҡтары (шул иҫәптән, тәрбиәгә, уллыҡҡа, опекаға алынғандарҙың). Әгәр ғаиләлә тәрбиәгә йәки опекаға алынған балалар бар икән, муниципаль органдарҙың тейешле ҡараҙарын күрһәтергә кәрәк. Баланың тыуыу тураһында таныҡлығына ата-аһы тураһында мәғлүмәттәр әсәнең ғаризаһы нигеҙендә индерелгән осраҡта, ЗАГС органы биргән махсус белешмә талап ителә.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында күренекле яҙыусы, публицист, драматург һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримгә бюст асылды. Бронза ялатылған бюстың скульпторы - Юрий Солдатов. Уның күсермәһе яҙыусы һуңғы йылдарҙа йәшәгән Энгельс урамындағы йорт барельефын биҙәй.

✓28 октябрҙә Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең 100 йыллыҡ юбилейына арнап уның 10 томлыҡ әҫәрҙәр йыйынтығының презентацияһы үтәсәк. Ойоштороусылар - Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте, Мостай Кәрим фонды. Башлана 15 сәғәттә. Үткәреү урыны: Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 62.

✓"Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркы күлендә баш ҡала "морждары" ҡыш көнө һыу инергә һәм сыныҡырға яратыусыларҙың яңы миҙгелен асты. Элек Өфө "морждары" яңы миҙгелде Иван Яҡутов исемендәге парктағы Һалдат күлендә аса торғайны. Республиканың Ҡышҡы йөҙөү һәм сыныҡыу федерацияһы етәксеһе Александр Пенкин һүҙҙәренсә, "Ҡашҡаҙан" паркы төҙөкләндерелгәндән һуң ҡышҡы йөҙөүҙе үҙ итеүселәрҙең тағы бер базаһы булараҡ ҡарала.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә өс томлыҡ "Балалар әҙәбиәте антологияһы"ның исем туйы уҙҙы. Йыйынтыҡ 2012-2018 йылдарҙа башҡорт һәм рус телдәрендә донъя күргән. Төҙөүсеһе - яҙыусы Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина. Антологияла 200-ҙән ашыу Башҡортостан яҙыусыһының әҫәрҙәре тупланған.

✓Ете йыл элек Өфөнөң Орджоникидзе районында шорт-трек буйынса күнекмәләр һәм ярыштар уҙғарыу өсөн ябыҡ һырғалаҡ төҙөлә башлағайны. Быйыл ноябрҙә спорт объекты тулыһынса файҙаланыуға тапшырыла. Һырғалаҡ трибунаһы 2000 тамашасы һыйҙырышлы. Бында шулай уҡ хореография һәм тренажер залдары бар. Ҡала хакимиәте һырғалаҡ эргәһендә бассейн һәм ике универсаль зал менән физкультура-һауыҡтырыу комплексы төҙөргә ниәтләй.

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры 26, 27, 28 октябрҙә Санкт-Петербург ҡалаһында ике спектакль күрһәтә. Сәфәр гастролдәр һәм Халыҡ-ара театр Олимпиадаһында ҡатнашыу сиктәрендә ойошторола.

“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.

✓ *"Билдәле кешеләр" бүлегендә 260 кешенең рәсеме, ерләнгән урыны, биографияһы, наградалары тураһында мәғлүмәт индерелгән. Һуғыш ветерандарының һәм ҡатнашыусыларының күпселеге исемлектә урын алған.*

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

"Аҡыллы төбәк" проекты тормошҡа ашырыла башлау менән, баш ҡалала яйлап ҡына барлыҡ хеҙмәттәр цифрлаштырыуҙың иң ябай варианты булған электрон системаға күсә башланы. Был - заман талабы, сөнки ваҡыт тиҙ аҡҡан осорҙа барлыҡ мәғлүмәт кешенең ҡул аҫтында, йәғни кеҫә телефонында булырға тейеш. Интернетты күптәр сүп ояһы менән сағыштырһа ла, уны йәштәрҙе патриотик рухта һәм быуындар күсәгилешлегендә тәрбиәләү маҡсатында ла файҙаланырға мөмкин.

ЭЛЕКТРОН ХӘТЕР КИТАБЫ...

иҫтәлектәр һаҡлай

Өфө ҡалаһының "Махсуслаштырылған хеҙмәтләндереү комбинаты" муниципаль бюджет учреждениеһы ошо маҡсаттан бер нисә йыл элек "Электрон хәтер китабы" IT-проектын тормошҡа ашыра башлағайны. Бөгөн ошо атамалағы сайт кешеләрҙең иҫтәлеген һаҡлау, ғаилә архивын һәм шәжәрәһен төҙөү төп маҡсаты булып торған электрон зыярат базаһына әүерелде. "Ерләнгән урыны" бүлеге яҡын кешегеҙ ятҡан урынды табырға ярҙам итә. "Ҡулланыусының шәхси кабинеты" булдырып һәм шуның аша инеп, мәңгелек йортонда ятыусыларҙың фотоларын, биографияһын өҫтәргә мөмкин. "Махсуслаштырылған хеҙмәтләндереү комбинаты" муниципаль бюджет учреждениеһы директоры Руслан Кинйәкәйев бөгөн сайтта 1370 шәхси кабинет булыуын һәм көнөнә уны уртаса 260 кеше (дөйөм алғанда 161500) ҡарауын билдәләй. Сайттың мобиль версияһы ла эшләй.

Ҡала зыяраттарында 1200 хәрби ҡәберлек иҫәпләнә, улар, нигеҙҙә, "Сергиев" һәм "Көньяҡ" зыяратта. Шулай уҡ "Билдәле кешеләр" бүлегендә 260 кешенең рәсеме, ерләнгән урыны, биографияһы, наградалары тураһында мәғлүмәт индерелгән. Һуғыш ветерандарының һәм ҡатнашыусыларының күпселеге исемлектә урын алған. Уны тулыландырыу буйынса "Юнармия" Бөтә Рәсәй балалар-үҫмерҙәр хәрби-патриотик ижтимағи хәрәкәтенең Өфө бүлексәһе менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлгән.

Әйткәндәй, республикала, Рәсәйҙә генә түгел, хәҙер инде донъяла танылыу яулаған Башҡорт Википедияһы ла республиканың билдәле кешеләре, арҙаҡлы шәхестәре тураһындағы мәҡәләләрҙә уларҙың ерләнгән урынын күрһәтеп, "Электрон хәтер китабы" сайтына һылтанма ҡуя. Сөнки глобаль энциклопедияның башҡорт тел бүлеге - икенсел сығанаҡ һәм ул һәр ваҡыт беренсел сығанаҡтарға ғына таянып эш итә. Абруйлы сығанаҡтарҙың электрон варианттары бик аҙ булыуынан сығып ҡарағанда ла, "Махсуслаштырылған хеҙмәтләндереү комбинаты" муниципаль бюджет учреждениеһы бик файҙалы һәм кәрәкле эш башҡара, тип әйтергә нигеҙ бар.

АФАРИН!

Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәре һәм шағир Шәйехзада Бабичтың йәш быуындары уның тураһындағы хәтерҙе һаҡлап йәшәй. Күптән түгел Мишкә районы Ҡыйғаҙытамаҡ ауылында шағир бюсы яңыртылыуы ла быға дәлил.

БАБИЧ РУХЫ...

туғандарҙы ла берләштерә

Ҡыйғаҙытамаҡ ауылын Бабичевтар нәҫеленең ата-бабалар төйәге, тиһәң дә яңылыш булмаҫ: шағирҙың атаһы ошо ауылдан, бөгөн дә бихисап нәҫел-нәсәбе бында донъя көтә. Йәмле йәй айҙарында шәжәрәләрен барлау маҡсатында илдең төрлө тарафтарынан йыйылған Бабичевтар шағирҙың бюсын яңыртыу идеяһы менән янып ҡайта. Уйлашып, нәҫелдәрен бейеклеккә күтәргән бөйөк шәхес бюсына лайыҡлы таҡтаташ ҡуйырға килешәләр. Ниһайәт, ошо көндәрҙә Бабич бюсына реставрация яһап, нигеҙенә гранит яҙыу беркетеп ҡуйғандар. "Ҡыйғаҙытамаҡ ауылы тотошлайы тиерлек беҙҙең нәҫел кешеләре, улар һәр ваҡыт ихлас ҡаршы алып, уртаҡ эштәргә ҡушылырға ғына торалар. Был юлы һәйкәлде ипкә килтерергә "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбленең художество етәксеһе, шулай уҡ Бабичтар нәҫеленән булған Нәфирә Иҡсанова һәм бер туған ағайым Рәйес Бабичев менән барҙыҡ. Ә ҡунаҡсыл ауыл халҡы Ҡөрьән табынына йыйып, был ваҡиғаға хөрмәт күрһәтте", - тине генә изге эштәре тураһында бәйән итеп Таврис Бабичев.

Таврис Сәғит улы Шәйехзада Бабичҡа атаһы яғынан туған булып сыға икән, ул үҙ шәжәрәһендәге быуындарҙы 1812 йылдан алып яҡшы белә. Әммә һаман да ата-бабалары һәм бигерәк тә Шәйехзада Мөхәмәтзакир улы тураһында тарихи мәғлүмәттәрҙе өйрәнеүҙе дауам итә, хатта республиканың Милли архивында ғына түгел, яҡын киләсәктә Ырымбур өлкәһе архивтарына ла мөрәжәғәт итергә йыйына.

- Атайым Сәғит Сәйфелмөлөк улы "Бабичев" фамилияһының килеп сығышы тураһында ла үҙе белгәнсә аңлатма биреп һөйләй торғайны, ырыу-заттарыбыҙ тураһында ла күп белде. Ул репрессияланып, Белорет ҡалаһына эшкә ебәрелә, әсәйебеҙ менән шунда танышалар. Һуңынан Өфө районына Чесноковка ауылына күсеп киләләр һәм беҙ шунда тыуып үҫтек. Тик атайым бик иртә донъя ҡуйҙы, миңә 10 йәш кенә ине. Бала саҡта ул һөйләгәндәрҙе иғтибарлап тыңламағаныма үкенәм, күп нәмәләр хәтерҙә ҡалмаған. Тағы бер үкенесебеҙ бар: беҙ, ете бер туғандар, урыҫ ауылында үҫкәс, башҡорт телен яҡшы белмәйбеҙ. Бер ни тиклем аңлайбыҙ, әммә һөйләшә һәм уҡый алмайбыҙ. Шулай ҙа "Бабич" фильмын башҡортса ҡарағанда күңелем менән аңланым, тимәк, Бабич рухы йәшәй беҙҙә", - тип һөйләй оло ғорурлыҡ менән Таврис Бабичев.

Әйткәндәй, Таврис Бабичев үҙ фамилияһын ғорурланып йөрөтөүсе һирәктәрҙең береһе булыуы өсөн ата-бабалары рухына сикһеҙ рәхмәтле. Шуға ла заттарын данлыҡлы иткән бөйөк шәхесте киләсәк быуындар хәтерендә мәңгеллләштереүгә ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә әҙер. Ә иң мөһиме, уға был эштә теләктәшлек күрһәтеп торған яҡын туғандары берҙәм.

Камила ҒӘЛИЕВА.

ҠЫСҠАСА

ЯЛҒАНҒА ТАРЫМА...

Социаль селтәрҙәрҙә республика Башлығы Радий Хәбировтың бик күп ялған аккаунттары барлыҡҡа килде. Уларҙа Башҡортостан етәксеһе исеменән ялыуҙар йыйыла һәм төрлө вәғәҙәләр таратыла. Ундағы комментарийҙарҙы бер кем дә контролдә тотмай һәм Радий Хәбиров уларҙы күрмәй. Әгәр неҙ ысынлап та республика башлығына социаль селтәрҙәр аша мөрәжәғәт итергә теләһәгеҙ, уның "Бәйләнештә", "Инстаграм", "Класташтар" йәки "Фейсбук"тағы рәсми сәхифәләренән файҙаланығыҙ. Башлыҡ хакимиәте ҡарамағындағы халыҡ мөрәжәғәттәре буйынса эшсе төркөм хеҙмәткәрҙәре ундағы мөрәжәғәттәрҙе иҫәпкә алып бара һәм мәсьәләләрҙе хәл итергә тырыша. Радий Хәбировтың бөтә сәхифәләре лә верификацияланған, йәғни социаль селтәр хакимиәте уныҡы икәненә ышанған. Верификацияланған аккаунттарҙа исем янында күк төҫтәге билдә тора. Был ябай һүрәт кенә түгел - әгәр уға курсорҙы яҡыныраҡ килтерһәк, "Раҫланған профиль" йәки "раҫланған сәхифә" тигән яҙыу сыға.

✓ **Башҡортостанда 5-8 ноябрҙә экологик белем аҙналығы уҙғарыла. Акцияны Башҡортостан Экология министрлығы һәм район хакимиәттәре менән берлектә Республика балалар экология-биология үҙәге ойоштора.** Акция барышында мәктәптәрҙә экологик дәрестәр үткәрергә, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү һәм сүп-сарҙы айырым йыйыу өлкәһендәге реформаның положениеларын аңлатырға тәҡдим ителә. Экология министрлығы эштә разделяйснами.рф һәм мояроссии.рф ресурстарын файҙаланырға көнөш бирә. Билдәләнеүенсә, 15-20 апрелдә "Экологик белем аҙналығы"нда 60 мең уҡыусы һәм студент ҡатнашҡан, 1700-гә яҡын экодәрес ойошторолған. Акция #ЙәшелБашҡортостан Республика экологик проекты сиктәрендә уҙғарыла.

✓ **Өфөлә Яңы йылға 20 шыршы ҡуйыу күҙаллана. Шуларҙың икәүһе баш ҡалала - Ленин һәм Салауат Юлаев майҙандарында, 18-е - райондарҙа.** 22 октябрҙә мәриәлағы оператив кәңәшмәлә улар буйынса иллюминация концепцияһы һәм Ленин майҙанында - ысын, ә Салауат Юлаев майҙанында яһалма шыршы ултыртыу хаҡында хәбәр иттеләр. Шулай уҡ боҙ ҡаласыҡтарын биҙәүҙең дизайн-проекты әҙерләнә. Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова Яңы йыл алдынан ҡала предприятиелары учреждениелары араһында "Байрамса Өфө" конкурсын үткәреү тураһында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, хеҙер ойошмаларҙан ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул ителә. Йомғаҡ 30 декабрҙә яһала: беренсе урын өсөн еңеүсегә - 150 мең һум һәм иҫтәлекле статуэтка, икенсегә - 100 мең һум, өсөнсөгә 50 мең һум тапшырыла.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Быуындар һыҙлаһа, боҙ ярҙам итә

❖ Боҙ менән һыҙлаған быуындарға, бәрелгән ергә, күгәргән урынға массаж яһарға. Боҙ киҫәген һыҙлаған, күгәргән ер тирәләй йөрөтәһең, һөртәһең, ә аҙаҡ инде ауыртҡан быуындың тап уртаһына ҡуйып, 2-3 минут тотаһың. Быны көнөнә 2-3 мәртәбә эшләргә кәрәк. Һуңынан быуынды һелкетеп ҡарарға, бер нисә күнегеү яһарға кәрәк.

Ҡул ярылһа, үксә ярылһа

❖ Ҡул, бармаҡтар ярылһа, сәй бәшмәгенә 5-10 минут тығып торорғоҙ, аҙаҡ крем һөртөгөҙ. Яралар төҙәлеп бөтһөн өсөн быны 3-5 мәртәбә эшләгеҙ.

❖ Үксәләр ярылһа, йоҡларға ятыр алдынан сәй бәшмәге менән компресс яһағыҙ, ә иртәнсәк содалы һыуға тығып ултырығыҙ. Үксә шымарһын өсөн 2-3 тапҡыр эшләү ҙә етә.

Шәкәр юғары булғанда

❖ 2 ҡалаҡ ҡабығы әрселгән ҡыҙҙырылмаған көнбағыш еменә ярты литр һыу ҡойоп, эмалле һауытта һүлпән утта 25 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә. Шуны 3 өлөшкә бүлергә, ашауҙан 30 минут алда көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

Бауыр, эсәктәрҙе таҙалау

❖ Ярты стакан лимон һыуына 200 грамм бал һәм 2 ҡалаҡ зәйтүн майы ҡушып болғатырға. Шул ҡатнашманы иртәнсәк берәр балғалаҡ эсергә. Ул бауырҙы ла, эсәктәрҙе лә таҙалай, һаулыҡты нығыта.

Тауыш ҡарлыҡһа

❖ Кәстрүлгә 1 стакан һыу, әнис сәскәһен ярты стакан ҡушып, 15 минут ҡайнатырға. Әнисте кәстрүлдән алып ташларға, төнәтмәгә 1/4 стакан бал, 1 ҡалаҡ коньяк ҡушып болғатырға. Һәр 30 минут һайын берәр ҡалаҡ ҡабул итергә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Бөтә милләттәр ҙә туған телен һаҡлап ҡалыу маҡсатында Дисней геройҙарын, билдәле совет йәнһүрәттәре персонаждарын үҙ телдәрендә "һөйләштереү" буйынса эш башланы.*

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!

БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

Декоратив биҙәк һалыу сифаты буйынса һирәк булған, 1972 йылда Яҡуп ауылында (Силәбе өлкәһе) осраған өс буйҙан торған һуғылған келәмде өҫтәмә һоҫалар ярҙамында төҫлө епте ҡатлап һалынған шаҡмаҡ һәм мөйөштәре шыршы итеп йыйналған биҙәктәр йәмләгән; улар таҡ буйҙарҙа сиратлашып килгән.

Туҡыма сирень, аҡ, ҡыҙылһыу, көрән, һары ептәрҙән һуғылған һәм сите ҡаракөрән ҡайма менән уратылған. Балаҫтың туҡымалары ялғанған урында шахмат тәртибендә урынлашҡан ике рәт миниатюр шаҡмаҡсыҡтар өҫтәмә биҙәк булып торған. Биҙәкләү ҡузырҙары хисаплап сигеүҙе хәтерләткән.



Ерлеге төрлө төҫтәргә бүленгән балаҫ (Силәбе өлкәһе). Автор фотоһы. 1972

Биҙәктәре өҫкә сығарылған бындай балаҫтар Башҡортостанда эшләнмәгән, әммә көньяҡтың малсылыҡ һәм һарыҡсылыҡ менән шөғөлләнеүселәре (ҡаҙаҡтар, үзбәктәр, ҡырғыҙҙар, Дағстан халыҡтары) һуҡҡан.

Урал аръяғының биҙәкте ҡуша һуғыу ысулы менән дә, сүпләм ысулын ҡулланып та һуғылған бер төрлө элементтарҙан (ғәҙәттә, ҡыя шаҡмаҡтарҙан) торған селтәр биҙәкле һәм оялап биҙәкләнгән келәмдәренең киң биҙәкле ҡаймаһы булмауы хас күренеш. Ҡара, йәки ҡара көрән төҫтәге ерлек киң ситләү булып һуҙылған. Биҙәкте ҡуша һуғып эшләгәндә селтәр биҙәк бер төрлөрәк, тығыҙ булған, ҡыя шаҡмаҡтар селтәренең тышҡы һыҙаттары ерлек төҫөнә тап килтереп эшләнгән. Сүпләм ысулын ҡулланғанда биҙәк күләмле булған, "кирбестәрҙән" йыйналған ҡыя шаҡмаҡтар (ромб) бербереһенән айырымланып, ҙурлыҡтары һәм эске биҙәлеше менән айырылып торған. Уларҙың тышҡы һыҙаты ике-өс тапҡыр ҡабатланған, һәр рәт икенсе төҫтән эшләнгән, ә уртаһы ҙур булмаған тура дүртмөйөш ("фонарик") рәүешендә айырылып сығып торған. Ҡайһы бер композицияларҙа тура дүртмөйөш күсәргә "индереп" эшләнгән.

Ҡыя дүртмөйөш биҙәкле балаҫ (Силәбе һәм Ҡурған өлкәләре). Автор фотоһы. 1972

Светлана ШИТОВА. "Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.

АТАЙ-ӘСӘЙҘӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

БАЛАҒЫҘ ТЕЛЕН...

йәнһүрәттәр боҙамы?

Ошо көндәрҙә ҡасандыр үҙем башҡорт теленән уҡытҡан уҡыусымдың өйөндә булырға тура килде. Ире менән башҡортса, балалары менән урыҫса һөйләшәләр. "Хәҙер беҙҙә балалар башҡортса белмәй", - тип ҡуйҙы әсәй кеше минән ғәфү үтенгән төҫлө итеп...

Быға тиклем мәктәптә лә булғайным. Ябай ауыл мәктәбе ул. Дөрөҫ, ҡалаға бик яҡын ауыл, шуға балаларҙа урыҫса һөйләшеү теләге элек тә көслө була торғайны, әммә башҡортса ла яҡшы беләләр ине. Ә хәҙер бында бәләкәс кенә ҡыҙмалайҙарҙың бөтәһе лә "бөйөк һәм ҡеүәтле" телдә һөйләшеп маташа.

Берәүһе бөтөнләй шаҡ ҡатырҙы. Үҙен тыйып маташҡан ата-әсәһенә, өләсәһе-олатаһына был сабый: "Это вам, башкирам, ничего нельзя, а нам, русским, все можно", - тип хәбәр һалмаһынмы... Баҡһаң, ул русса һөйләшһең, үҙең дә рус кешеһе булаһың тип уйлай икән!

Был нилектән шулай килеп сыҡты һуң әле, тип аптыранған атай-әсәйҙәр, педагогтар, йәмәғәтселек, һорауға яуап эҙләп, социаль селтәрҙәрҙә ҡыҙып-ҡыҙып фекер ҙә алышты. Ниһайәт, "ғәйепле" табылды: ул да булһа, бәләкәстәр ҙә, ололар ҙа яратҡан ғәйепһеҙ генә йәнһүрәт булып сыҡты. Дөрөҫөрәге, ғәйеп - көнө-төнө экрандан йәнһүрәттәр әйләндергән телеканалдарҙа. "Йәнһүрәт" тип, башҡортса матур исем дә уйлап табып ҡаранығ уларға. Әммә, үкенескә, унан ғына йәнһүрәттәр башҡортсаға әйләнмәне...

Әйткәндәй, был мәсьәлә бер беҙҙең башҡорт халҡын ғына уйға һалмай. Бөтә милләттәр ҙә туған телен һаҡлап ҡалыу маҡсатында Дисней геройҙарын, билдәле совет йәнһүрәттәре персонаждарын үҙ телдәрендә "һөйләштереү" буйынса эш башланы. Беҙҙең зыялылар ҙа туған телде белмәгән тотош бер быуын үҫеп, улар ҙа балаларын урыҫ телле итеп үҫтермәҫ элек башҡорт телендә ҡыҙыҡлы йәнһүрәттәр төшөрөү, булғандарына сифатлы тәржемәләр яһау, был мәсьәләне дәүләт кимәленә күтәреү, аҡса бүлеү, гранттар булдырыу тураһында күп яҡшы тәҡдимдәр индерә. Күптәр, һәр ваҡыттағыса, башҡорт телен ҡыҫмаҡлауға зарлана.

...Ошо көндәрҙә экрандарға сыҡҡан Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" әҫәре буйынса төшөрөлгән "Һеңлекәш" фильмын ҡараным. Бына Мәскәүҙән килгән рус режиссеры тотто ла башҡорт телендә балалар өсөн фильм төшөрҙө лә ҡуйҙы. Берәү ҙә уны тыймаған да, ҡыҫмаған да...

Интернетта рус телле аудитория киноның башҡорт телендә булыуына ризаһыҙлыҡ белдергән комментарийҙар яҙа яҙыуын. Әммә Александр Галибин премьера ваҡытында: "Беҙ әҫәрҙәге башҡорт һүҙен һаҡларға тырыштыҡ - шул беҙгә ҡәҙерле ине", - тине. Һәм бына башҡорт телендәге кинофильм бөтә Рәсәй буйлап атлай, юғары наградалар ала - был беҙҙең өсөн ниндәй ҙур ғорурлыҡ!

Ә бит Рәсәйҙә балалар кинематографияһы юҡҡа сыға барыуы тураһында күпме саң ҡағалар. Сөнки балалар тураһындағы кинолар менән байып булмай. Шуға улар хәҙер төшөрөлмәй тиерлек, төшөрөлһә лә, күберәк балалар ҡатнашҡан өлкәндәр тураһындағы картина булып сыға улар. Шунлыҡтан, "Һеңлекәш" нәҡ балалар тормошон ғына һүрәтләүе менән, улар үҙ аңы менән ҡабул итерлек ябай булыуы менән ҡәҙерле тип уйлайым. Һәм унда, киреһенсә, ололар балалар тураһындағы картинала ҡатнаша. Шуға ла А. Галибин үҙенең интервьюларында совет осоронда балалар режиссеры Ролан Быков тыуҙырған традицияларҙы тергеҙеүҙе маҡсат итеп ҡуйыуын, үҙәктә бәләкәй кешеләр, уларҙың йәшәү рәүеше, уйҙары, хыялдары тороуын, фильмды күберәк кескәй тамашасылар ҡараһын тип теләүен ҡабатлай. Йәш актерҙарҙы нисек уйнарға өйрәтмәйенсә, уларға үҙ-үҙҙәре булып ҡалырға ирек биреүҙәре, шуға тәбиғи уйын килеп сығыуы тураһында ла әйтә.

Әйтергә теләгәнем шул: әгәр бөгөн балаларҙың теле экран теленә бәйле икән, ошондай беҙҙең тормошто яҡтыртҡан, аңлайышлы, уларҙың тормошо, ҡыҙыҡһыныуҙары үҙәктә торған әҫәрҙәр яҙырға, кинофильмдар, йәнһүрәттәр, телетапшырыуҙар төшөрөргә кәрәк.

Юғиһә, беҙҙең телевидение, радиола барған балалар тапшырыуҙарының ҡайһы бер-ҙәре ололар өсөн төшөрөлгән кеүек, малай-ҡыҙҙар өлкәндәр өйрәткәндән артыҡ һүҙ әйтмәй, уларға тәбиғи булырға ирек бирелмәй - был бит һиҙелеп тора. Ә бәләкәстәр яһалмалыҡты оло кешенән дә нығыраҡ тоя.

Ә "Һеңлекәш"те, иманым камил, бөтә башҡорт ғаиләләре балалары менән, уҡыусылар кластары менән ҡараясаҡ. Сөнки ул беҙҙеңсә, балаларыбыҙға аңлайышлы, ябай башҡорт телендә. Раҫлау өсөн һүҙемде "Бәйләнештә"ге интернет-дуҫым Сәриә Рамазанова яҙған пост менән тамамлағым килә: "Әсәй, һин илама, был кино ғына", - тип ҡыҙым йыуата. Үҙе Йәмил менән Оксананың бергә ҡалыуҙарын теләй, борсола, фильм буйынса һорауҙарын яуҙыра ғына. Йәш тулған күҙҙәремде һөртәһөртә, ҡыҙыма яуап бирәм. Эйе, күңел тулған, иламайынса ҡарау мөмкин түгел... Иҫ киткес шәп башҡорт фильмы төшөрөлөүенә ҡыуандым. Мотлаҡ уны һәр кем ҡарарға, уйланырға тейеш. Режиссер Александр Галибинға хәрби-патриотик фильм өсөн рәхмәт! Был фильм - һәр өйҙөң йәме ул!"

Рәхимә МУСИНА.
Әбйәлил районы.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

ҺУЙЫРҘАРҒА НИ БУЛҒАН?

Беҙҙең яҡтарҙа урман тауығы - һуйырҙы күрмәгән кеше юҡтыр ул. Был ҡоштар бигерәк тә яҙын уйнағанында, юлға сығып таш сүпләгән саҡтарында йыш осрай. Ә бына һуйырҙы ауылда күреү - ғәҙәти булмаған хәл.

Мәҫәлән, 16 октябрь көнө "Шүлгәнташ" тәбиғәт ҡурсаулығының Ырғыҙлы ауылында урынлашҡан үҙәк контора эргәһендә хеҙмәткәрҙәр йәш ата һуйырҙы күҙәтте. Ул ҡойма эргәһенә һыйынып, үҙен күҙәтеүселәрҙе күрмәмеш булып йөрөй бирҙе. Ҡурсаулыҡтың әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре, зоолог Марина Бакалова фаразлауынса, был һуйыр йыртҡыстар йәки һунарсылар тарафынан өркөтөлөп, төркөмөнән айырылған булыуы һәм ауылға яҡлау эҙләп килеүе мөмкин.

Оҡшаш хәл 2017 йылдың ғинуарында булғайны. Ул саҡта Ҡотан ауылының зыяратында ата һуйыр 10 көн тирәһе төнәне. Хатта ҡурҡмайынса ауылға килеп, кешеләрҙең һарай баштарында, ихаталарында йөрөнө. Ошо уҡ ваҡытта Ырғыҙлыла йәш ата һуйыр ауыл уртаһындағы бер өйҙөң башында маһайып ултырҙы, йоҡларға урынды һарай баштарында һайланы, ә "иртәнге ашҡа" мәктәп эргәһендәге ҡарағайҙарға осто.

Һуйырҙарҙың бындай ҡыланыштары нимәгә бәйле икәнен ғалимдар әлегә аңлата алмай. Бәлки улар кешеләрҙән ҡурҡмай башлағандарҙыр? Әллә тәбиғәттә беҙгә күренмәгән үҙгәрештәр барамы икән?

Ҡурсаулыҡта сентябрь айының беренсе яртыһында үткән хайуандарҙы иҫәпкә алыуҙар һөҙөмтәһе буйынса, һуйырҙарҙың төркөмләшеүе түбәнәйгән, ә осрағандарының күбеһе яңғыҙаҡтар булыуы асыҡланды. Һуңғы иҫәп буйынса ҡурсаулыҡта бөтәһе 470 һуйыр булыуы билдәле. Алдағы йылдарҙа һуйырҙарҙың һаны тағы ла артыр тигән өмөттә ҡалабыҙ.

Белешмә: *Википедия мәғлүмәттәре буйынса уны һуйыр, урман тауығы, һаңғырау ҡор, селәүсен тип атайҙар. Һуйыр Башҡортостандың таулы-урманлы өлөшөндә, ҡарағай күпләп үҫкән урмандарҙа йәшәүсе эре ҡош. Уйын ваҡытында ата ҡоштар шартылдау һәм салғы яныуына оҡшаған тауыштар сығара, инә ҡош ҡорҡолдай. Ҡарағай һәм шыршы энәләре, төрлө еләк, орлоҡ, бөрө менән туҡлана. Ултыраҡ ҡош. Ерҙә оя ҡора. Үлән, япраҡ, ҡауырһындар менән түшәлгән соҡор эсендә көрәнһыу таптар менән сыбарланған 8-10 аҡһыл һары йоморткаһала. Йылына бер тапҡыр себеш сығара. Ите өсөн аулауҙары арҡаһында һаны кәмеүе мөмкин.*

Айһылыу НОҒОМАНОВА,
"Шүлгәнташ" ҡурсаулығы хеҙмәткәре.
Бөрйән районы.

✓ *Көҙәйҙәр үҙҙәренең килеп сығышын төрлөсә аңлата. Шайтан-көҙәйҙәрҙең бер риүәйәтендә ата-бабаларының Кавказ тарафтарынан килеүе бәйән ителә. Төркмән-көҙәйҙәр, әлбиттә, боронғо илдәренең Урта Азияла булыуын раҫлай.*

ЫРЫУЫҢ КЕМ?



САЛАУАТЛЫ КӨҘӘЙ ЫРЫУЫНАН БЕҘ

Көҙәй ырыуының килеп сығышы буйынса аныҡ мәғлүмәттәр күп түгел. Был башҡорт ырыуының Тарихи Башҡортостан ерлегендә оло абруй ҡаҙанған Әйле берләшмәһенә инеүе, уның урта быуаттарҙағы йәшәйеше хаҡында яҙма сығанаҡтар ҙа юҡҡа иҫәп. Шуға ҡарамаҫтан, башҡа төрки халыҡтарында көҙәй этнонимына оҡшаш атамалы ҡәүемдәрҙең булыуын иҫәпкә алып, улар хаҡындағы урта быуаттарға ҡараған мәғлүмәттәр менән бер рәттән, шәжәрә материалдарын, риүәйәттәрҙе, ырыу атрибутикаһын (тамға, оран, онгон - ырыу ҡошо, ағасы) ҡулланыу аша этнолог Р.Ғ. Кузеев ошо ырыу хаҡында билдәле һығымталар яһай алған.

Башҡорт этник тарихын өйрәнеүгә күп көс һалған ғалим көҙәй ырыуының да беҙҙең эраның I мең йыллығы урталарынан VIII-IX быуаттарға тиклемге арауыҡта боронғо башҡорт этносы формалашыуында ҡатнашыуын күҙаллай. "Һырдаръя һәм Арал тирәһендәге ерҙәрҙәге бәшнәк этник мөхитендә боронғо башҡорт ҡәбиләләре төркөмө барлыҡҡа килә. Был ҡәбиләләрҙең этнографик базаһы ҙтә ҡатмарлы була. Был төркөмдөң этник нигеҙе боронғо төрки һәм бер ни тиклем кимәлдә төркиләшкән боронғо монгол ҡәүемдәренән хасил була. Уларҙың әүәлерәк булған этник тарихы, башлыса, Үҙәк Азия һәм Алтайҙағы төрки мөхитенә, төркиҙәрҙең көнбайышҡа табан миграцияһының кульминацион этабына ҡарай (үҫәргән, бөрйән, байлар, сураш, түңгәүер, яғалбай, тамъян, ун, бишул, көҙәй)", - тип яҙа тарихсы.

Көҙәйҙәр үҙҙәренең килеп сығышын төрлөсә аңлата. Шайтан-көҙәйҙәрҙең бер риүәйәтендә ата-бабаларының Кавказ тарафтарынан килеүе бәйән ителә. Төркмән-көҙәйҙәр, әлбиттә, боронғо илдәренең Урта Азияла булыуын раҫлай. Көҙәйҙәрҙә тарихи сығыштарын Ыҡ буйҙары, Минзәлә өйәҙе менән бәйләп аңлатыусылар ҙа булған. Урман-көҙәйҙәр араһынан хатта ки "ата-бабаларыбыҙ мариҙарҙан булып, был яҡтарға Ҡаҙан тарафтарынан һунарсылыҡ менән шөғөлләнер өсөн килгән икән", тип һөйләүселәр ҙә теркәлгән.

Билдәле башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев яҙмаларында көҙәй ырыуы тарихына ҡағылған мәғлүмәт бар. Ул "Фарханг-намә тарихы" тигән китапҡа ҡарата яҙылған иҫкәрмәләрҙә Сәйҙәш исемле хандың улы Ҡоштаймаҫ, ейәне Әйле, бүләһе Тенеш, шулай уҡ Тенештең башҡорт хандары булып киткән улдары - Көҙәй һәм Ҡошсо иҫкә алыныуы хаҡында яҙа. Тажетдин Ялсығол әл-Башҡорди тарафынан яҙылған киң билдәле "Тарих нама-и булғар" китабында, йәғни әйле ырыуы шәжәрәһендә, ғәмәлдә, шундай уҡ мәғлүмәт бирелгән. Ошо мәғлүмәттәр, уларға өҫтәп әйле, тырнаҡлы, мырҙаларҙың боронғо риүәйәттәрен иҫәпкә алғанда, әйле берләшмәһенә ҡараған төрлө исемле ырыуҙарҙың нәҫелдәш булыуын раҫлай.

Тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеев көҙәйҙәрҙе төрлө сығышлы этник төркөмдәрҙән хасил булған, тигән һығымтаға килә. Ул уларҙың беренсе төркөмөнә төп көҙәйҙәрҙе - бүләкәй-көҙәй, ҡыр-көҙәй һәм урман-көҙәй исемдәрен йөрөткән ырыу бүлемдәрен, икенсе төркөмгә - шайтан-көҙәйҙәрҙе, өсөнсөһөнә төркмән-көҙәйҙәрҙе индерә. Ғалим боронғо көҙәй ата-бабаларының Урта Азия тарафтарында башҡа төрки ҡәбиләләренән бик иртә айырылып сығып, VIII-IX быуаттарҙа Урал алдының көньяҡ-көнбайыш территорияһына үтеп инеүен фаразлай. Унынса, тап ошо осорҙа ҡайһы бер көҙәй ырыуы бүлемдәре, атап әйткәндә, шайтан-көҙәйҙәр был яҡтарҙағы боронғо мадъярҙарҙан тороп ҡалған ҡәүем кешеләрен, шулай уҡ төркиләшеүгә бирелгән финуғыр сығышлы төркөмдәрҙе үҙ составына ҡуша алған. Ғалим һыҙғы, өпәй, терһәк, уваныш, шайтан-көҙәй ырыу бүлемдәре составында бер ни тиклем кимәлдә уғыр-самодий элементтарының булыуын нигеҙле тип иҫәпләй. "Шайтан" этнонимының килеп сығышын ул мәжүси уғырҙарға ҡарата ҡулланылған атама рәүешендә һүрәтләй.

Тарихсы С. Хәмиҙуллин иһә ошо этнонимдың "шайтан" өлөшөн боронораҡ башҡорттарҙың ниндәйҙер бер серле, шомло йә булмаһа кеше өсөн хәүефле тип иҫәпләнгән мистик урындарҙы ен-бәрейле, шайтанлы һүҙҙәре менән нарыҡлауы арҡаһында ошо тирәлә йәшәүселәргә лә ошо уҡ атаманың "тағылып" китеүе менән бәйләп аңлата. Ошо хаҡта XIX быуатта Рәсәйҙә киң билдәле тикшеренеүсе, тарихсы-археолог, фольклорсы Р.Г. Игнатьев былай тип яҙып ҡалдырған: "Златоустовского уезда, близ башкирской деревни Улькундов, Мурзаларской волости, есть два городища, самими башкирами называемые чудскими и шайтан-городищами; по их преданиям, эта чудь - неверный народ, знавшийся с сатаной и Бог за это его искоренил с лица земли. Чудь погибла, но дьявольская волшебная сила и теперь владеет над здешним местом и оберегает зарытые и заклятые клады на две тысячи лет. Из страха давно уже перестали башкиры косить опушую сочную траву около городищ; смельчакам же кладоискателям являлись демено в остроконечных колпаках".

Р.Ғ. Кузеев фекеренсә, төркмән-көҙәйҙәр иһә ҡасандыр ҡыпсаҡ берләшмәһендә көн иткән, төркмән-ҡыпсаҡтарҙың, төркмән-көҙәй һәм бүләкәй-көҙәйҙәрҙең һәнәк-тамғалары бер иш.

Тарихи сығанаҡтарҙа көҙәйҙәр составында күрһәтелгән түбә-аймаҡтар бер-береһенә тулыһынса тап килмәй, мәҫәлән, Көнгөр бургомистры Юхнев исемлегендә (1725-1726 йылдар) Себер даруғаһының "Кудинский" һәм "Трухменский" олоҫтары айырым биләмәләр итеп күрһәтелә. 1735 йылдағы "Росписи разделения башкир Уфимского уезда по волостям", тип аталған документта Көҙәй, Дыуан-Көҙәй, Төркмән-Көҙәй, Шайтан-Көҙәй, Нуғайҙар (Нагайлярцы) олоҫтары булып, Ҡыр-Көҙәй иҫкә алынмай. XVIII быуатта губерна хеҙмәткәре һәм тарихсы П.И. Рычков төҙөгән "Разделение башкирского народа по волостям и родам" тип исемләнгән списокта көҙәйҙәр составындағы аймаҡтар бына нисек аталған: "Урман-Кудейский, Билекий-Кудейский, Кир-Кудейский, Шетан-Кудейский, Нагайларский, Зюббердинский, Усраҡ-Кудейский, Урусба-Кудейский, Куллар-Кудейский, Трухменский, Лямес-Трухменский".

Р.Ғ. Кузеев башҡа төрки халыҡтарында көҙәй этнонимияһының бик аҙ булыуын ошо башҡорт ырыуының башҡа төрки ҡәүемдәренән бик иртә айырылып китеүе менән бәйләп аңлата. Шулай ҙа ул 2 аналог таба алған: Урта Азияның йыраҡ көнсығышында йәшәүсе ҡырғыҙҙарҙың бугу ҡәбиләһендә кедей ырыуы теркәлгән; шулай уҡ Алтайҙа, тываларҙың Хемчик хошунында кеде бүлеме бар икән. Тарихсы, журналист Салауат Хәмиҙуллин ошо мәсьәлә буйынса Р.Ғ. Кузеевҡа билдәле булмаған бер мәғлүмәткә иғтибар итә. Көҙәйҙәрҙең Урта Азия тарафтарында алыҫ ҡәрҙәштәре булыу мөмкинлеге хаҡында Ә.-З. Вәлиди Туғандың яҙмаларында иҫкә алына. Көнсығыш тарихы буйынса киң мәғлүмәтле арҙаҡлы ғалимыбыҙ XVI-XVII быуаттарға ҡараған "Насабнаме" исемле китапта һанап киткән 92 үзбәк ырыу бүлемдәре араһында Көҙәй (Kudey) исемлеһенең дә булыуын билдәләй. Унан башҡа, көҙәйҙәрҙең эҙҙәре Кесе Азияла (Анатолия һәм Кавказ аръяғында) булыуы мөмкин. Төрөк тикшеренеүсеһе Авни Али Джандар Төркиәнең Зонгулдак, Сушехри һәм Карс провинцияларында Күдүклү, Көдели, Күделли тигән ауылдарҙың исеме башҡорттарҙың көҙәй (күҙәй) ырыуы атамаһына тап килеү мөмкинлеген тоҫмаллай. Был ысынбарлыҡҡа тап килһә, көҙәйҙәрҙең тәү тарихы уғыҙ мөхите менән бермә-бер бәйләнешле булыуы ла бар.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.
(Дауамы бар).

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

БОРОНҒО БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТСЕЛЕГЕ

Эргә-тирәләрендәге халыҡтар дәүләт төҙөгәндә башҡорттар ҙа тик ятмаған. Сөнки башҡорттоң ул дәүерҙәге мәҙәни һәм сәйәси тормош кимәле күршеләренекенән бигүк айырылмаған. "Көслөнөкө - замана", тигән ул дәүерҙә башҡаларҙан баҫылып, йоҙолоп ҡалмаҫ өсөн башҡорт ойошорға, теш-көс күрһәтергә мәжбүр булған. Шулай итеп, дәүләт тигән ойошмаһын барлыҡҡа килтергән. Әгәр ул дәүләт төҙөп, үҙ-үҙен иҫбатлап, күрше-тирәләренә теш күрһәтмәһә, уны әллә ҡасан уҡ йотҡан булырҙар ине.

Көнбайышта башҡортҡа күрше төкәлеп йәшәгән Иҙел болғарҙары заманаһы өсөн ҡеүәтле генә дәүләт төҙөй һәм тирә-яҡ халыҡтарҙы баҫып алыу сәйәсәте үткәрә башлай. Улар хатта алыҫта ятҡан урыҫ кенәзлектәре менән дә һуғыштар алып бара. Башҡорт менән болғар территория буйынса ғына түгел, тел, йола, ғөрөф-ғәҙәттәр яғынан да яҡын халыҡтар була. Шулай булғас, болғарҙар башҡорттарға, уларҙың ожмахҡа тиң еренә, байлығына иғтибарһыҙ ҡалмаған, әлбиттә. Башҡорттар иһә болғарҙарҙан йотолмайынса, үҙҙәренең азатлығын, башҡортлоғон һаҡлап алып ҡала. Һаҡланып ҡына түгел, хатта болғарҙарҙың бер өлөшөн үҙҙәре үк йота алалар. Башҡорт араһындағы болғар менән бәйле бүләр, юрми кеүек ҡәбиләләр шул заманда ауазылыр. Әгәр башҡорттоң көслө дәүләте булмаһа, уға берәү ҙә үҙенең бер өлөшөн йолҡоп алып, йоторға биреп ҡуймаҫ ине.

Башҡорт иле, болғарҙан тыш, Уралдан көньяҡ-көнсығыштараҡ, Арал диңгеҙе буйында ойошҡан һәм үҙ баҫымын башҡорт, болғар тарафтарына ла йүнәлткән көслө Хорезм дәүләте менән дә (хәҙер ҡаҙаҡтыҡы булған дала аша) сиктәш була. Башҡорт иле аша Болғар дәүләтенә, унан ары Урыҫ кенәзлектәренә һәм Скандинавия илдәренә Ҡытай, Урта Азия, Иран яҡтарынан сауҙа юлы үтә. Шуға күрә, беҙҙең халыҡ күрше-тирәләре менән алыш-биреш итеп, сауҙа менән булышып, үҙендә булғанды ситкә һатып, булмағанын индереп, үҙ ихтыяждарын, мәнфәғәттәрен яҡлап, шуларҙы иҫәпкә алып, тормош тыуҙырып торған төрлө сәйәси-хужалыҡ мәсьәләләрен хәл итеп, үҙ аллы донъя көтөргә тырышҡан. Әлбиттә, уға берәү ҙә уңайлы тормош шарттары тыуҙырып, әҙерләп тормаған, бөтәһен дә ул үҙ көсөнә, йәғни ҡеүәтле дәүләтенә таянып эшләргән. Ә ул замандарҙа дәүләт таянысы - ғәскәр булған. Мең ырыуы шәжәрәһендә "мең һаҙаҡлы Ураҙас бей" телгә алына. Был юлдарҙы Ураҙас бейҙең бер үҙенең мең һаҙағы булған тип түгел, а уның ғәскәре мең кешелек булған тип аңларға кәрәк. Хәҙерге ғәскәри терминды ҡулланһаҡ, Ураҙас бейҙең мең штыклы, йәиһә мең көбәкле ғәскәре булған, тип әйтер инек, йәғни Ураҙас бейҙең ғәскәре мең кешенән торған була. Ул заман өсөн был ҙур ғына көс иҫәпләнгән. Ә башҡорт дәүләтендә бей бер Ураҙас ҡына булмаған, улар күп булған. Мәҫәлән, "Күҫәк бей" эпосында Мәсем ханға ун ике бей буйһонған, тип әйтелә. Был эпос, ғөмүмән, ҡатмарлы эстәлекле, һәм башҡорт тормошо тураһындағы мәғлүмәттәргә бик бай эпос. Унда урта быуаттарҙағы башҡорттоң дәүләт, хоҡуҡ ҡоролошо тураһында бик күп нәмә табырға була. Эпос башҡорттарҙың Мәсем исемле ханы булып, уға ун ике башҡорт бейенең буйһоноуы тураһында хәбәр итеүҙән башланып китә. Был бейҙәр Мәсем хандың талабы буйынса шундуҡ ғәскәрҙәрен эйәртеп, уға килеп етергә тейеш була. Юридик тел менән әйткәндә, бында беҙ - баш сюзерен һәм вассалдар мөнәсәбәтен күрәбеҙ. Мәсем хан баш сюзерен булһа, уға буйһонған бейҙәр - уның вассалдары. Был бейҙәр ханға мотлаҡ буйһонғандар.

Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.
(Дауамы бар).

ДИНИ ЙОЛА

милли йола

Дин - әлеге ваҡытта беҙҙең өйрәнеп, үҙләштереп кенә ятҡан темаларыбыҙҙың береһе. Был өлкәне беҙ бары тик белгестәр, дин әһелдәре, ғалимдар менән берлектә яҡтыртырға тейешбеҙ икәнде яҡшы беләбеҙ. Сираттағы диалогыбыҙ ҙа халыҡ араһында киң таралған һорауҙарға, бәхәстәргә, ҡыҙыҡһыныуҙарға аныҡ яуап табыу маҡсатында ҡоролдо. Ҡунаҡтарыбыҙ - дин белгестәре Морат ЛОҠМАНОВ менән Нурмөхәмәт НУРИЕВ хәҙрәттәр.

Быға тиклем беҙҙең халыҡта дини йола менән милли йолалар араһында артыҡ айырма булманы. Әммә һуңғы йылдарҙа дингә килгән йәштәребеҙ араһында милли йолаларыбыҙҙы инҡар итеүселәр барлығы тураһында хәбәрҙәр бар. Ошо нигеҙҙә мәйетте ерләү, аят үткәреү кеүек ғәмәлдәрҙә бәхәстәр тыуып ҡуя. Әйтегеҙ әле, әле телгә алған көнкүреш йолаларында нимәләрҙер үҙгәрҙеме? Нимәләр хата ла, нимәләр дөрөҫ?

Морат Лоҡманов: Аллаһы Тәғәлә кешене был ергә ебәргәндән алып үҙенең хаҡ юлын күрһәтә килгән. Юл күрһәтеү өсөн бәйғәмбәрҙәр ебәргән. Әгәр ниндәйҙер яңылышлыҡтар килеп сыҡһа, тағы ла яңы бәйғәмбәрҙәр ебәрелгән. Һәр бәйғәмбәр әҙәмдәрҙе үҙ заманына ярашлы хаҡ юлға төшөрөүсе, иманға килтереүсе миссияһын үтәгән. Ислам Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән һуң барлыҡҡа килгән дә, уға тиклемгеләре дөрөҫ булмаған түгел. Беҙҙең "Урал батыр" эпосын ғына алып ҡарағанда ла, тәүбашланғыстың яҡшы ғәмәлдәргә нигеҙләнгәнен, изгелеккә хеҙмәт итеп йәшәргә өндәгәнен күрәбеҙ.

Һәр бер халыҡтың үҙ тәбиғәте, үҙ көнитмеше бар. Ерҙә үлән-үсентеләр күп булған һәм уларҙың төрләһә төрлө ерҙә үҫкән, төрлө тәбиғәт шарттарын яратҡан кеүек. Әммә уларҙың барыһы ла беҙҙең өсөн үҫемлектәр донъяһы. Шуның кеүек, мосолмандар ҙа үҙ милләте фиғелен тотоп йәшәй. Мәҫәлән, тажиктар үҙҙәренсә табын йыя, үзбәктәр ниндәйҙер йоланы беҙҙән айырмалыраҡ итеп башҡара, чечендарҙа әҙәп ҡанундары беҙҙекенә ҡарағанда икенсе төрлөрәк үтәлә һәм башҡалар. Ғәрәптәрҙә, мәҫәлән, мәсеттә ғибәҙәт ҡылып ултырған бабайҙарҙы осратмаҫһың, йәки табында саҙаҡа таратыу ҙа юҡ. Тик был, улар дөрөҫ эшләмәй йә иһә беҙҙеке яңылыш, тигәнде аңлатмай. Һәр халыҡ үҙенең йәшәү шарттарына, борондан килгән тарихына, ере-һыуына, климатына бәйле булған үҙенә генә хас тәртиптәргә эйә. Беҙ аяттарҙан һуң хәйер таратып өйрәнгәнбеҙ икән - таратайыҡ. Күстәнәс һалып өйрәнгәнбеҙ икән - һалайыҡ. Был борон-борондан ихласлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ, изгелек, хәлгә инеү һәм бер-береңә ярҙам итеү нигеҙендә барлыҡҡа килгән милләтебеҙгә хас йолалар бит инде. Тимәк, беҙҙең милләт ошондай юлдар аша хаҡлыҡты тапҡан. Икенсе халыҡ икенсе юлдар аша хаҡлыҡҡа өлгәшкән. Ошоларҙы аңлағанда, ерләү, йыназа, аят һәм башҡа йола үтәүҙәрҙә бәхәс сыҡмаҫ.

Кеше ниндәйҙер йола үтәгәндә берәй хатаға юл ҡуя икән, быны бит ул насар уйҙан башҡармай. Бына мәйетте оҙатҡанда сәскә гөлләмәләре һалыу миҫалын ғына алайыҡ. Совет осоронда тыуған тәртип ул. Әгәр кемдәрҙер был тәртипте башҡара икән, мулла уларҙы зыяратта тотоп әрләмәһен, тауыш ҡуптармаһын, өҙә һуғып тыймаһын ине. Әрләшкән осраҡта бит был хәҙрәт үҙенә әллә күпме миҡдарҙағы гонаһ ала. Был тәртипте халыҡҡа башҡа урында һәм башҡа осраҡта матур, яйлы итеп аңлатырға кәрәк. "Бына былайыраҡ итһәгеҙ, һеҙҙең өсөн дә, мәрхүм өсөн дә файҙалыраҡ була", тип өйрәтеү күпкә йәһәтерәк аңлашыласаҡ. Дин бит ул насарыраҡ ғәмәлдәрҙе яҡшыраҡтарына алыштырыу, яҡшыға үҙгәреү.

Кешенең дине, теле һәм милли рухы бер-береһенә нык бәйләнгән. Уларҙың береһен төшөрөп ҡалдырып, икенсеһен генә үҫтереп булмай. Мәҫәлән, бөгөн телде үҫтерәйек тип, динде инҡар итеүсе лә әллә ни уңышҡа өлгәшә алмаясаҡ. Йәки дин тип кенә йөрөп, туған телгә, миллилеккә битараф булыусы ла алға китмәҫ. Аллаһы Тәғәлә беҙгә телде аманат итеп биргән һәм беҙ уны һаҡларға бурыслы. Тел аша беҙ быуындар бәйләнешен булдырабыҙ. Был хатта һүҙ менән генә аңлатып бирә алмаҫлыҡ ҡиммәт. Үҙ телендә һөйләшмәгән, туған телен балаларына ла өйрәтмәгән ғаиләләрҙә быуындар бәйләнешендәге рухи күсәгилешлек өҙөлә, юғала. Ғаилә һәм уның быуындары шундай ҙур көҙрәттән, көстән, һаҡтан ҡолаҡ ҡаға.

Нурмөхәмәт Нуриев: Бәйғәмбәрҙәр кешелеккә булғанды юҡҡа сығарыу өсөн түгел, ә, киреһенсә, үҫтереү, яҡшыраҡ итеү, күтәреү өсөн килә. Мәҫәлән, бала мәктәпкә килә икән, уға уҡытыусы: "Һинең атайың дөрөҫ һөйләмәгән, әсәйең хаталанған, һин быларҙы башыңдан алып ташла, был ошолай була", - тип йәбешмәй. Ул балаға ата-әсәһе тарафынан һалынған тәрбиә өҫтөнә үҙ белемен, ғилми-фәнни аҡылын һала бара. Шуның кеүек, ҡайҙалыр уҡып ҡайтҡан йәш хәҙрәттәребеҙ ҙә меңәр йылдар үҙ тәртиптәре менән йәшәп ятҡан ауыл халҡына килә килеп, "былай ярамай, тегеләй булмай" тип ҡырҡа һуғырға тейеш түгел. Ә уларҙы изге ғәмәлдәр, матур вәғәздәр, аңлатыу эштәре аша тәрбиәләргә дәрен бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу, туғандарҙы, дуҫтарҙы низағлаштырыу бары тик дошмандарға ғына ҡулай.

Ә бына Морат хәҙрәт телгә алған сәскә гөлләмәләре тураһында әйткәндә, бөгөн христиан дине әһелдәре лә әлеге "сүп-сарҙы" зыяраттарға ташыуҙы яҡшы ғәмәл түгел тип таба. Сөнки ҡәберлектәр бик нык ҡыйлана, унан сүп сығарыу еңел эш түгел һәм поптар халыҡҡа яйлап-яйлап был тәртипте күндерә бара. Күрәһегеҙ, хатта дөрөҫ булғанды ла өҙә һуғып, ороп-бәреп әйтеү килешмәй. Хаҡ хәбәрҙе лә яйын тура килтереп, самалап ҡына еткереү фарыз.

Иң йыш бирелгән һорауҙарҙың береһе - Ислам дине йырларға, бейергә рөхсәт итмәйме ни?

Морат Лоҡманов: Бына бында ла "Рөхсәт итә" йә "Рөхсәт итмәй" тип ҡырҡа ғына яуап биреү дөрөҫ булмаясаҡ. Кешелек йәшәйешендә тыйылған әйберҙәр була, тыйылмағандары була. Тыйылмағанды тыйып йөрөү ул шулай уҡ тыйылғанды рөхсәт итеүгә, йәғни гонаһҡа тиң. Шунлыҡтан, тыйыу өлкәһендәге "белемселектән" дә һаҡ булырға кәрәк.

Йыр-бейеүгә лә төрлө яҡтан ҡарайһың. Уның да урыны, ваҡыты һәм мәғәнә үҙенсәлеге бар. Алайыҡ, үҙебеҙҙең халыҡ ижады өлгөләрен. Улар борондан, милләттең төрлө киселештәре, тарихи үткәне һәм башҡа хәл-торошо ағымында барлыҡҡа килгән, халыҡ шуларҙы башҡарып, күңел йыуатып, күңел күтәреп йәшәй белгән. Һәм ни өсөн ул дин сиктәрендә тыйылырға тейеш һуң әле?

Мәҫәлән, матур итеп йыуылған таҙа өйгә аҡылы, әҙәбе булған кеше мотлаҡ аяҡ кейемен һалып ҡына инә. Шуның кеүек, дингә килгән кеше лә һәр ғәмәлен, йыр-бейеү булһынмы, башҡа нәмәме, тейешле тәртип сиктәренән сыҡмай ғына башҡарасаҡ. Был тәңгәлдә уны тыйырға ла кәрәкмәй. Кешелә эске мәҙәниәт, күңел таҙалығы барлыҡҡа килә. Шулай итеп, һин иң беренсе иманыңды үҫтер һәм ул һиңә ниндәй йырҙың ярай, ә ниндәйенең ярамай икәнен һиҙҙерәсәк. Бейеүсенең дә эске халәте иҫ киткес саф булып, мәсеттән ҡайтмай йөрөгәндең дә уйҙары бысраҡ булырға мөмкин. Бына минең ҡартатай мулла булды. Үҙе ҡурайҙа ла уйнаны, йырлап та, бейеп тә ебәрә ине. Шулай уҡ беҙ бөйөк ғалимдарҙың береһе Хәбибназар Үтәкиҙе беләбеҙ. Ауылында мулла булып тора һәм йыйындарҙа һоҡланғыс итеп халыҡ йырҙарын башҡара. Унан килә, халҡыбыҙҙың күпме ҡарһүҙҙәре көйләп әйтелә, мөнәжәттәре, аяттары йырлап уҡыла. Ҡыҙ оҙатҡандағы сеңләүҙәр, туй йолаһы йырҙары, таҡмаҡтар. Ә бейеүҙәребеҙҙә ниндәй тарих йәшәй! Ҡурай нисә быуаттар шәһит яугирҙарын яуҙарҙа оҙата йөрөгән. Хатта Ҡөрьән үҙе лә көйлө китап бит!

Нурмөхәмәт Нуриев: Борон беҙҙең халыҡ диндә ирекле булған, тигән фекерҙәр йәшәй. Мин шуны әйтер инем: беҙҙең халыҡ бер ваҡытта ла иманһыҙ булмаған. Исламға тиклем дә ул әҙәмилектең тәртип сиктәрен тотоп йәшәгән, ә Ислам уны байыта ғына төшкән. Мәҫәлән, "ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ пәрәнжә кеймәгән" тиҙәр. "Пәрәнжә" тигән һүҙ булмағандыр, ә шул уҡ функцияны үтәгән ҡушъяулыҡ, таҫтар, ҡашмау, шул уҡ милли кейемде тулыландырған селтәр, түшелдерек һәм башҡалар булған бит. Һәм иң боронғо замандарҙан да динле булып, шуның эсендә халыҡ йолаларын да тотоп йәшәгәнбеҙ. Йәғни, халыҡ йолалары шул уҡ дингә торошло әҙәп һәм әхлаҡ, тәрбиә һәм күркәмлеккә нигеҙләнгән тәртип ул. Улар бер-береһенән айырылмай. Был тәртиптәр эсенә халҡыбыҙҙың йырбейеүе лә инеп китә.

Ҡыҙыҡ өсөн бер миҫал: кешеләр йыш ҡына: "Был мәфтәйҙәрҙең ҡайһыныһы юғарыраҡ?" - тип һорай. Бында ла нисек ҡарайһың бит? Рәсәй Президенты алдындағы дәрәжәһен баһалайһыңмы, әллә Аллаһ алдындағымы? Ә Аллаһы Тәғәлә үҙе нимә тигән? "Ҡайһығыҙҙың әҙәбе яҡшыраҡ, шул миңә яҡыныраҡ", - тигән. Ошонан сығып, беҙҙең атай-әсәйҙәр совет осоронда йәшәп диндеҙ булған да, беҙ бөгөн Ҡөрьәнде уҡып сығып, иманлыбыҙ, динлебеҙ, тиергә ашыҡмағыҙ әле. Улар совет заманында ла хәлдәренән килгәнсә имандан яҙлыҡмаҫҡа тырышҡан. Тимәк, уларҙың дине беҙҙекенә ҡарағанда ла көслө булған. Тик был да "Беҙҙә боронғо дин бар, бөгөнгө ғилем нимәгә..." тиергә сәбәп түгел. Беҙ бөгөн динде өйрәнергә мәжбүрбеҙ, сөнки уның аша халыҡ күңелендәге бушлыҡты тултырабыҙ, шул бушлыҡҡа яҡшы, изге төшөнсәләр индерәбеҙ.

Мәҙәниәткә килгәндә, ул үҙе лә тәрбиә өлгөһө булырға тейеш. Унда ла кеше күҙе, ҡолағы ярамағанды күрмәҫкә һәм ишетмәҫкә кәрәк. Дарыуҙы ағыу итеп, ағыуҙы дарыу итеп ҡулланып булған кеүек, мәҙәниәт тә тамашасыһына йә ыңғай, йә кире йоғонто яһай ала. Миҫал өсөн әйтеп китәм: Мостай Кәримдең һоҡланғыс әҫәрҙәренең береһе "Ай тотолған төндә" трагедияһын быраса күркәм бер тамаша итеп ҡабул итә инем, һуңғы сәхнәләштереүҙе күреп шаҡ ҡаттым. Әҫәрҙәге беҙ Әсә итеп ҡабул итеп өйрәнгән, ырыу инәһе булған ҡатынды ниндәйҙер түбән һәм тотанаҡһыҙ һында биреп ҡуйҙылар. Хатта ҡарап бөтә алмай сығып киттем. Дра-

✓ "Пәрәнжә" тигән һүҙ булмағандыр, ә шул уҡ функцияны үтәгән ҡушъяулыҡ, таҫтар, ҡашмау, шул уҡ милли кейемдә тулыландырған селтәр, түшелдерек һәм башҡалар булған бит.

МЕНӘН...

айырыламы?

маны тәүгә күргән йәштәрҙә ниндәй фекер ҡала? Башҡорт ырыуының ил инәһе булған ҡатын-ҡыҙын (хатта фани донъялағы хаталары булған осраҡта ла) ниңә улай түбән төшөрөргә? Әҙәп самаһын белмәү, мәҙәниәтте, сәнғәтте халыҡҡа тейешле юҫыҡта бирә белмәү өлгөһө был.

Яңы тәртиптәр буйынса, халыҡ йыйып, табын ҡороп аяттар үткәреү мотлаҡ түгел, хәйер таратыу ҙа кәрәкмәй, тигән хәҙрәттәр бар һәм былар халыҡ араһында аңлашылмаусылыҡ тыуҙыра. Һеҙ ниндәй фекерҙә?

Морат Лоҡманов: Бөгөн беҙҙең халыҡта тап ошондай табын йыя торған аяттар киң тарала. Дин әһелдәренә динде аңлата, вәғәздәр уҡый торған иң уңайлы урындар ҙа ошо саралар. Кешене ҡолағынан тартып мәсеткә алып килеп, көсләп нимәлер тыңлатып булмай. Ә ошондай аяттарҙа ул, теләймеләймәйме, тәүге дини дәресен ала. Был фиғелдең сауаплы һәм изге ғәмәл икәнен күрә, төшөнә. Уны үҙе лә ойоштора. Һәм, кем белә, яйлап мәсеткә лә юлы төшөр әле. Былдай миҫалдар минең күҙ алдында ла күп булды. Әйтәйек, бер вазифалы кеше мода итеп кенәме инде, табынына саҡырҙы. Барып Ҡөрьән уҡыным да, уларҙы биҙҙермәҫлек кенә итеп ҡыҫҡаса вәғәздәр һөйләнем. Был әлеге кешеләргә оҡшап ҡалған. Унан тағы саҡырҙылар. Быныһында күберәк вәғәз һөйләнем. Өсөнсөһөндә тейешле нәмәләр, мөһим нәмәләр хаҡында бәйән иттем. Шулай өс йыл тирәһе йөрөшкәндән һуң, әлеге хужа һәм ҡунаҡтар ҡорбан салдыра, хәйер-саҙаҡалар тарата башланы, хатта араларынан мәҙрәсәгә уҡырға барыусылар ҙа, хажға юлланыусылар ҙа булды. Хәйерҙәрен үҙемә түгел, ә мохтаждарға йүнәлттерҙем, атап әйтеп төртөп тә күрһәттем. Шул кешеләрҙең ҡайһылары килеп: "Шундай йән тынысылығы таптым, күпме эҙләнем мин был торошто, күпме тренингтарға, психологтарға йөрөнөм..." - тип һөйләп китте.

Әле телгә алған хужа тәүге танышҡанда дин темаһына ҡырҡыу ғына фекерҙәр әйтә, яулыҡ ябыныусыларға көлөп ҡарай ине. Әлеге өҫтәл артында һөйләшеүҙәрҙән һуң ул бер-нисә йыл эсендә үҙгәрә алды. Әгәр шул мәрхүмдең өсөнә, етеһенә арналған табындар артында беҙ кемделер тәрбиәләй алабыҙ икән, был сараларҙың зыяны күберәк буламы, әллә файҙаһымы? Асылда, был бит бөйөк еңеү була. Йәш хәҙрәттәргә лә, халыҡҡа ла шуны аңлау фарыҙ: аяттарҙы дөрөҫ үткәрмәйһегеҙ, тип тәнҡитләргә түгел, ә был сараларҙың файҙаһын тоя белергә кәрәк. Әгәр кеше туғанына аят уҡытып, йәнен тынысландыра икән - үткәрһен, хәле етерлек түгел, был уның ғаиләһенә ауырлыҡ килтерә икән - үткәрмәһен. Талап йәки мотлаҡ ихтыяж юҡ. "Тейеш - тейеш түгел" тигән һүҙҙәрҙе был тәңгәлдә бөтөнләй ҡулланмағыҙ. Һеҙ ҡазый түгел. Беҙҙең телебеҙҙә кәрәклене йәки кәрәк булмағанды аңлата торған йомшаҡ һәм һөйкөмлө булған башҡа һүҙҙәр ҙә етерлек.

Нурмөхәмәт Нуриев: Өсөн, етеһен, йыллығын уҡытыуға, ғәҙәттә, мәрхүмдең зат-ырыуы йыйыла. Күптәр бер-береһен ошондай сараларҙа ғына күрә ала. Һәм ошондай сараларҙа ғына эскеһеҙ, вәғәзле табындар була. Был йыйындарҙы алыштырырлыҡ альтернатива ла юҡ кемдәрҙер өсөн. Ошондай табындарҙа йөрөгәндә кешеләрҙең был сараға әллә күпме ваҡыт әҙерләнгәнен, ойоштороуға етди ҡарағанын, йола тотоу, сауап алыуға ынтылып ятыуын күрәбеҙ, анализлайбыҙ. Миңә, мәҫәлән, ҡайһылыр ауылға аятҡа китеп барыуға ҡарағанда мәсеттә ҡалыу уңайлыраҡ. Әммә унда йыйылған ғәмгә нимәлер әйтә һәм кемгәлер аҙ булһа ла ярҙам итә алырымды уйлап, юлға сығам. Шулай уҡ өсөн йә етеһен үткәреүҙе лә шарт итеп ҡуйырға түгел, уны мәрхүмдең туғандары үҙ теләктәре менән үткәрә. Йәғни, бында һәр кем, хәҙрәт тә, уны саҡырып табын йыйыусылар ҙа үҙ бурыстары тип иҫәпләгәнде башҡара. Бынан уларҙың күңеленә һиллек килә, рәхәтлек алалар. Шунлыҡтан, кемдер нимәнелер дөрөҫ эшләмәне, өҫтәлгә быны ҡуйҙы, тегене ҡуйманы йәки хәйерҙе шунса бирҙе йәки бирмәне, тигән хәбәрҙәр төптө килешмәй. Һәр кем хәленә һәм мөмкинлегенә ҡарап эш итә былдай осраҡта. Талап итеү ҙә, шарт ҡуйыу ҙа, тейешле тип билдәләү ҙә яраған эш түгел. Барыһы ла ниәттән һәм теләктән сығып ҡына башҡарылһын.

Диндә милләт юҡ, тигән һүҙҙәрҙе лә ишеткеләйбеҙ. Быны нисек аңларға кәрәк?

Нурмөхәмәт Нуриев: Кешенең дине, теле һәм милли рухы бер-береһенә ныҡ бәйләнгән. Уларҙың береһен төшөрөп ҡалдырып, икенсеһен генә үҫтереп булмай. Мәҫәлән, бөгөн телде үҫтерәйек тип, динде инҡар итеүсе лә әллә ни уңышҡа өлгәшә алмаясаҡ. Йәки дин тип кенә йөрөп, туған телгә, миллилеккә битараф булыусы ла алға китмәҫ. Аллаһы Тәғәлә беҙгә телде аманат итеп биргән һәм беҙ уны һаҡларға бурыслы. Тел аша беҙ быуындар бәйләнешен булдырабыҙ. Был хатта һүҙ менән генә аңлатып бирә алмаҫлыҡ ҡиммәт. Үҙ телендә һөйләшмәгән, туған телен балаларына ла өйрәтмәгән ғаиләләрҙә быуындар бәйләнешендәге рухи көсәгилешлек өҙөлә, юғала. Ғаилә һәм уның быуындары шундай ҙур ҡөҙрәттән, көстән, һаҡтан ҡолаҡ ҡаға.

Беҙ әлегә диндең нимә икәнен белеп етмәйбеҙ. Мәҫәлән, океанға килеп, һыуына бармағыбыҙҙы ғына тығып ҡарайбыҙ ҙа, "Әһә, бына нисек икән был океан!" тип уйлайбыҙ. Диндә лә шулай ғына әлегә. Беҙ уны бәләкәй генә мәғлүмәтлек менән тикшерәбеҙ, һығымталар яһайбыҙ. Ә дин ул тотош донъя, йәшәйеш, йыһан. Уны айырым бер өлкә итеп ҡарау, башҡаһынан сикләргә, айырырға тырышыу дөрөҫ түгел. Унда хайуандар, үҫемлектәр донъяһы ла, фән дә, сәйәсәт тә, мәҙәниәт, иҡтисад та - барыһы ла бар. Бәйғәмбәребеҙ килгәндән һуң Ислам донъяһында шундай итеп фән, иҡтисад, әҙәбиәт, мәҙәниәт алға китә. Шул осорҙа нигеҙ һалынған һәм алға киткән фәндәрҙе Европа биш йөҙ йыл буйына ҡыуып етә алманы. Ҡарайыҡ: химия - ғәрәп һүҙенән, алгебра - ғәрәп һүҙе. Борондан килгән анды, аҡылды фән кимәленә еткереп донъяға билдәле иткәндәр, мәңгеләштергәндәр, тигән һүҙ. Ары киткәндә, Ғүмәр Хәлифә ваҡытында илдә хәйер-саҙаҡа бирер әҙәм ҡалмай. Был нимәне күрһәтә? Мосолмандарҙың етеш йәшәүен. Йәғни, хәлле көн итеүҙе лә алға ҡуя Ислам. Алда ла әйттек: дингә килеү ул үткәндәрҙе алыштырып йәки оноттороп, өр-яңы юл башлау түгел, ә булғанды тағы ла яҡшыраҡ, күркәмерәк итергә ынтылыу. Тимәк, милләтеңде лә юҡҡа сығарыу, дөйөм бер массаға әйләнергә тырышыу түгел. Башҡорт бул һин! Иманлы, намыҫлы, ысын, ихлас динле үҙ милләтеңдең шәхесе бул!

Мосолмандар ҙа үҙ милләте фиғелен тотоп йәшәй. Мәҫәлән, тажиктар үҙҙәренсә табын йыя, үзбәктәр ниндәйҙер йоланы беҙҙән айырмалыраҡ итеп башҡара, чечендарҙа әҙәп ҡанундары беҙҙекенә ҡарағанда икенсе төрлөрәк үтәлә һәм башҡалар. Ғәрәптәрҙә, мәҫәлән, мәсеттә ғибәҙәт ҡылып ултырған бабайҙарҙы осратмаҫһың, йәки табында саҙаҡа таратыу ҙа юҡ. Тик был, улар дөрөҫ эшләмәй йә иһә беҙҙеке яңылыш, тигәнде аңлатмай. Һәр халыҡ үҙенең йәшәү шарттарына, борондан килгән тарихына, ере-һыуына, климатына бәйле булған үҙенә генә хас тәртиптәргә эйә. Беҙ аяттарҙан һуң хәйер таратып өйрәнгәнбеҙ икән - таратайыҡ. Күстәнәс һалып өйрәнгәнбеҙ икән - һалайыҡ. Был борон-борондан ихласлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ, изгелек, хәлгә инеү һәм бер-береңә ярҙам итеү нигеҙендә барлыҡҡа килгән милләтебеҙгә хас йолалар бит инде. Тимәк, беҙҙең милләт ошондай юлдар аша хаҡлыҡты тапҡан. Икенсе халыҡ икенсе юлдар аша хаҡлыҡҡа өлгәшкән.

Дини фанатизм нимәнән килә? Сәләмәт диндең фанатизмға әүерелеүен нисек аңларға?

Морат Лоҡманов: Диндең кешегә һәм, ғөмүмән, халыҡтарға көслө тәьҫир итеүен беләбеҙ. Һәм, үкенескә ҡаршы, күп осраҡта был көстө кире юҫыҡта ҡулланып ҡуялар. Дәүләттәр араһындағы һуғыш ҡоралы итеп тә, йәмғиәттәр араһындағы ыҙғыш сәбәбе итеп тә, хатта ике бер туған араһындағы үпкәләшеү темаһы ла булып ҡуя дин. Динде ошондай негатив сәйәсәткә ҡушырға яраталар. Әммә дин үҙе сәйәсәттә ҡорал булып түгел, ә сәйәсәт үҙе дин эсендәге бер эш алымы булырға тейеш. Диндән яу сәйәсәте яһаусылар улар күңелдәре менән диндә булғандар түгел, ә тышҡы дин менән генә йәшәүсе һәм динде ҡылыс болғауға ғына ҡайтарып ҡалдырыусылар булып сыға асылда. Уларға динде халыҡҡа тиҙ генә һеңдерергә һәм үҙенә кәрәк нәтижәләрҙе лә йәһәт кенә сығарырға, ҡурҡытып, көсләп, баҫып булһа ла үҙенекенә өлгәшергә генә булһын. Уйлап ҡарағыҙ, бер мулла егерме йыл муллалыҡ итеп, ауылдаштары менән бергә барыһын кисереп-үтеп, ҡуша донъя көтөп, тәрбиә эштәре алып бара. Ә бер мулла ҡапыл килеп төштө лә, "тегеһе ярамай, былай булмай" тип яугир юлына баҫты. Йәштәр, ғәҙәттә, быға әүрәй. Уларға шундай "яугирлыҡ" батырлыҡ булып күренә. Дин өсөн ҡорбан булыу, ҡайҙалыр барған һуғыштарға юлланыу һәм башҡа хата аҙымдар яһап ҡуя улар ошондай "батырҙарға" эйәреп. Һәр ерҙә лә, һәр илдә лә асыҡ торған ишектәр бар, тыйылған ишектәр бар. Һин шул асыҡ торған ишектәргә үрел, ярамағанын емермә. Аллаһы Тәғәлә һиңә шул асыҡ ишектәр артында уңыш әҙерләп ҡуйған, ә бәлә көтөрҙәй ишектәрҙе япҡан. Йәғни, тыйылғандан тыйыл, тигән һүҙем.

Нурмөхәмәт Нуриев: Мөхәммәт бәйғәмбәр: "Минең артымдан килә торғандар бүленерҙәр", - тигән бит. Ҡөрьән исеменән, Ислам исеменән хәбәр һөйләп, төрлө яҡҡа тартҡылауҙар, бүленештәр элек тә булған, хәҙер ҙә бар. Әммә бының хәл итеү юлы ла бар, ул - мәсеттәрҙә йыйылышып, һөйләшеп-аңлашыу, урталыҡты табыу, төп ғәмәлдәрҙе үтәү. Изге дин юлында булғандарҙың эргәһендә ыңғай энергетика тупланa һәм шул энергетика мәсеткә килгән ир кешегә эйәреп, өйөнә лә ҡайта, шул энергетика уның ҡатынына, балаларына йоғонто яһай. Ир кешенең намаҙҙы мәсеттә уҡыуы бик тә хуплана. Мәсеттә уҡылған намаҙың 27 тапҡырға көсө ҡөҙрәтлерәк һәм сауаплыраҡ була. Ә ҡатын-ҡыҙҙың өйҙә уҡылған намаҙы 27 тапҡырға көслөрәк була.

Диндә фанатизмға бирелмәү өсөн уны төплө өйрәнергә, бик булмаһа, белемле остаздарҙан һабаҡ алырға кәрәк. Бөгөн күптәрҙең уҡытыусыһы компьютер, һеҙ уҡынығыҙ - үҙегеҙсә аңланығыҙ, теге уҡыны - үҙенсә аңланы. Һәм һәр кем үҙе аңлағанды алға һөрөргә, дөрөҫ тип дәлилләргә тырыша. Уҡығандары менән мәсеттә, белемле хәлфәләр алдында, ҡәрҙәштәре янында фекерләшергә, кәңәшләшергә башына ла килмәй уның. Диндә һине йәмәғәт тәрбиәләй, кемгәлер бер аңлатыу етә, кемгәлер йома һайын төшөндөрөп, иҫенә төшөрөп тороу зарур.

Ә фанатизм - ул "кем беҙҙең менән түгел - шул дошман" тип кенә ҡараған бер фирҡә. Фирҡәләгеләр бары дингә генә йәбешкән дә, башҡа йәшәйеште күрмәй. Дини кеше, мәҫәлән, хәҙрәт йәки башҡа булһынмы, ауылдаштары менән бергә йәшәй, өмәләргә лә сыға, эскәне менән дә һөйләшергә, уғрыһы менән дә аралашырға ваҡыт таба. "Ул - эскесе" тип ситкә типмәй, киреһенсә, уны ла үҙе янына йәлеп итергә, эсендәге бушлыҡты иман менән тултырырға ярҙам итә. Фирҡәләрҙә, беләһегеҙ, бер төркөм туплана ла, йәмғиәттән айырылып, барыһын инҡар итеп, "башҡаларҙыҡы хата ла, беҙҙеке генә дөрөҫ" тип бикләнеп кенә көн итә. Былдай фанаттар ғаиләлә лә реформалар яһау менән мәшғүл. Ҡатынын бер көн эсендә дингә баҫтырырға, балаларын яулыҡҡа урарға тотоноп китәләр. Әлеге сама тигән нәмә бында ла сиктәрҙе сыҡмаҫҡа, барыһына ла аңлы һәм изге ниәт аша килергә ярҙам итер.

(Дауамы 15-се биттә).

✓ ***Батша армияһында ябай һалдат, шунан унтер-офицер, һуңынан революция һалдаты, башҡорт кавалерия бригадаһы командиры, Мәскәүҙәге хәрби академияның тыңлаусыһы, һуңғы званиеһы - комбриг.***

– Ниңә туҡтап ҡалдың, ҡәйнеш, әллә арыныңмы? - Ғәләүетдиндең тауышынан Муса һиҫкәнеп китте. Еҙнә кеше шул тиклем көтмәгәндә һәм ваҡытһыҙ өндәште - егет үҙе лә һиҙмәҫтән усын йомдо. Алтын күҙҙәи юғалғас, барыһы ла элекке хәленә ҡайтты: яҡындағы сауҡаларҙың олоно туҙ, елберләшкән япраҡтары ябай үлән. Ожмах ҡоштары урынына ер ҡоштары тороп ҡалды, гүзәл әкиәт ҡыҙҙарының тылсымлы тауышын йылға сылтырауы алмаштырҙы.

- Ял итеп алайыҡ, беҙҙең арттан кем ҡыуа? - Ғәләүетдин һөйләнә-һөйләнә өҫкә үрмәләне. Муса тәүге ҡаушауын еңеп, үҙен ҡулға алды, һиҙдермәй генә алтынды кеҫәһенә йәшерҙе. Ниңә улайтты - үҙе лә аңламай ҡалды. Ғәләүетдин асыҡ итеп әйткәйне бит: самородок тапһаң - үҙеңә. Уны белә лә, тик ниндәйҙер бер эске тауыш уға киреһен эшләргә ҡуша: йәшер, өндәшмә.

Икенсе яҡтан выждан ғазаплай башланы: алтын уртаҡ, өндәшмәҫкә хаҡың юҡ. Тәүге тауыш: әйт ни, әйтмә ни, барыбер һиңә бирер, шулай булғас, артыҡ һүҙ нимәгә? Выждан: тимәк, әйтеү бигерәк тә зарур, намыҫың таҙараҡ, күңелең тынысыраҡ була. Теге хәйерһеҙ тауыш: уныһы шулай, әммә алтын күрһә кеше һүҙен генә түгел, үҙен онота тигәндәрен ишеткәнең юҡмы ни? Ярай, бүлештең дә ти. Барыбер Ғәләүетдин теләһә кемде һыйлап, әрәм итеп бөтөр уны.

Һуңғы дәлил аяҡ терәп ҡаршылашҡан выжданды еңде хәҙергә өндәшмәҫкә, ә аҙаҡтан...

- Алтындың һеңеренә юлыҡтыҡ шикелле, - тине ял итергә ултырған Ғәләүетдин, сығарылған ҡомдо бармаҡтары аша иләп ҡарап, - бәхетең таш ярып сыҡҡан икән ҡәйнеш.

Бәхете ысынлап та таш ярып сыҡҡан Муса өндәшмәне Уның өсөн хәҙер инде көн оҙоно алтын ҡомо йыуыу мәғәнәһеҙ һәм ялҡытҡыс бер шөғөл булып күренде, үҙенең әүрәткес көсөн юғалтты. Унан да былайыраҡ, кеҫәләге һары йоморсаҡ әтәс булып ҡысҡырырға әҙер, әгәр артабан да бында ҡалһа, түҙҙермәҫ, әйтергә телде ҡысыттырып тик торор.

- Мин ҡайтам, еҙнә, үпкәләмә, - тине Муса ситкәрәк ҡарарға тырышып.

- Бына һиңә кәрәк булһа, - тип аптыраны Ғәләүетдин, - яңы өйрәтеп алып барам тигәндә.

- Юҡ, минән барыбер файҙа ла юҡ.

- Кем һинән файҙа һорай? Ниңә, әллә өҫ-башым бөтәйеп китер, тип ҡурҡаңмы? Ҡыуған кеше юҡ! Үҙеңә бер шөғөл булыр, ауыҙыңа май булғыры.

- Юҡ, еҙнә, минең кәсеп түгел был, ҡайтам мин.

Ғәләүетдиндең бөтә өгөт-нәсихәттәре, бар тел оҫталығы бушҡа ғына ине. Муса өҙмәй ҙә ҡуймай ҡайтырға булды.

- Ярай улай булғас, - тип ризалашты ахырҙа еҙнәй булған кеше, - былай тиҙ ялҡырһың тип уйламағайным. Күңелдә көҙөк ҡалдырма, әйтеп кит: әллә яңылыш үпкәләттемме?

- Юҡты һөйләмә әле, - тине Муса, - үҙең рәнйеп ҡалма. Хуш.

- Ярар әләйһәң, һау бул. Кире уйлап-фәләп китһәң, тағы кил, йәме, - тип оҙатып ҡалды уны Ғәләүетдин.

* * *

Юлда, Биҙергән тауын артылып, ял итергә ултырғас, уның күңелендә баяғы еңелеп ҡалған выждан йәнә дау ҡуптарҙы. "Шундай кешенең намыҫлылығына шикләнеп, насар эшләнең, - тип битәрләй ине ул егетте, - әле һуң түгел, кире әйләнеп бар ҙа, дөрөҫөн әйт". Теге аҫтыртын тауыш та бирешергә теләмәй, һаман отҡо һуға: "Алтын күргән кешенең зиһене томалана, ышанма". Муса ике ут араһында ғазапланып, байтаҡ ултырҙы. "Әллә ысынлап та кире барып, асырға ла һалырғамы? - тип уйланы ул бер мәлдә, - бирмәһә, бирмәҫ".

Әгәр шул саҡ ат тояҡтары тауышы уйҙарын бүлдермәһә, кем белә, бәлки шул фекер күңелендә нығыныр ҙа ине. Көсөк яғынан берәү йән-фарман сабып, боролоштан килеп сыҡты ла Муса урынынан тороп өлгөргөләгәнсе, уға тиңләшеп тә ҡуйҙы. Һыбайлының күҙенә аҡ-ҡара күренмәй ине, хатта үҙенә төбәлгән:

- Искәндәр! - тигән һөрән эргәһенән елеп үтеп, байтаҡ барғас ҡына әйләнеп ҡараны. Боролоп ҡарап, Мусаны танығас та, ярһыған атын тыя алмай, буйтым ары китеп барҙы. Ат ҡара тиргә батҡайны.

- Искәндәр! - тип ғәжәпләнде Муса. - Тауға ҡаршы ат саптырып, ништәп йөрөйһөң?

- Ағай! - тине Искәндәр атынан ырғып төшөп. - Һиңә ебәрҙеләр.

- Ни булды?

- Атайым...

- Нимә, ҡайтһын тинеме?

- Юҡ... ул үлде.

Муса үҙен-үҙе онотоп, тетрәткес ҡара хәбәр алып килгән ҡара айғырҙың мундаһына осоп менде, бер ҡулы үрәпсегән аттың башын артҡа шаҡарҙы, икенсеһе Искәндәрҙе уға менгәштереп ултыртты. Тибенгеһенә ҡот осҡос көс менән үксә тейеүҙән талағы "ғонҡ" итеп ҡалған айғыр килгән юлы буйынса кире сапты.

... Ғорур тәбиғәтле Луттың элек-электән Әбделфауаристың икенсе ҡатынынан тыуған Мөхәррәм менән борсағы бешмәне. Ғүмер буйы дәрәжәле урындарҙа ғына йөрөп өйрәнгән был кеше һуңғы йылдарҙа ауыл старостаһы вазифаһында булды. Ниндәйҙер бер янъял арҡаһында был вәжеүәтенән ҡолаҡ ҡаҡҡас, ул быныҡ үсен ауылдаштарынан алырға теләгәндәй, уғата ҡотороноп киткәйне. Бигерәк тә Лутҡа ҡаныҡты Мөхәррәм, уның баш эймәҫ холҡона һарыуы ҡайнап, яйы сыҡҡан һайын сәкәләшеүҙе ғәҙәт итеп алды. Тегеһе лә бирешергә теләмәне, ике туған ағай тип тормай, уның теленә ҡаршы тел менән тейешле яуабын ҡайтара килде.

Мөхәррәм һуңғы мәлдәрҙә Луттың: "Өй туҙҙы", - тигәнен ишетеп ҡалыпмы, әллә бәйләнер сәбәп эҙләпме, былай тип ҡаңғыртты:

- Өйөңдө бер яҡҡа шыуҙырып күтәрт, ҡояшты ышыҡлай (Улар тәҙрәләш кенә тора ине).

Туҙға яҙмаған дәғүәнән тамам ялҡҡан Лут түҙмәне:

- Минең өйөм киске ҡояшты ышыҡлай икән, һинеке иртәнге ҡояшты ышыҡлай. Улай булғас, һин дә өйөңдө шыуҙырып күтәрт, - тип яуапланы. Шунан, тураһын әйткән туғанына яраманған, тигәнде бик һәйбәт белгәнгә күрә, яуабы Мөхәррәмдең зитына оторо тейгәнен тойоп, үҙенсә уның алдында абруй ҡормаҡ булды. - Ҡызыҡлама мине, оҙаҡ ҡызыҡлаһаң, ҡара уны...

Ниҙән сей табырға белмәгән Мөхәррәмгә етә ҡалды.

- Ә-ә, әле һин миңә ужы һалаңмы? - тип секерәйҙе ул. - Кәкрәйеп, саҡ йөрөгәнен белмәй, бахыр. Шул телең булмаһа, күптән күҙеңде ҡарға соҡоп китер ине.

Лут, ысынлап та, саҡ йөрөй ине шул, Мөхәррәм уныһын дөрөҫ әйтә: был арала сырхауы бигерәк көсәйеп тора. Шуның өсөн дә ул үҙенә төбәлгән һуңғы һүҙҙәрҙе тыңлап та бөтмәйенсә, ҡул ғына һелтәне лә, өйөнә инеп китергә ашыҡты. Ләкин өйҙә толҡа тапмай, яңынан тышҡа сыҡты. Мөхәррәмгә үс итеп, йөрөп ятырға кәрәк, ниңә уның күңелен үҫтереп, өйҙә аунап ятырға? Ирмен тигән ир ут йотһа ла кешегә белдермәҫ.

Ялан кәртәлә ары һуғылып, бире һуғылып йөрөй торғас, ул йүгән тотоп атына китте. "Бөгөн атты өйгә ҡуйырға кәрәк, ҡана, төнгөлөккә бесән сабып алып ҡайтайым", - тип уйланы ул. Атын йүгәнләгәс, уны ҡайтышлай йылғаға төшөрөп һуғарып алды. Ат эсеп туйғас: "Ҡайтышлай тыҡрыҡтан, Мөхәррәмдәр эргәһенән үтелә, был меҫкен атына ла менә алмаҫ хәлгә төшкән икән, тип уйламаһын", - тип уға менеп алды.

Тыҡрыҡҡа килеп инеүе булды, ҡаршыға Мөхәррәм килгәнен күрҙе. Уның дыуамаллығын яҡшы белгән Лут өндәшмәй генә үтеп китергә ниәтләгәйне, ләкин баяғы игәшеү йөрәгенә уҡ булып ҡаҙалған мин-мин бәндә хәтәр ҡыланды: һис бер һүҙ әйтеп тормаҫтан, ситәндең төбө сереп торған бер бағанаһын һурып алып, уны-быны көтмәгән Лутты атынан йыға һуғып төшөрҙө. Һыбайлы: "Эһ!" - тигән хәлһеҙ генә ыңғырашыу ауазы сығарып, юл саңына тәкмәсләне.

Ат үҙе генә ҡайтҡанға хафаланып, хужаны эҙләй сыҡҡан Орҡоя әбей барып еткәндә ҡарт һаман шул урында ята ине.

- Хәлен белмәй, һаман атҡа менә, - тип орошҡан булды аңын-тоҡон белмәгән әбейе, - һин бер малаймы инде? Өйҙә генә ятмай. Һай-һай, шәбәйгән берәү!

Ул арала шау-шыуға кеше йыйылып китте, ара-тирә әкрен генә ыңғырашып ятҡан Лут бабайҙы күтәреп тигәндәй өйөнә алып барҙылар. Бынан һуң күп тә үтмәне, хәле бермә-бер хөртәйҙе. Лут, телдән ҡалмаҫ борон тип, эргәһенә йәмәғәтте Орҡояны саҡырып алды.

- Йә, бәхиллә, оҙаҡ ятмам, - тине.

Бер аҙ ятҡас, өҫтәне:

- Мине Мөхәррәм ағай һуйыл менән һуҡты... Әллә ҡайһы ерем өҙөлгән һымаҡ булды. Быны үҙеңә генә әйтәм, аслан балаларға өндәшә күрмә, исмаһам, улар...

Әллә Тәнре ошо ерҙә унан тел асҡысын тартып алды, әллә бабай үҙ фиғеленә тоғро ҡалыуҙы һуңғы минутында ла хуп күрҙе - нисек кенә булмаһын, ҡартының ауыҙынан Орҡоя башҡаса бер генә өн дә ишетмәне. Ярай әле, ошоларҙы әйтеп өлгөрҙө, әҙ генә һуңлаһа, ҡот осҡос серҙе үҙе менән алып китер ине. Ә телдән ҡалғайны, үҙе әйтмешләй, оҙаҡ та ятманы мәрхүм.

* * *

Коридорҙа, ваҡыттың аҡҡан һыу икәненә ишара яһап, надзирателдәрҙең аяҡ тауышы ишетелә. Улар, сәғәт йөрөшөн хәтерләтеп, бер яҡына, бер алыҫая: тап-топ, тап-топ.

Артабан хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәте хаҡында төпсөрҙәр, моғайын. Хәрби хеҙмәт, хәрби биография... Батша армияһында ябай һалдат, шунан унтер-офицер, һуңынан революция һалдаты, айырым башҡорт атлы полкы командиры, башҡорт кавалерия бригадаһы командиры, Мәскәүҙәге хәрби академияның тыңлаусыһы, һуңғы званиеһы - комбриг.

1912 йылдың көҙөндә батша хеҙмәтенә алынған Муса Көсөк ауылынан йөҙ ҙә етмеш саҡрымда ятҡан Мейәс станцияһына йәйәүләп юлға сыҡҡанда яҙмышым шулай булыр тип уйланымы икән? Тыуған ауылынан алып оҙатыу пунктына тиклемге аралыҡ ҡапма-ҡаршылыҡтар, ғазаптар, эҙләнеүҙәр, осоштар, үкенестәр тулы хәрби биографияһының юл башы булыр тип күҙ алдына килтерҙеме икән?

Армияға алынғандарҙы йыйыу һәм оҙатыу пунктына өсөнсө көндө кискә ауыштырып килеп етте Муса. Бейек ҡойма менән уратып алынған майҙандың һәр яғында тип әйтерлек ике ҡатлы ағас казармалар урынлашҡан. Казармалар алдында оҙон эскәмйәләрҙә төркөм-төркөм булып эшһеҙлектән иреккән йәш егеттәр гәпләшеп ултыра. Төркөмдәрҙең береһендә башҡортса һөйләшһәләр, икенсеһендә - русса һүгенәләр. Ара-тирә тәмәке уттары баҙлап ҡала - быныһында өндәшмәһәләр ҙә урыҫ егеттәре икәнен аңлап була.

Пункт буйынса дежурлыҡ ҡылыусы оло ғына йәштәрҙәге офицер Мусаның документтарын иғтибар менән ҡарап сыҡҡандан һуң:

- Че так долго? - тип һораны.

Русса арлы-бирле һупалаған Муса:

- Пешком ходил, - тип яуапланы.

- Да-а, - тип һүҙҙы дежурный уның көслө, төпһуҡма кәүҙәһен күҙҙән үткәреп. Шунан көтмәгәндә тап-таҙа башҡорт телендә:

- Күбәләк-Тиләүҙәр ана-ау казармала, бар, ял ит, иртәгә эшелонға тейәлергә, - тимәһенме.

Аптырауҙан Мусаның хатта арыуы онотолғандай булды: "Беҙҙеңсә аңғарған офицер алдында телде онтай яҙып русса һөйләшеп тор, имеш!" Шулай ҙа аптырағанын белдермәҫкә тырышып һораны дежурныйҙан:

- Ҡайҙа ебәргәндәрен белеп булмаҫмы икән?

Дежурный көлөмһөрәне:

- Уныһын барып еткәс белһәң дә ярай. - Әҙ генә туҡтап торғандан һуң, өҫтәп ҡуйҙы. - Ә впрочем, ниңә әйтмәҫкә: Себергә, Маньчжурияға.

Маньчжурия! Был һүҙ сиктән тыш арыған, йонсоған Мусаға бер ни ҙә аңлатмай ине әле, сөнки хәҙерге мәлдә уның берҙән-бер теләге - ҡайһы ергә булһа ла йығылыу ҙа, йоҡлау ине.

(Дауамы бар).

✓ *Күрһәтмәйем бәпесемде, -*
Бәпес уянып ҡуйыр,
Тамһынышып ҡараһағыҙ,-
Күҙегеҙ тейеп ҡуйыр.

"БАШҠОРТ ЙОЛАҺЫ" СЦЕНАРИЙҘАР КОНКУРСЫ

Башҡорт мәҙәниәтен һуғарыусы йәншишмә - башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. Йолаларҙа сағылған халыҡсан йәшәү фәлсәфәһе төпкө аңды уята. Йола фольклоры һәр төбәктәге ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, тел һәм кейем, йола һәм ырым, йыр һәм бейеү күренештәрен туплай. Республика Халыҡ ижады үҙәге тарафынан республикала төбәк-ара башҡорт фольклор ансамблдәре фестивале "Ашҡаҙар таңдары" (Стәрлетамаҡ ҡалаһы), "Туй йолалары" (Шаран районы), "Салауат йыйыны", "Башҡорт тирмәһе" бәйгеләре ойошторола килә. Беҙ Бөтә донъя фольклориадаһы алдынан "Башҡорт йолаһы" сценарийҙар конкурсы иғлан итәбеҙ. Төбәктәрҙән ер-һыу тарихына һәм этнографик мираҫҡа таянып ижад ителгән сәхнә һәм майҙан тамашалары өсөн яҙмалар көтәбеҙ. Иң уңышлы сценарийҙарҙы ҡиммәтле бүләктәр көтә.

БӘПЕС МЕНӘН ТАНЫШЫУ ЙОЛАҺЫ

Алып барыусы: Борон-борондан башҡорт халҡы шатлығын да, ҡайғыһын да, аслығын да, һалҡынын да бергә кисереп, үҙ-ара бик дуҫ йәшәгән. Элек ашау наҡыҫ, бала-саға күп, шуның өсөн йөклө ҡатын бәпесләү менән бала-саға, ҡыҙ-киленсәк, апай-инәйҙәр яңы тыуған бәпес менән танышырға барыр булған. Кемдер ҡоймаҡ ҡойоп, кемдер аш бешереп, кемдер кейем тегеп тә алып барған. "Ҡолонло бейәнән ҡойоло һыу ҙа артмаҫ" тигән әйтемдә ошо хаҡта әйтелгән дә инде. Яңы бәпесләгән ҡатынды тиҙерәк аяҡҡа баҫтырыу, уның хәлен белеү, ярҙам итеү, күңелен күтәреү өсөн һәр ваҡыт йәшәй "Бәпес менән танышыу" йолаһы.

Беренсе күренеш

Музыка (инструменталь ансамбль "Тыуған илкәйем" көйөн уйнай).

Таң һыҙылып килгән ваҡыт. Әтәс ҡыҫҡыра, өйҙән тауыш ишетелә.

Сафия (тауышы)**:** Зинһар өсөн, кендек әбейен генә саҡырып алып килегеҙ әле! Кендек әбейенә өндәшегеҙ! Атаһы, ҡәйнәм, бушанырға ваҡытым етте ҡошай (диалект, оҡшай, мәғәнәһендә)!

Өйҙән ире Рамаҙан албырғап йүгереп сыға: аҡ ыштанда, башында бүрек, бер аяғында быйма, икенсеһендә галуш. Йүгереп барып икенсе өй ишеген дөбөрләтә.

Рамаҙан: Мәрйәм инәй, ас! Ас әле!

Мәрйәм әбей күрше йорттан сыға.

Мәрйәм: Нимә булып китте, Рамаҙан улым, ут-фәлән сыҡты мәллә?

Рамазан: Әйҙә, Мәрйәм инәй, тиҙ бул, киленең ни!.. Беләһең дә инде!

Мәрйәм: Ауырып киткән... Хәйерле булһын, һәйбәт кенә ҡотолорға насип итһен. Эй, Рамаҙан улым, аяғым ойоған, нисек кенә итеп барып етермен икән?

Рамазан: Әйҙә, әйҙә инде, инәй, йөкмәп алып ҡайтырмын.

Ай-вайына ҡуймай, әбейҙе йөкмәп алып китә. Бер аҙҙан өйҙән яңы тыуған бәпәй тауышы ишетелә.

Музыка ("Һылыу ҡыҙҙар" көйө яңғырай).

Ҡыҙҙар еләктән ҡайтып килә, ҡулдарында еләкле һауыттар, сәскәләр.

Өйҙән Гөлнәфиға исемле ҡыҙ сыға.

Зөләйха: Гөлнәфиға, һин ниңә еләк йыйырға барманың?

Мәҙинә: Еләк шундай эре, ныҡ бешкән. Һауыттар һә тигәнсе тулды!

Гөлнәфиға: Минең әсәйем кисә бәпес алып ҡайтты, минең ҡустым бар, әсәйгә ярҙам итәм, шуға бара алманым.

Динислам: Ә ҡустыңды ҡайҙан алып ҡайттылар?

Гөлнәфиға: Табып алғандар - шалҡан араһынан!

Динислам: Ә-ә, әллә минең кеүек һыуҙан ағып килгәнме, тигәйнем.

Сәриә: Мине лә әсәйем йылғанан, мәкенән биҙрә менән һоҫоп алған.

Олораҡ балалар көлөшә.

Сәриә: Нишләп көләһегеҙ, өләсәйем шулай тине.

Зөләйха (ситкә китеп балалар менән шыбырлашып ала)**:** Гөлнәфиға, бик шатлыҡлы хәбәр әйттең, ҡотлайбыҙ һине. Бәпесте күргә килһәк буламы?

Гөлнәфиға: Әсәйемә әйтермен. Хәҙер үк әйтәм! *(Өйгә инеп китә.)*

Динислам: *Танышырға киттек, әйҙә,*
Еңгәмдең улы тыуған.
Күстәнәскә тиеп әсәй
Тәмле ҡоймаҡтар ҡойған.

(Балалар өй янына килә.)

Өй эсе. Әсәй бәпәйен күтәреп алғы планға килә, бишек көйөн көйләй.

Гөлнәфиға урамдан йүгереп инә.

Гөлнәфиға: Әсәй, әсәй!

Әсәй: Сеү! Ҡустыңды уятаһың бит! *(Бәпесте сәңгелдәккә һала, сымылдыҡ ҡорғанын ҡаплап ҡуя.)* Йә?

Гөлнәфиға: Дуҫтарым бәпес менән танышырға килеп ултыра.

Әсәй: Ҡыҙым, бәпес күреү - борондан ҡалған йола. Халыҡ йолаһын тота икән дуҫтарың, йоланы белә икән, яҡшы кешеләр булып үсерҙәр.

Гөлнәфиға: Рәхмәт, әсәкәйем, улайһа, уларҙы өйгә саҡырам!

Йыуаса, бүләк тотҡан балалар инә, һаулыҡ һорашалар. Әсәй бәпәйе янында. Түрҙән Өләсәй сыға, балалар уға йыуасаларын тапшыра, ултырышып, бергә доға ҡылалар. Балалар түр яҡҡа ҡарап шыбырлаша.

Динислам: Танышырға килдек, еңгә,
Сымылдыҡты ас әле.
Матур бәпесең бар, тиҙәр,
Беҙгә лә күрһәт әле.

Гөлнәфиға: Әсәй, ҡустымды күрһәтеп, дуҫтарым менән таныштырайыҡ.

Әсәй *(шаян тауыш менән)***:**
Күрһәтмәйем бәпесемде, -
Бәпес уянып ҡуйыр,
Тамһынышып ҡараһағыҙ,-
Күҙегеҙ тейеп ҡуйыр.

Мәҙинә: *Күҙ тейһә ни, өләсәһе*
Шундуҡ өшкөрөп китер.
Әсәй ҡаймаҡ ебәргәйне,
Бәпескә ауыҙ иттер!

Өләсәй: Мин өләсәй. Ҡайҙа, ҡана, кемегеҙҙе өшкөрәйем? Бәпескә күҙ теймәһен! Өшкөртөлгән тоҙом бында ғына. Бисмиллаһи, килен! Күрһәт инде сабыйҙы, зарығып көтә бит ана ҙурҙур ағалары, матур-матур апалары. Йәгеҙ!

Әсәй бишектән баланы ала.

Өләсәй: Һикерәнләмәй генә, "бисмилләһир-рахмәнир-рахим" тип килеп ҡарағыҙ. Йүгерекләмәгеҙ сабый янында, ел ҡағылыр. Тәүҙә ҡулын, бармаҡтарын ҡарағыҙ, дуҫ булырһығыҙ.

Балалар бәпесте ҡарайҙар, теләктәр теләйҙәр.

Динислам: И-и, бик бәләкәй бармаҡтары! Күрешеп тә булмай. Көсө лә юҡ, бик яҡларға кәрәк инде был бәләкәсте!

Гөлнәфиға: Миңә иң беренсе аяҡтарын күрһәттеләр, минең бармағым хәтле генә тәпәйе... Туғанымды бик йәлләп кенә, һаҡлап ҡына йөрөтөрмөн. Күрҙегеҙме, ул миңә оҡшаған?

Динислам: Миңә лә оҡшаған.

Гөлнәфиға: Юҡсы! Һинең туғаның түгел дә инде ул, минең туғаным.

Динислам: Малай кеше булғас, барыбер миңә оҡшаған!

Ишек ҡағалар. Килен бәпесен күтәреп, түр яҡҡа кереп китә.

Өләсәй: Балалар, һеҙ ҡырҙараҡ ултырып тороғоҙ. Оло инәйҙәр ҙә бәпес менән танышырға килә.

Динислам: Беҙ бәпесте алдараҡ күрҙек.

Өләсәй: Гел шулай белдекле, булдыҡлы булығыҙ, йәме.

Оло инәйҙәр инә, һаулык һорашып, ултырып доға ҡыла.

Беренсе ағинәй:
Тышта йылы йәй икән,
Башҡа кәпәс тар икән.
Кисәнәк кенә ишеттек -
Һеҙҙә бәпес бар икән.

Икенсе ағинәй: Хәйерле булһын. Сафия киленгә бәпесе ҡотло булһын.

Өләсәй: Эйе, Хоҙайға шөкөр, рәхмәт инде киленемә, ейән алып ҡайтты, ул шәжәрә ағасыбыҙҙы дауам итер, Аллаһы бойорһа.

Әбейҙәр килтергән ризыҡтарын өләсәйгә тапшыра.

Бер-бер артлы бәпесте барып ҡарайҙар.

Өләсәй: Бәпес бай килгән, иң яҡшы бабайҙар, өләсәйҙәр, ағайҙар, апайҙар янына барам, тип бүләк тә килтергән. Бәпес бүләген таратайым - беләҙектәр, йыртыштар, ҡулъяулыҡтар, еҫле һабындар бар. (Бүләк тарата. Алыусылар теләк әйтә).

Теләктәр: Бәхетле булһын. Иманлы булһын. Оҙон ғүмерле булһын. Ил улы булһын.

Өләсәй: Бик ҙур рәхмәт! Ололап, хөрмәтләп килгәнегеҙ өсөн. Ейәнемдең теүәл ағзалы булып, имен-аман, үҙ аҡыл-фиғеле менән йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәй буй еткереүе өсөн теләк теләйек.

Доға ҡылалар.

Ҡыҙҙар бүләк беләҙектәрен кейеп ала.

Ағинәй: Эй, беләҙеге-йөҙөгө ниндәй матур, әллә бейеп алһындармы?

Һамаҡлау: Беләҙегем-йөҙөгөм, кейермен әле үҙем! Бәпес бүләген ҡотлатып бейермен әле үҙем! *(Ҡыҙҙар бейей. Ҡыҙҙарҙы мактайҙар).*

Хәҙрәт кейемле кеше инә.

Кеше: Әле һауҙармыһығыҙ?

Өләсәй: Инегеҙ, инегеҙ! Түрҙән уҙ, хәҙрәт!

Динислам: Ниндәй хәҙрәт? Илгиз бит ул!

Өләсәй: Ҡайһылай оҡшаған, собханалла. Нишләп улай кейенеп алдың?

Илгиз: Бәпесте күргем килде, һеҙҙе көлдөргөм килде лә шаяртырға булдым.

Өләсәй: Бәпес тә шулай шаян булыр инде. Бының өсөн һиңә яза бирәбеҙ, әйҙә, бейе улайһа.

Илгиз шаян бейеү бейей. Барыһы ла ҡул саба.

Ағинәй: Әйҙәгеҙ әле, балалар, бәпескә аҡ теләктәр теләп, йырлап алайыҡ.

Бергә:
Фани ғына аҡ донъяға,
Иманы менән килһен,
Хоҙайҙың аҡ донъяһының
Кинәнестәрен күрһен.
Ризыҡ тотоп килдек әле
Башҡаларҙан кәмме беҙ.
Беҙ ҙә - Хоҙай балалары.
Ташып тора ғәмебеҙ.

Өшкөрөрбөҙ, төшкөрөрбөҙ -
Изге беҙҙең теләктәр,
Бар теләктәр ҡабул булыр,
Ихлас булһа йөрәктәр.
Муйылдай ҡара күҙең,
Ҡояштай нурлы йөҙөң,
Балдай татлы, йомшаҡ булһын
Телендәге һәр һүҙең.
Ололарҙы хөрмәт ит,
Кеселәргә бул үрнәк.
Оҙон ғүмер насип булһын,
Насип булһын ил гиҙмәк.
Әсәйеңдең күкрәк һөтө
Булмышыңа көс бирһен;
Салауаттай батыр итеп,
Матур итеп үҫтерһен.
Ҡыуаныстар ҡойолоп торһон
Йөрөгән юлдарыңа,
Мылтыҡ түгел, алтын балта
Уйнаһын ҡулдарыңда!

Оло инәй: Ярай, балалар, ҡайтышайыҡ, килен беҙгә мәшғүл булып, өҙлөгөп ҡуймаһын.

Теләктәр теләй-теләй, һаубуллашып сығалар.

Өләсәй рәхмәт әйтеп оҙатып ҡала.

С. МЫРҘАҒӘЛИНА.
Белорет районы
Инйәр ҡасабаһы.

✓ *"Шүлгәнташ" ҡурсаулығында 2019 йылдың июль айындағы иҫәпләүҙәрҙә 40 баш айыу теркәлгән. 1992 һәм 2017 йылдарҙа улар 44 һәм 47 булған. 1999-2010 йылдарҙа иһә 26-27 генә иҫәпләнгән икән.*

ИНТЕРНЕТТАН

АҘ ҒЫНАҺЫ ЛА ЗЫЯНЛЫ

■ Спиртлы эсемлектәрҙе аҙ ғына ҡулланыу зыянлы түгел, киреһенсә, организмға был файҙалы, тип уйлаусылар хаталана. Австралияның яман шеш менән шөғөлләнеүсе бер ойошмаһы белгестәре асыҡлауынса, был ауыҙ ҡыуышлығы һәм тамаҡ яман шеше хәүефен арттыра. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, донъялағы үлем сәбәптәренең 6 проценты алкоголгә тура килә. Бигерәк тә бауыр зарарлана. Белгестәр әйтеүенсә, бауыр циррозы кешенең йыл дауамында эскән алкоголь күләменә бәйле барлыҡҡа килә. Даими эсеүселәр йышыраҡ зыян күрә, ти улар.

■ Көньяҡ Калифорния университетында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ир-егеттәр йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә нығыраҡ бирешә икән. Белгестәр фекеренсә, шулай ҙа һуңғы тиҫтә йыл эсендә йөрәк ауырыуҙары сирҙәренә дусар булыусылар һаны күпкә кәмегән, был дөрөҫ туҡланыу, инфекциялы ауырыуҙарҙы ваҡытында иҫкәртеү һәм башҡа факторҙар менән бәйле. Тик барыбер ҙә профилактика күберәк гүзәл затҡа яҡшыраҡ тәьҫир итә, 13 үҫешкән илдә йәшәүселәрҙе тикшереп, ғалимдар шундай һығымтаға килгән. Был ир-егеттәр араһында тәмәке тартыусылар күп булыу менән бәйле, ти улар.

■ Ниндәйҙер йәрәхәт алған кешелә кортизол кимәле юғары икән, ул был хәлде иҫенә төшөргән һайын, уны яңынан кисерәсәк. Бына шуның өсөн дә йәрәхәттән һуң стресс кисереүселәр насар хәтирәләр менән оҙаҡ яфалана. Бохумдағы Рур университеты белгестәре тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларға геометрик фигуралар күрһәткән. Ҡайһы бер фигураларҙы күрһәткәндә еңелсә электр тогы һуҡҡан. Икенсе көнөнә һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың ярты-һына - кортизол, икенсеһенә составында бер ниндәй ҙә матдә булмаған "буш" таблеткалар биргәндәр. Өсөнсө көнгә белгестәр ҡатнашыусылар нисә геометрик фигураны хәтерендә ҡалдырғанын асыҡлаған. Һөҙөмтәлә, кемдәр кортизол ҡабул иткән, ток һуҡҡан фигураларҙы айырыуса яҡшы иҫләгән. Уларҙың тиреһенең токты үткәреү сифаты ла күтәрелгән, был иһә эмоциональ кисерештәрҙең юғары булыуы тураһында һөйләй.

■ Туҡлыҡлы иртәнге аш кешегә көн дауамында төрлө эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн энергия бирә, мейенең дөрөҫ эшләүен тәьмин итә, метаболизмды тиҙләтә. Быларҙың барыһы ла кәүҙәне һомғол көйө һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Иртә - тәм-том менән һыйланыу ваҡыты ла, тип белдерә Тель-Авива университеты ғалимдары. Сөнки был ваҡытта матдәләр алышыныуы яҡшы эшләй һәм артыҡ калориялар шунда уҡ янып юҡҡа сыға. Идеаль иртәнге аш сәғәт 6-нан 8-гә тиклем булырға тейеш. Емеш-еләкте көндөҙгө 16 сәғәттән һуң ашау ҙа зыянлы икән. Йоҡларға ятырҙан ике сәғәт алда бал ҡушылған һөт эсеү сәләмәтлеккә яҡшы тәьҫир итә, ти ғалимдар.

ЙӘНӘШ ДОНЪЯ

Тәбиғәттәге төрлө үҙгәрештәр, ҡыҙыҡлы йә ғибрәтле күҙәтеүҙәр, ғәҙәти булмаған күренештәр тураһында йыш яҙыла бөгөн. Интернет селтәрҙәрендә төрлө видеояҙмалар, фотоһүрәттәр йөрөй. Ҡарайһың да, ни өсөн былай булды икән йәки нилектән был январ улай ҡыланған, тип уйлайһың. Шуның кеүек, айыуҙар ҙа һуңғы мәл хайран итә. Уларҙың кешенән ҡурҡмай, юл ситендә йөрөүҙәре, ауыл эргәһендәге ҡый багынан килеп сығыуҙары, урам буйлап мал баҫтырыуҙары һәм башҡа төрлө башҡа һыймаҫ ҡылыҡтары мәрәкә булыуҙан туҡтайҙыр инде. Туҡтайҙыр, сөнки тау-урманлы райондарҙан "айыу көн аша мал һуға" тигән хәүефле сигналдар ҙа килә.

ТАЙЫШТАБАН ТУРАҺЫНДА...

ысынбарлыҡ

Ул ниңә ауылға килә?

Айыуҙарҙың кешеләргә һәм кеше йәшәгән биләмәләргә яҡынлашыу сәбәбен аңлау өсөн айыулы яҡтарҙың төрлө интернет-хәбәрләшеү төркөмдәренә һорауҙар ҡуйҙым. Ғүмер буйы шул тәбиғәт эсендә йәшәгән һәм айыуҙарҙы ла күреп белгән, борон-борондан уларҙың холоҡ-фиғеле менән таныш булған халыҡтың фекерен ишетке килде. Һәм төрлө яҡтан төрлө яҙмалар алдыҡ. Берәүҙәр сәбәпсе булырҙай хәлдәрҙе, икенселәр айыу мажараһын, өсөнсөләр һунарсы күҙәтеүҙәрен яҙып ебәргән. Хатта "Шүлгәнташ" дәүләт ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре, биология фәндәре кандидаттары һәм үҙен "браконьер" тип исемләгәндәрҙән дә сәләм килде. Һәр хәлдә, был һорау күптәр өсөн актуаль булған икән.

Мин үҙем дә урман ҡыҙы һәм айыуҙы әкиәттән генә түгел, күреп беләм. Уның хаҡында йөҙ төрлө тарихтар һөйләгән, тереһен дә, үлеһен дә алып ҡайтҡан һәм ғүмер буйы айыу менән отҡорлоҡта уҙышып йәшәгән һунарсы балаһымын. Йәғни, был тема миңә таныш, тип әйтмәксемен.

Халыҡ менән аралашыуҙан һәм Шүлгәнташ ҡурсаулығы белгестәре биргән мәғлүмәттәрҙән түбәндәге сәбәптәрҙе ҡарап сығайыҡ. Шул сәбәптәрҙе асыҡлаған арала төрлө тарихтарҙы, иҫтәлектәрҙе лә урап үтмәйәсәкбеҙ, әлбиттә.

Айыуҙарҙың һаҡһыҙлығы, иң беренсе сиратта, уларҙың һаны күбәйеүгә бәйле, тиелә беҙгә килгән һәр икенсе яҙмала. Рәсәй буйынса һунарсылыҡ тәртиптәре үҙгәреү беҙҙең яҡтарға ла йоғонто яһай. Элек айыуға һунар итеүҙең 55 проценты уны өңөндә алыуға ҡайтып ҡалһа, 2010 йылдан был ҡышҡы һунар тыйылған. Әйтергә кәрәк, рөхсәт ҡағыҙы булмағандарға айыу өсөн штраф бик ҙур, түләү 500 меңгә барып етә (РФ ЕК 258-се ст.). Бөгөнгө көндә полицияның да был эшкә ныҡлы тотоноуы, кәрәҙле телефон бәйләнеше булыуы ла үҙенекен итә. Ҡайҙалыр, кемдер айыу алғаны беленә икән, шундуҡ хәбәр итеүселәр ҙә табыла. Айыу ауларға рөхсәтең булған осраҡта ла был һунар һәр кемдең ҡулынан килә торған эш түгел, ти белгән кешеләр. Быныңөсөн иң беренсе ҙур тәжрибә, унан саялыҡ, артабан инде ҡулайлы мылтыҡ, яҡшы һунар эте кәрәк. Ауыл кешеһе өсөн былар хатта айыуҙың үҙенә ҡарағанда ла ҡиммәткә төшә.

Әлегерәк урман халҡы айыуҙың ите-тен рәхәтләнеп ашай ҙа ине. Бала саҡта атайыма көҙөн икенсе ауылдарҙан килеп, айыу итенә заказ биргәндәрен хәтерләйем. Һәм үҙем дә ул итте һыпыра торғайным. Хәҙер уны ризыҡ итеүселәр бик һирәктер. Һуңғы йылдарҙа айыу итендә элек күҙәтелмәгән трихинеллеза тигән паразит табылған. Ашап ағыуланғандар булған. Шул сәбәпле айыу ите, тиреһе, үте, майы хәҙер йәшерен баҙарҙа ла бик осһоҙға әйләнгән. Рөхсәтһеҙ айыу алыу элек килемле кәсеп булһа, бөгөн рөхсәтһеҙенең дә, рөхсәтлеһенең дә килеме 3-5 тапҡырға кәмегән. Ә айыуҙар бик шәп үрсей. Рәсәй буйынса айыу иң ныҡ үрсегән төбәк - ул Башҡортостан, тиҙәр. Башҡорт айыубикәләре ике йыл һайын 2-3-әр бала таба. Әле 1980 йылда уҡ ҡурсаулыҡ зоологы А.В. Лоскутов "Бөрйән айыуҙары СССР буйынса иҫәпләнгән урта һандан ике тапҡырға шәберәк үрсей", тип яҙған булһа, һуңғы 30 йыл эсендә был күрһәткестәр артыҡ үҙгәрмәгән. Тимәк, улар бөгөн дә шулай әүҙем арта. Бөрйән районында айыуҙар һаны 300-400 башҡа ла барып баҫа. "Шүлгәнташ" ҡурсаулығында 2019 йылдың июль айындағы иҫәпләүҙәрҙә 40 баш айыу теркәлгән. 1992 һәм 2017 йылдарҙа улар 44 һәм 47 булған. 1999-2010 йылдарҙа иһә 26-27 генә иҫәпләнгән икән. Артыҡ үрсеп, улар территорияларына һыйышмай китә. Йәшерәк айыуҙар олораҡтарынан ҡурҡып та һәм аҙыҡ эҙләп тә кешеләр йәшәгән яҡтарға сығырға мәжбүр була.

Бөрйәндән Айбулат Рәхмәтуллин смс-хәбәр менән айыуҙарҙың ауыл эргәһендә йөрөүен ошолай тип аңлата: а) экосистеманың үҙгәреүе (янғындар, урмандарҙы вәхшиҙәрсә ҡырыу); б) аҙыҡҡа ҡытлыҡ; в) ауылға яҡын ташланған сүп-сар ҡалдыҡтарының артыуы, шулар араһында боҙолған аҙыҡ-түлек, хайуан үләкһәләре булыу осраҡтары; г) уларҙың (айыуҙарҙың) дәүләт ҡурсыуы аҫтында булыуҙары, шул иҫәптән ишәйеп, йәш айыуҙарға сараһыҙҙан үҙҙәренә яңы ареал эҙләп, ауылға яҡынайыуҙары; д) ҡартлыҡ, йә ауырып үҙенә аҙыҡ таба алмағанлыҡтан ауыл малына һунар итеүгә күсеүе һ. б. (Аҙағынан: "Үҙҙәренән һорап булмай бит инде, ҡурҡыта",- тип өҫтәп ҡуйған. Эй, мәрәкәсел дә инде ауыл кешеһе!)

Һуңғы йылдарҙа урман-таулы райондарға, шул иҫәптән Бөрйәнгә, туристар ағымы тыйып тотҡоһоҙға әйләнде. Башҡортостанда туризмды үҫтереү айыуҙарҙың холҡон үҙгәртеүгә лә килтерә, тип яҙа биология фәндәре кандидаты Марина Бакалова. Айыуҙар кеше тауышын ишетеп йөрөүгә, уларҙы йыш күреүгә күнегә. Бигерәк тә туристарҙан һуң ҡалған аҙыҡ-түлеккә күңелдәре ята. Әҙәмде еңел тамаҡ табыу сараһы итеп ҡабул итә. Кеше аҙығына иң тиҙ өйрәнеүсе януар икән дә ул айыу. Ул бөтә нәмәне лә ашай. Икмәк булһынмы, ҡурылған итме, тәм-том, майлы ризыҡтар - барыһы ла бата. Бер апайҙың хатын килтереп үтәм әле ошо урында, исемен Хөснә тигән: "Йәш саҡта ғаилә менән бесәнгә йөрөйбөҙ. Йылға аша ғына айыу тауышлана. Өс балалы айыу был. Йылға буйында ҡалдырған майҙы, һөттө нисек тә асып, банкаһын ташҡа һуғып ярып ашап ҡуялар. Ниндәй аҙыҡты йәшереп китһәм дә табып алалар. Сей картуфтарҙы ла кимереп бөтәләр. Хатта ҡыуыш бесәне араһына тыҡҡан какаоны ла ипле генә итеп йыртып ялаған. Балалары ҡыуыш башына менеп, бесәнен туҙҙырып уйнап киткән була. Төшкө аш бешергәндә ҡайһы ваҡыт аш еҫенә килеп, йылға аша аяғүрә баҫып ҡарап тора торғайны. Балалары ла теҙелешеп тора. Беҙ тастан барабан элеп ҡуйғанбыҙ, шуны доңғорҙатабыҙ, радио ҡыҫҡыртып һөйләтеп ҡуябыҙ. Бына шулайтып айыу тамағыбыҙҙы "талап" ыҙалатты беҙҙең..."

Халыҡ араһында йөрөгән "ҡыш йоҡламай торған муйнаҡ айыу" тигән нигеҙһеҙ хәбәрҙәрҙе кире ҡаға белгестәр. Беҙҙең яҡ айыуҙары һоро айыуҙар. Айыу балалары тыуғанда муйнаҡ булып тыуырға мөмкин, әммә үҫә бара был ағы юғала. Төҫтәре һарғылт-һоро, һоро, көрән һәм ҡара-көрәнгәсә айырыла ала. Республика буйынса алғанда, район ни тиклем төньяҡтараҡ, айыу ҙа шул тиклем "ҡарараҡ" һәм эрерәк була. Көньяҡҡараҡ улар "ағыраҡ" та, бәләкәйерәк тә. Бик һирәк аҡ муйынлы, муйынында муйнаҡ табы булған айыуҙар ҙа осрап ҡуя. Тик былар беҙ белгән ҡыш йоҡламаған муйнаҡтар түгел. Ундай муйнаҡтар Башҡортостанда бөтөнләй юҡ һәм булмаған да. Ҡыш йөрөгән айыу ул йәки ояһынан ҡурҡытып сығарылған, йәки башҡа сәбәп менән килеп сыҡҡан. Бары "кеше ашау өсөн" түгел. Беҙҙең яҡтағы айыуҙың муйнаҡ булып ҡуйыуы генетик хата ғына, ти белгестәр. Бындай айыуҙың ата-бабаһы альбинос-айыу булырға мөмкин. Муйнаҡлыҡ айыуҙарҙа балаһы-ейәненә бирелмәй, сөнки был үҙенсәлектән януарға бер ниндәй ҙә файҙа юҡ. Ул бары тик шулай осраҡлы ғына килеп сыҡҡан генетик тайпылыш.

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА
(Дауамы бар).

✓ *Натрий иондары кеше организмы нормаль эшләһен өсөн бик кәрәк. Натрий тәндәге һыу балансын нормаға килтерә, мускулдар ҡыҫҡарыуында ҡатнаша, шулай уҡ матдәләр алышыныуын нормалләштерә.*

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ

ФЕКЕР ТЫУҒАНДА...

мейе нишләй?

Серәкәйҙәрҙең мейеһе юҡ икәнен беләһегеҙме? Моғайын, был турала белгәс, йылы миҙгелдә был бөжәктәрҙең тәртибе тулыһынса ҡәнәғәтләндерер. Мейеләре булмауға ҡарамаҫтан, уларҙа уйлау аппаратына оҡшаш нимәлер бар - тап ганглиялар тупланыуы уға осҡан тәпешкәнән ҡасыу мөмкинлеге бирә лә инде. Әммә серәкәйҙең ганглиялары эшмәкәрлеге бөгөн тулыһынса өйрәнелһә, кеше мейеһе әлегәсә серле һәм аңлашылмаған өлкә булып ҡала. Ысынлап та, уй-фекер тыуғанда мейе нимә эшләй һуң?

Нимә ул фекер?

Кеше мейеһенең уртаса ауырлығы яҡынса 1,5 килограмм. Ҡайһы бер ваҡытта ул кәмерәк, ҡайһы бер осраҡтарҙа - ауырыраҡ. Әммә мейе ҙурлығы менән кешенең интеллектуаль һәләте араһында бер ниндәй ҙә бәйләнеш юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, мейе теләһә ниндәй йән эйәһенең (серәкәйҙәрҙән башҡа) организмында мөһим ағзаларҙың береһе булып тора, теге йәки был эшкә этәргән фекер тыуыу өсөн яуаплы.

Америка ғалимдарының теорияһына ярашлы, теләһә ниндәй уй тәнебеҙҙең реакцияһы һәм айырым хәтирәләре һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән үҙенсәлекле тирбәлеште хасил итә. Икенсе төрлө әйткәндә, кешенең фекере баш мейеһе нейрондары ярҙамында барлыҡҡа килгән электр зарядының үҙенсәлекле схемаһы булып тора.

Фекер нисек барлыҡҡа килә?

Меңәр йылдар дауамында ғалимдарҙы фекерҙең нисек барлыҡҡа килеүе тураһындағы уй борсой. XXI быуатҡа аяҡ баҫҡас, беҙ был боронғо серҙе сисеүгә яҡынлаштыҡ һымаҡ. Кешенең төрлө хис-тойғоға бай эске донъяһын ниндәйҙер тикшеренеүҙәргә дусар итеү мөмкин түгел, сөнки уны тотоп, үлсәп ҡарап булмай. Тап мейенең нисек эшләүен аныҡ белмәгән өсөн робот техникаһы үҙаллы уйлай белгән роботтар эшләй алмай ҙа инде.

Ҡабул итеүсе һәм тапшырыусы?

Шулай ҙа ғалимдар бер ни тиклем нимәлер асыҡлай ала. Мәҫәлән, мейенең шәхси операция системаһына (ОС) эйә булыуы билдәле. Ғәжәп, әммә тап тәбиғи ОС булыуы мейебеҙҙе бер ни тиклем Тьюринг машинаһына оҡшаш итә. Windows-тан айырмалы, мейенең операция системаһы дәртләндереүсе һәм сенсор сигналдар синтезын барлыҡҡа килтерә, улар бер дөйөм киңлектә - теге йәки был ҡарарҙы ҡабул итеүҙә эшләй.

Тьюринг машинаһы - хәҙерге компьютерҙарҙың прототибы

Операция системаһы арҡаһында мейебеҙ бер юлы бер нисә эш башҡара ала. Мәҫәлән, беҙ машина йөрөтә, шул уҡ ваҡытта абстракт нәмәләр тураһында уйлай алабыҙ, әммә хәүеф тыуғанда йәки юлды аша сығыусы йәйәүлене күргәндә, мейе беҙҙе аныҡ ваҡыт режимына күсерә.

Фекер тыуҙырыу механизмы бик ҡатмары, әммә уның серҙәрен асыу үҙаллы уйлай алған роботтарҙы эшләгәндә ярҙам итәсәк.

ОС булыуынан тыш, баш мейеһе теге йәки был мәғлүмәтте үҙенең шәхси тәжрибәһе йәки иҫтәлектәре призмаһы аша ҡабул итеп, ҡапыл үҙгәреү һәләте менән дә таң ҡалдыра. Тышҡы мөхиттән алынған теге йәки был мәғлүмәтте ҡабул иткәндә, күҙәнәктәр араһында нейрондарҙы теге йәки был системаға берләштереүсе химик матдәләр тапшырыла. Мәҫәлән, өҫтәлегеҙҙә ятҡан предметҡа ҡараһағыҙ, баш мейеһе нейрондары ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа башығыҙ бер нисә секунд эсендә анализланған образды тыуҙыра. Күҙ йомоп асҡан арала ҡабул ителгән мәғлүмәт яңыра һәм өҙлөкһөҙ картина тыуҙырыла.

Мейе ҡабул иткән ҙур күләмле сигналдар беҙҙең аңыбыҙға барып та етмәй, кәрәкмәгәнлектән фильтрҙан төшөп ҡала. Ниндәйҙер объектты аңлау процесында баш мейеһе ҡабығы нейрондары мәғлүмәтте аңһыҙ рәүештә ҡабул иткән башҡа ваҡыттағынан күберәк кимәлдә активлаша. Бынан тыш, ысынбарлыҡты ҡабул итеүебеҙ ошо ваҡыттағы хәлваҡиғаларҙан бер ни тиклем ҡалыша, сөнки мейе алған мәғлүмәтте аңларға тейеш. Быны тикшереп ҡарарға ла мөмкин. Мәҫәлән, берәйһе ниндәйҙер һүҙ яҙһын йәки берәй фото күрһәтһен. Мейегеҙгә ошо мәғлүмәтте аңлап ҡабул итеү өсөн бер ни тиклем ваҡыт кәрәк буласаҡ.

Фекерҙең тап ҡайҙан килеп тыуғаны әлегәсә сер булып ҡала һәм ул тикшеренеүҙәр талап итә. Беҙ әлегә тиклем нимә беҙҙе фекерләргә мәжбүр итеүен һәм беҙҙе аҡыллы яһауын да белмәйбеҙ. Моғайын, кешелек берәй заман мейе эшмәкәрлегенең серен сисә алыр. Был йомаҡҡа яуап кешенең донъяға ҡарашын тулыһынса үҙгәртер һәм уға Йыһанда төр булараҡ үҙ ролен табырға ярҙам итер.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Сәләмәт кешегә "Селәүсен" күнегеүе иртән йоҡонан тиҙ уянырға ярҙам итә, сөнки кәйефте күтәреү һөҙөмтәһенә эйә. Әммә йөрәгегеҙ ауырта һәм тамырҙарығыҙ насар икән - һаҡ булығыҙ, башығыҙҙы түбән төшөрмәгеҙ. Ҡабырғала ятҡан килеш, арҡағыҙҙы тура тотоп, ике аяғығыҙҙы ла тубыҡтан бөгөп бер аҙ күтәрегеҙ һәм бер үк ваҡытта ҡыҫҡа, шаулы итеп тын алығыҙ. Был күнегеү ауыр сирлеләр өсөн бик ҡатмарлы, шуға күрә уны бик һаҡ, ашыҡмайынса, аяҡтарҙы алмашлап күтәреп эшләргә кәрәк, әммә саманы онотмағыҙ! Ғөмүмән, әгәр йөрәгегеҙ насар һәм тамырҙарығыҙ менән проблема бар икән, ярҙамсы комплекс күнегеүҙәрен үҙ аллы эшләрҙән элек табип менән кәңәшләшеү мотлаҡ.

Мәжбүри рәүештә түшәккә ятҡан сирлеләргә алда тәҡдим ителгән күнегеүҙәрҙән тыш, "Аяҡ остары", "Ятҡан килеш аяҡ остары менән түңәрәк эшләү", "Ятҡан килеш алға аҙым" һәм шулай уҡ урологик комплекстан "Метроном", "Янбашты күтәреү" күнегеүҙәрен эшләргә кәрәк. Мөмкинлек булғанда (хәл-торошоғоҙҙан сығып), ятҡан килеш "Ҙур батман" күнегеүен дә эшләргә була. Ятыу зәленән (пролежень) профилактика өсөн генә түгел, ә тиҙерәк әүҙем, эшкә яраҡлы кеше булыу өсөн мотлаҡ улар!

"Аяҡ остары"

Ятҡан килеш аяҡтарҙы һуҙабыҙ, табандар йәнәш. "Бер" тигәндә аяҡ остарын үҙебеҙҙән ситкә һуҙабыҙ, бер үк ваҡытта ҡыҫҡа, шаулы итеп тын алабыҙ, "ике" тигәндә - үҙебеҙгә тартабыҙ һәм бер үк ваҡытта тын алабыҙ. Тын көсөргәнешһеҙ, ирекле рәүештә сыға. Аяҡ остарын ныҡ итеп тартырға кәрәк, табандарҙа саҡ ҡына ауыртыу тойолорға тейеш.

8 тын алыу-тын сығарыу+хәрәкәт эшләгәндән һуң, 5-8 секунд ял итергә һәм икенсе "һигеҙҙе" эшләргә. Ауыр сирҙән һуң булһағыҙ, был һанды кәметеп, хәлегеҙҙән килгәнсе генә эшләгеҙ. Әгәр хәлегеҙ яҡшы икән, бер туҡтамай 16 йәки 32 тапҡыр эшләргә мөмкин. Норма - 96 тын алыу-тын сығарыу+хәрәкәт.

"Ятҡан килеш аяҡ остары менән түңәрәк эшләү"

Ятҡан килеш, аяҡтарығыҙҙы һуҙығыҙ, табандар бер-береһенә теймәй. Уң аяҡты саҡ ҡына тура килеш күтәреп, аяҡ осо менән сәғәт йөрөшө буйынса хәрәкәт эшләргә. Аяҡ осо мөмкин тиклем һуҙылған ваҡытта ҡыҫҡа һәм шаулы итеп тын алабыҙ. 4 тапҡыр түңәрәк эшләгәндән һуң аяҡты төшөрәбеҙ, 3-5 секунд ял итәбеҙ

Туҡтамай эшләгән түңәрәк хәрәкәтен 16-ға йәки 32-гә еткерергә мөмкин. Шулай уҡ хәрәкәттәрҙе 16 тапҡыр - сәғәт йөрөшө, 16 тапҡыр - сәғәт йөрөшөнә ҡаршы эшләргә була. Әммә һәр ваҡыт мөмкинлектәрегеҙҙе баһалағыҙ. Ауыр сирҙән һуң эшләүе ҡыйын икән - 3-4 тын-алыу-тын сығарыу+хәрәкәт башҡарығыҙ. Көн һайын яйлап арттыра барырға була. Әгәр аяҡтарға һәм эскә көсөргәнеште арттырырға теләһәгеҙ, аяҡтарҙы икеһен бер юлы күтәреп эшләргә мөмкин. Был ваҡытта ятҡан урыныгыҙҙың ситенә ныҡ итеп тотонорға кәрәк.

С. КУЗИНА.
(Дауамы бар).

ТОҘ - АҠ ҮЛЕММЕ?

Бынан 500 йыл самаһы элек бер килограмм тоҙ бер кило ит хаҡы торған. Бындай ғәҙәттән тыш донъя буйынса тоҙ бунттары күтәрелешен тыуҙырған, унда ҡатнашыусылар консервалау өсөн кәрәк булған аҡ матдәгә хаҡты төшөрөүҙе талап иткән. Натрий хлоридтың файҙаһы тураһындағы бәхәстәр бары тик XXI быуатта ғына бер аҙ баҫыла. Людмила Гурченконың: "Тоҙ - аҡ үлем", - тигән билдәләмәһе дөрөҫмө, әллә юҡмы? Бөгөн тоҙ - һәр ерҙә ҡулланылған алыштырғыһыҙ продукт. Әммә һәр ваҡытта ла улай булмаған.

Тоҙҙо ҡайҙан алалар?

Аш тоҙо - еҫһеҙ, әммә үҙенсәлекле тәмгә эйә төҫһөҙ кристалл. Уның тәм биреү үҙенсәлеге тураһында бик борондан, уны ҡайһы бер япраҡлы ағастарҙы яндырып алған заманда уҡ белгәндәр. Натрий хлоридын сәнәғәт ысулы менән хәҙерге Европа территорияһында, Болгарияның Ҡара диңгеҙ яры буйында таба башлағандар. Ул ваҡытта уны Провадия-Солница биләмәһе территорияһындағы тәбиғи сығанаҡтан быуландырып тапҡандар. Бөгөн аш тоҙон кипкән боронғо диңгеҙҙәр урынында сығаралар.

Тоҙҙоң файҙаһы һәм зыяны

Замана кешеһенә ғәҙәти көндәлек тормошто тоҙһоҙ күҙ алдына ла килтереү ҡыйындыр, моғайын. Бынан тыш, ҙур күләмдә натрий хлоридында булған натрий иондары кеше организмы нормаль эшләһен өсөн бик кәрәк. Натрий тәндәге һыу балансын нормаға килтерә, мускулдар ҡыҫҡарыуында ҡатнаша, шулай уҡ матдәләр алышыныуын нормалләштерә. Шул уҡ ваҡытта уны саманан тыш ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре, гипертония һәм тамырҙарҙың атеросклерозы үҫешеүе менән янай. Бынан тыш, бер тапҡыр ҡулланғанда натрий хлоридын 250 граммдан артыҡ ашарға тырышмағыҙ, сөнки был бәләкәй генә күләм дә кеше ғүмере өсөн хәүефле.

Әммә тулыһынса тоҙҙан баш тартырға ла кәрәкмәй. Ҡанда натрий иондары булмаһа, кеше гипонатриемия тип аталған торошҡа инә. Был сир һыуҙы дөрөҫ эсмәүгә бәйле. Икенсе төрлө әйткәндә, бер ыңғай күп һыу эсеп тә үлергә мөмкин. Әйткәндәй, кеше өсөн 7,5 литр шыйыҡлыҡ күләме үлемесле тип һанала. Быға миҫал: 2007 йылда Дженнифер Стрейндж бер ыңғай ҙур күләмдә һыу эсеү сәбәпле донъя ҡуя.

Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.



БСТ
28 ОКТЯБРЯ
ПОНЕДЕЛЬНИК

7.00 Сәләм.
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм.
10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]
11.00 Итоги недели (на рус. яз.).
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 "Бай". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 "Сказка о военной тайне". [6+]
17.00 Д/ф "Высокие горы Хуаншань". [12+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Ради добра. [6+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 Бизнес-обзор. [12+]
21.15 Полезные новости. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Тайм-аут. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 Теге өсәү! [12+]
23.30 Күстәнәс. [12+]
0.00 Х/ф "Дорога". Новости (на баш. яз.). [12+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Дочь степей". [12+]
4.30 Автограф. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

29 ОКТЯБРЯ
ВТОРНИК

7.00 Сәләм.
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 Республика Live. #Дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Дорога к храму. [0+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Орлова и Александров". [16+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Тайм-аут. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Криминальный спектр. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Новости (на рус. яз.).
21.20 Хоккей. КХЛ. ХК "Сочи" - "Салават Юлаев" (Уфа).
0.00 Новости (на баш. яз.).
0.30 Х/ф "Ева: искусственный разум". Новости (на баш. яз.). [12+]
2.30 Бәхетнамә. [12+]
3.30 Спектакль "Райса+ Файзи". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

30 ОКТЯБРЯ
СРЕДА

7.00 Сәләм.
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Школа КВН. [6+]
10.30 Д/ф "Память о Сяогане". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 100 имен Башкортостана. [12+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бала-сага. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Орлова и Александров". [16+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Ты можешь! [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Честно говоря. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Историческая среда. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 Земляки. [12+]
0.00 Х/ф "Искусство любить". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Ой, кто там лежит?.." [12+]
4.45 Ете егет. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

31 ОКТЯБРЯ
ЧЕТВЕРГ

7.00 Сәләм.
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Автограф. [12+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Земляки. [12+]
14.45 Ради добра. [6+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Автограф. [12+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Республика Live. #Дома. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Криминальный спектр. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Новости (на рус. яз.).
21.20 Хоккей. КХЛ. "Динамо" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). [12+]
0.00 Новости (на баш. яз.).
0.30 Х/ф "Когда наступит день". Новости (на баш. яз.). [12+]
2.30 Бәхетнамә. [12+]
3.30 Спектакль "Галиябану". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

1 НОЯБРЯ
ПЯТНИЦА

7.00 Сәләм.
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Д/ф "Сердце". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 "Йома". [0+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Точка Z. [12+]
12.30 Башкорттар. [6+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Үткән гүмер. [12+]
14.00 "Весело живем. [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00 Интервью.
15.15 Алтын тирмә. [0+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Д/ф "Мы - одна семья". [12+]
17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 "Йома". [0+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 "Башкорт йыры-2019". [12+]
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 Башкорттар. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Точка Z. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 Караоке по-башкирски. [12+]
23.45 Земляки. [12+]
0.00 Х/ф "Кочующий фронт". Новости (на баш. яз.). [12+]
2.00 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]
4.00 Х/ф "Кочующий фронт". [12+]
5.30 Д/ф "Сердце". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

2 НОЯБРЯ
СУББОТА

7.00 "Доброе утро!" [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 Ты можешь! [12+]
9.15 Посмотрим... [6+]
10.00 Байтус. [6+]
10.15 Сыйырсык. [0+]
10.30 "Тамыр селтэре". [6+]
11.00 Күстәнәс. [12+]
11.30 Бай бакса. [12+]
12.00 "Асылташ". [6+]
12.30 Ете егет. [12+]
13.15 Земляки. [12+]
13.30 Хазина о Хазине. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Сольный концерт Рушаны Валиевой. [12+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 Ради добра. [6+]
20.30 "Байык-2019". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Караоке по-башкирски. [12+]
22.30 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 "Башкорт йыры-2019". [12+]
0.00 Х/ф "Здравия желаю! или Бешеный дембель". [16+]
1.15 Итоги недели (на баш. яз.).
2.00 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]
3.45 Х/ф "Здравия желаю! или Бешеный дембель". [16+]
5.00 Д/ф "Млечный путь". [12+]
6.00 Д/ф "Мы - одна семья". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

3 НОЯБРЯ
ВОСКРЕСЕНЬЕ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15 "Йөрәк һүзе". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Бейе". [0+]
10.15 "АйТек?!" [6+]
10.30 "Детей много не бывает". [0+]
11.00 "Сулпылар". [0+]
11.30 Гора новостей. [6+]
11.45 Бирешмә. Профи. [6+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз.).
13.15 Алтын тирмә. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.45 Дорога к храму. [0+]
16.20 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Минск).
19.00 Полезные новости. [12+]
19.15 Ты можешь! [12+]
19.45 Әлләсе... [12+]
20.30 Теге өсәү! [12+]
21.00 Республика Live. #Дома. [12+]
21.30 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15 Специальный репортаж. [12+]
22.30 "Красная кнопка". [16+]
23.15 "Байык-2019". [12+]
0.15 Х/ф "Гамлет XXI века". [16+]
3.15 Спектакль "Шестая жена Ивана Грозного". [12+]
5.45 "Йөрәк һүзе". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
6.45 Специальный репортаж. [12+]

ЭТО ПОЛЕЗНО ЗНАТЬ

Обогреватель с эффектом горячего кирпича

Современный вариант русской печи от завода "ТеплЭко"

В старину русская печь занимала половину избы, требовала внимания и заботы, а за отдаваемое тепло заставляла человека поработать. Зато в доме всегда было тепло и комфортно. Современная система центрального отопления избавила нас от необходимости растапливать печь и подкидывать дрова, но многие все же не отказались бы обзавестись хотя бы "буржуйкой".

Что ж, мечты сбываются! Не "буржуйкой", а целой русской печью сегодня может обзавестись каждый, при этом займет новая печь всего *около одного квадратного метра на стене*, не потребует дров и вообще какого-либо внимания, ее всего лишь надо включить в розетку.

Речь идет об экономичном обогревателе **"ТеплЭко",** который сочетает в себе теплоносные характеристики кирпича русской печки и современные технологии, сделавшие его компактным и экономным.

МЕЧТЫ О ТЕПЛЕ

Во многих квартирах батареи то греют, то не греют. Если в мае квартирную "печку" можно отключить, в сентябре ее не включишь, так как отопительный сезон еще не начался. А еще иногда батареи засоряются... А еще падает давление в системе... А еще... Да мало ли отговорок мы слышали о том, почему в квартире вдруг становится холодно. Послушав о причинах похолодания, мы достаём обогреватели, какие у кого есть: масляные, тепловентиляторы, калориферы. Одни сушат воздух, другие угрожают пожаром, к третьим нельзя подпускать детей. В общем, мороки с ними не меньше, чем с громадной русской печью. При этом они еще крайне "прожорливы": счет за электроэнергию лучше оплачивать с закрытыми глазами!

Обогреватель **"ТеплЭко"** разом решает все эти проблемы. Он представляет собой декоративную панель, внутри которой спрятан хромоникелевый нагреватель, залитый составом из кварцевого песка. **"ТеплЭко"** можно использовать, как отдельно, так и создавать отопительные системы - количество обогревателей зависит от площади. Один обогреватель устанавливается на 9 квадратных метров, при условии стандартной высоты потолков. До требуемой температуры такая панель нагревается за 10-15 минут, а остывает, как плотная кирпичная стена - несколько часов.

"ТеплЭко" не сушит воздух, не сжигает кислород, пожаробезопасен (так как поверхность не нагревается более чем до 98 градусов) и в четыре раза экономнее обычного чайника (даже за сутки работы одна панель потребляет всего 2,5 кВт при использовании терморегулятора). Номинальная мощность обогревателя: 400 Вт, размер: 600 мм*350мм*25мм, вес: 12 кг.

ВЛИЯНИЕ НА ЗДОРОВЬЕ ЧЕЛОВЕКА

Тепло - это инфракрасные лучи, но не все из них безопасны для человека, только те, которые находятся в диапазоне излучения человеческого тела - от 6 до 20 мкм. Внешнее излучение с такими длинами волн наш организм воспринимает как своё собственное и интенсивно его поглощает. За счет этого в организме активизируется микроциркуляция крови, ускоряется метаболизм, улучшается самочувствие, исчезает усталость. Природный источник длинноволновых инфракрасных лучей - это солнце, а бытовой - русская печь, излучающая тепло, комфортное для организма. Обогреватели **"ТеплЭко"** используют естественные свойства кварцевого песка накапливать тепло, а затем долгое время отдавать его в длинноволновом инфракрасном диапазоне по принципу горячего кирпича. В отличие от всех других обогревателей, **"ТеплЭко"** не только безвреден, но и оказывает благотворное влияние на здоровье человека.

САМОСТОЯТЕЛЬНЫЙ И НАДЁЖНЫЙ

Главное преимущество обогревателя **"ТеплЭко"** - его самостоятельность. Оптимальную температуру, которую он должен поддерживать в комнате, можно задать с помощью терморегулятора. *И все. Он будет работать, создавая атмосферу настоящего домашнего, "обжитого" уюта - когда можно играть с детьми на полу, спокойно спать, ворочаясь и раскрываясь, какие бы морозы ни трещали за окнами.* Еще обогреватель **"ТеплЭко"** идеально подходит для дачи, гаража и офиса. Несколько обогревателей способны полностью заменить центральное теплоснабжение.

Завод **"ТеплЭко"** является единственным в России производителем энергосберегающих обогревателей из кварцевого песка высокой степени очистки. Купить обогреватель вы можете в нашем фирменном магазине или заказать доставку по телефону. А для установки обогревателя потребуется минимум сил и сноровки, три самореза и отвертка.

И пусть простота обогревателя не вызывает никаких сомнений в его долговечности. Как известно, все гениальное устроено довольно просто. И обогреватель **"ТеплЭко"** может работать практически вечно, ведь его нагревательные элементы не контактируют с воздухом и не окисляются. Гарантия пожизненная*.

ЭКОНОМИЧНЫЙ 2-3,5 кВт в сутки при использовании терморегулятора
БОЛЬШОЙ СРОК СЛУЖБЫ Пожизненная гарантия*
БЕЗОПАСНЫЙ 100% пожаробезопасность
КОМФОРТНЫЙ Не сушит воздух, не сжигает кислород
ПРОСТОЙ В УСТАНОВКЕ Справится любой хозяин дома
ЭКОЛОГИЧНЫЙ Наша продукция соответствует санитарным требованиям
ПОЛЕЗНЫЙ ДЛЯ ЗДОРОВЬЯ Улучшает самочувствие, исчезает усталость

СДЕЛАНО В РОССИИ
Подтверждено европейское качество
CE

теплэко

Единственный фирменный магазин компании "ТеплЭко" в Уфе расположен по адресу:
ул. Конституции, 2. Время работы: пн. - суб. с 10 до 20 часов без обеда, воскресенье - выходной. Тел.: (347)214-93-08, (964) 956-23-00, 8 800 333 05 35 (звонок бесплатный по России)
ОСТЕРЕГАЙТЕСЬ ПОДДЕЛОК!
tepleko.ru

ОГРН 1177847333993. *Срок эксплуатации 10 лет.

На правах рекламы.

✓ *Аҡыл ысынлап та беҙҙең ҡатындар һымаҡ, уны йыш ишетәбеҙ, әммә уның мәғәнәһе тураһында һирәк уйланабыҙ.*

(Филип Честерфилд).

БАШ ЭШЛӘТМӘК

РӘШИТ НАЗАРОВ



Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

42-се һандағы сканворд яуаптары.

Горизонталь буйынса: Афиша. Салауат. Ғабдулла. Убалыҡ. Йәм. Ринг. Ахыр. Клон. Тәңкәбикә. Буян. Рәми. Инәй. Кәшәнә. Ент. Әлфиә. Кәм. Коми. Ләғән. Ерек. Елән.

Вертикаль буйынса: Йәнтимер. Ғәм. Оңҡот. Мәрәһим. Сход. Кендек. Уғры. Филиал. Йәмил. Кәр. Әрке. Айгөл. Флаг. Аҫаба. Әрйә. Уңғанбикә. Ун. Бишек. Литр. Ҡорбанғәли.

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1441 һижри йыл.

Октябрь-ноябрь (Сәфәр-рабиғел әүүәл)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалҡа	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Аҡшам намаҙы	Йәстү намаҙы
28 (29) дүшәмбе	6:42	8:12	13:30	16:17	17:47	19:17
29 (1) шишәмбе	6:44	8:14	13:30	16:15	17:45	19:15
30 (2) шаршамбы	6:46	8:16	13:30	16:12	17:42	19:12
31 (3) кесе йома	6:48	8:18	13:30	16:10	17:40	19:10
1 (4) йома	6:50	8:20	13:30	16:08	17:38	19:08
2 (5) шәмбе	6:52	8:22	13:30	16:06	17:36	19:06
3 (6) йәкшәмбе	6:54	8:24	13:30	16:04	17:34	19:04

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

ХУЖАБИКӘГӘ

Зәйтүн майы

Зәйтүн майы аш-һыу бүлмәһендә иң кәрәкле әйбер булыуҙан тыш тағы ла әллә күпме файҙалы сифаттары бар. Бына бер-нисә ҡулланыу осрағы.

♦ **Ҡырынғанда**

Ҡырыныу өсөн яраған крем табыуы еңел түгел, бигерәк тә тирегеҙ ҡоро һәм ҡуҙғыусан булғанда. Был осраҡта зәйтүн майы бик ҡулай сара, ул тирене яҡшы дымландыра һәм сыйналыуҙан, ҡырҡылыуҙан һаҡлай.

♦ **Тырнаҡ буяғанда**

Тырнаҡ буяғанда яңылыш тирегә лә йоҡһа, зәйтүн майы ярҙамында тиҙ генә һөртөп таҙартып була.

♦ **Ванна ингәндә**

Ванна инергә яратһағыҙ, тирене дымландырыу өсөн бер аҙ зәйтүн майын һыуға тамыҙырға кәрәк. Май һыуҙа яҡшы таралһын өсөн ағып торған һыу аҫтына тамыҙырға.

ДИАЛОГ

ДИНИ ЙОЛА МЕНӘН...

милли йола айырыламы?

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

Динле кеше тормош юлдашы итеп динлене һайларға ынтыла. Ә дингә килмәгәнгә өйләнеү йәки кейәүгә барыу тыйыламы? Был тәңгәлдә, бәлки, ниндәйҙер яҙылмаған кәртәләр барҙыр?

Морат Лоҡманов: Бер ниндәй кәртә лә юҡ. Әммә бер тәңгәлен әйтеп китәйем. Никах уҡыған ваҡытта никахҡа инеүсе һәр икеһе лә дингә килә, улар никах шартында "мин дингә киләм" тигән мәғәнәне үҙ теле менән әйтә. Әлбиттә, никахҡа инеү өсөн генә түгел, ә иманлы булыу өсөн дингә килеү зарур. Икенсе бер яғы, ниндәйҙер бер гәмәлгә эргәндәгеләрҙе лә эйәртерлек булыу. Бөгөн "Башҡорт булайыҡ" тип оран һалыуға ҡарағанда, ғаиләндәгеләрҙең дә һиңә ҡарап башҡорт булғыһы килерҙәй әҙәм булыуын яҡшыраҡ. "Минең дә башҡорт булғым килә" тип, ниндәйҙер икенсе милләт артыңдан йүгереп килерҙәй булһын. Шуның кеүек, диндә лә ҡатының, балаларың һиңә эйәреп намаҙға баҫҡыһы килерҙәй мосолман бул. Ғаиләндә тәртип тотоу, балаларҙы, ҡатынды бәйҙә ултыртыу, башҡалар алдында әҙәпле итеп күрһәтеү йәки интектереү өсөн түгел дин, ә уларҙың күңелен күркәм итеү, уларҙы һаҡлау өсөн.

Мәсеткә халыҡ күп килә. Төрлө юлдар һәм төрлө ниәт менән килә улар. Кемдәрҙер яңы-яңы ғына Аллаһ юлына төшөнөп йөрөй, уның ниәттәре изге; кемдәрҙер диндән мода яһап алған; берәүҙәр эшләргә теләмәгәнлектән, ялҡаулыҡтан йөрөй мәсеткә; ҡайһыларылыр агрессия менән килә - барыһын да әрләй, хөкүмәтте һүгә һәм башҡалар. Берәүҙәре әле генә "брат та брат" тип һөйләшеп тора ла, ниндәйҙер фекерҙәре тура килмәгән мәсьәлә сығыу менән яу булып ирешеп-талашып китә. Бында һәр кем теге йәки был һорауға бары тик үҙ күҙлеге аша ғына ҡарай.

Кешенең иманлы булыуын уның һүҙе генә аңлатмай. Хатта башҡарған эштәре генә лә әле иманлы икәнлегенең күрһәткесе түгел. Быларҙы ул яҡшы булып күренеү өсөн дә башҡара ала. Иманлы булыуын уның янында барлыҡҡа килгән мөхит, торош сағылдыра.

Интернетта йыш ҡына "Иң көслө доға" тип доғалар һалалар. Бер доға икенсеһенән көслөрәк була аламы? Доғалар араһында шундай дәрәжәгә бүлеү бармы ул?

Нурмөхәмәт Нуриев: Доғалар көслө-көсһөҙгә, дәрәжәле-дәрәжәһеҙгә бүленмәй. Мәҫәлән, ниндәй ағас иң яҡшыһы, тип һорағанда, һәр кем ҡайҙа тыуып үҫеүенә, ниндәй ағасты оҡшатыуына ҡарап яуаплаясаҡ. Урман кешеһе - ҡарағай, тауҙыҡылар - шыршы, берәүҙәр ҡайын, икенселәр имәндең иң шәбе булыуын иҫбатлар. Әммә ул ағастар барыһы ла бер маҡсат менән яратылған донъяға. Доғалар ҙа шулай уҡ. Бары уларҙың һәр кемгә үҙ тәьҫире булырға мөмкин. Кемдер бер доғаны бик ауыр ваҡытында уҡый ҙа, уға еңеллек килә, кемдер нимәгәлер мохтаж булып, икенсене ятлай һәм теләгәнен ала. Улар быны айырыуса ихласлыҡ менән башҡара. Һәм бына шул ихласлыҡтары, Аллаһҡа ныйыныуҙары әлеге доғаларын "иң көслөһө" итеп күрһәтә лә инде. Был хәл мәсеттәр менән дә булып ҡуя. Берәүҙәр "Туҡай мәсете иң шәбе" ти, икенселәр "Ләлә мәсетенә йөрө", өсөнсөләр "Дим биҫтәһенеке иң дөрөҫө" ти. Бында ла һәр кемдең үҙ туҡһаны туҡһан: кем ниндәй доға һәм мәсет аша иманға килгән йәки Аллаһҡа яҡыная ала - шулай булһын. Был осраҡта ла берәүгә лә: "Юҡ, был доғаны түгел, анауһын ятла йәки ана шул мәсеткә бар",- тип әйтмәйек. Был юлды уға беҙ түгел, ә Аллаһ күрһәткән.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Бына шундай ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә әңгәмә ҡорҙоҡ дин әһелдәре менән. Киләсәктә бындай һөйләшеүҙәргә һеҙ ҙә ҡушыла алаһығыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ, үҙегеҙҙе борсоған һорауҙарҙы яҙып ебәрегеҙ.

Лилиә СӘЙҒӘФӘРОВА әңгәмәләште.

✓ *Йыллығын уйламаған ирҙән биҙ, айлығын уйламаған ҡатындан биҙ.*
(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

АФАРИН!

СИБАЙҘАР...

беҙҙе тағы рухландырҙы

Сибайҙар килеп, тағы баш ҡаланы бер шаулатып ҡайтты. Сибай концерт-театр берекмәһендә берләшкән филармония менән "Сулпан" балалар театры артистары был юлы "Аҫаба булған ҡанбабам, аҫаба булыр балам" тип аталған тамаша күрһәтте.

Башҡортостан автономияһының 100 йыллығын билдәләү сиктәрендә әҙерләнгән программа дәүерҙәр төпкөлөнән алып башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәш юлын сағылдыра. Йәнбикә менән Йәнбирҙенең улдарына һәм ейәндәренә биргән ер, һыу һәм азатлыҡ хаҡындағы өгөт-нәсихәтенән башланған күренештәр яйлап быуаттар һуҙымында бер-бер артлы тоҡана барған ихтилалдарҙы һәм уларҙың етәкселәрен һүрәтләй. Милләттең аҫабалыҡҡа булған хоҡуғын яҡлаған батырҙар, хандар, тархандар һәм билдәле шәхестәр сиратлап күҙ алдынан үтә. Урал батыр, Башҡорт хан, Мәйтән бей, Шәғәле Шаҡман, Ҡаһым түрә, Салауат Юлаев, Әхмәтзәки Вәлидов, Шәйморатов генерал һәм башҡалар. Башҡорт ерҙәрен һаҡлап ҡалыу, уға аҫабалыҡты киләһе быуындарға ла тапшырыу өсөн йәндәрен фиҙа ҡылған ошо башҡорт уландары иҫтәлегенә бер һәйкәл булды был тамаша.

Аҫабалыҡ - ергә хужа булыу. Был хоҡуҡ һәр заманда ҡәүемде йә аяҡҡа баҫтырған, йә ҡанға батырған. Аҫабалыҡ йөгөн һәм бурысын башҡорт халҡы әлмисаҡтан уҡ күтәрә, бөтә илаһи фиҙаҡәрлеге һәм тоғролоғо менән үҙе тыуған ер-һыуына кешелек бурысын ҡайтара - йәғни уны һаҡлай, ҡурсый, данлай һәм төләфләүгә юҡ ҡуймай. Ерһеү - йәғни Ерҙе һөйөү - беҙҙең башҡорттоң ҡанында. Ерһеҙ булғанға ул ҡотһоҙ һәм телһеҙ, ерһеҙ ҡалған өсөн башҡорт утдәртһеҙ һәм илһеҙ. "Аҫаба булған ҡанбабам, аҫаба булыр балам!" тигән тәүәккәл һәм аяныс оран ташлап, Башҡортостандың иң абруйлы сәхнәһенә менде сибайҙар. Урал батыр менән Башҡорт батыр темаһы, ниһайәт, Өфө сәхнәһенән тороп, илгә тауыш бирҙе, маңҡорттарҙы уятырға, төңөлгәнде тетрәтергә тырышты.

Әлбиттә, рухлы концерттарҙы беҙ баш ҡалала аҙ күрмәйбеҙ. Әммә сибайҙар алып килә торған халыҡсанлыҡ һәм һуты һарҡып торған миллилекте башҡаларҙыҡы менән бутап булмайҙыр. Бөгөн, глобализацияны һәм "бер массалағы дөйөм халыҡ булыу"ҙы алға һөргән заманда, кемдәрҙер урыны, дәрәжәһе һәм даны өсөн ҡалтырап, милләтен дә атарға ҡыймай йәшәгәндә, сибайҙарҙың "Аҫаба булған ҡан-бабам, аҫаба булыр балам" тип күкрәк киреп баҫыуы үҙе бер батырлыҡ.

"Халыҡсанлыҡ" тигән һүҙҙе лә йыш ҡулланабыҙ. Ә нимә ул асылда халыҡсанлыҡ? Артистар һәм мәҙәни коллективтар өсөн ул, моғайын, халыҡтан сыҡҡанды, халыҡ ижадын булһынмы, фольклорынмы, йыр-моңдарынмы, үҙгәртмәй, юғалтмай-өҫтәмәй, яңыртмай-кәметмәй генә халыҡҡа еткерә белеүҙер. Бына ошо хәҡиҡәтте нигеҙ итеп алған да инде ижади хеҙмәтенә Сибай концерт-театр берекмәһе. Һәм ошо үҙенсәлек уларҙың үҙҙәрен дә, сығыштарын да ҡабатланмаҫ итә.

Аҫабалыҡ тураһында һөйләгәндә һәр кем йөрәгенә барып етеү бик мөһим. Бигерәк тә башҡорттарҙыҡына. Сибай филармонияһына алдағы репертуарында ла ошо теманан тайпылмаҫҡа яҙһын. Үҙ тауышыңды табыу өсөн бер тапҡыр ғына ҡысҡырыу етмәй бит.

Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

ИРЕҢ БУЛМАҪТАЙҒА...

иренеңде бирмә

Йыллығын уйламаған ирҙән биҙ, айлығын уйламаған ҡатындан биҙ.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Аҡыл ысынлап та беҙҙең ҡатындар һымаҡ, уны йыш ишетәбеҙ, әммә уның мәғәнәһе тураһында һирәк уйланабыҙ.

(Филип Честерфилд).

Һаҡларға кәрәк булған бәхет... бәхет түгел инде ул.

(Жильбер Сесброн).

Дуҫтарығыҙға уларҙың етешһеҙлеге тураһында өндәшмәгеҙ - ул ғүмере буйына был етешһеҙлектәрен төҙәтеү менән булаҫаҡ һәм... һине күрә алмаясаҡ.

(Логан Смит).

Ҡатын-ҡыҙ менән идара итеүҙең ике ысулы бар, тик уларҙы... бирәү ҙә белмәй.

(Фрэнк Хаббард).

Намыҫлы хәйерсе ҡайһы саҡ үҙенең хәйерсе икәнен онотоп та ебәреүе бар. Ә бына намыҫлы бай үҙенең бай икәнен бер ваҡытта ла онотмаҫ.

(Гилберт Чистертон).

Бер ваҡытта ла аҡланма. Дуҫтарыңа ул кәрәкмәй, ә дошмандарың барыбер ышанмаҫ.

(Эльберт Хаббард).

Фәҡирлек кешене шул тиклем кәмһетә, улар хатта үҙҙәренә изгелек ҡылыусыларҙан да ояла.

(Маркиз де Вовенарг).

Ваҡыты-ваҡыты менән нимәгәлер инанығыуыңды икеләнеүҙәргә дусар итеп алырға ла кәрәк.

(Ричард Бах).

Кешеләр өҫтөнән хаким итеүсе үҙенең иреген дә юғалта.

(Уильям Шекспир).

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше урманда йөрөп ятҡанда аҡһаҡ төлкөнө күреп ҡала. Уны күҙәтеп ултырып, кеше төлкөнөң нинди юл менән көн итеүенә шаһит була. Бына бер саҡ урман эсенән ит киҫәге һөйрәп, арыҫлан килеп сыға. Йыртҡыс итте бер генә ҡаба ла, уны төлкөгә ҡалдырып, юлын артабан дауам итә. Кешене был хәл уйландыра. Бер тәғәм ризыҡ табыу өсөн ыҙаланып, әллә күпме көс түгеп эшләгәнсе, бәлки, уға ла төлкө кеүек булырға, килер табышты көтөп ултырырғалыр? Ул шулай итә лә. Ергә ултыра ла, көтә башлай. Ваҡыт үтә, әммә кешегә берәү ҙә ризыҡ килтереп бирмәй. Ул асығып, көсһөҙләнә башлай. Урынынан да тора алмаҫ хәлгә еткәс, күктән тауыш килә: "Аҡһаҡ төлкө булма! Көслө арыҫлан бул, шул саҡта һин ас булмаҫһың, башҡаларға ла өлөш сығарырһың..."

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

26 октябрь "Mouse story" (Д. Урбан), әкиәт. 12.00 6+
27 октябрь "Mouse story" (Д. Урбан), әкиәт. 12.00, 15.00 6+
30 октябрь Премьера "Бомба" (С. Әбүзәр), комедия 16+
31 октябрь Премьера "Эскәмйә" (А. Гельман), драма 12+

М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

26 октябрь "Үәт, исмаһам, ахырызаман!" (М. Багаев), комедия. 18.00 12+
30 октябрь "Чиполлино" (Д. Родари), мажара. 12.00 0+
"Униженные" (З. Биишева), драма. 19.00 12+
1 ноябрь "Килә яуа, килә яуа" (З. Хәким), комедия. 19.00 16+

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

26 октябрь "Верные друзья" (А. Хайт, А. Левенбук). 12.00, 14.00 0+
27 октябрь "Три поросенка" (С. Михалков). 12.00, 14.00 0+
1 ноябрь Премьера "Гадкий утенок" (Г.Х. Андерсен әкиәте буйынса). 12.00, 14.00.0+

Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

27 октябрь - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Эльвира Хәйретдинованың "Weekend с органом"** тип аталған бөтә ғаилә өсөн йәкшәмбе концерты. Башлана 15.00 6+

ИЖАДХАНА

БУЯУҘАРҒА...

ҡояш нуры ингән

Баймаҡ районында ижад иткән рәссам Зәбир Теүәловтың картиналар күргәҙмәһе Өфөнөң "Урал" галереяһында асылды. Замандашыбыҙ - һирәктәргә әләгә торған һәләт эйәһе, пейзаж оҫтаһы, ул үҙенең Хоҙай биргән таланты менән беҙ яратҡан Уралтау күренештәрен буяуҙар аша һүрәтләй.

Ҡылҡәләме менән туған тәбиғәт хозурлығына тәсбих яҙыусы Зәбир Фәрит улы Теүәлев балалар һәм йәштәр араһында ла эшләй: уларға нәфис сәнғәт серҙәрен һөйләп, ижади эшкә ылыҡтырып, мәктәптәрҙә, мәҙәниәт йорттарында күсмә күргәҙмә-дәрестәр үткәрә. Ҡатыны Зөлхизә Мирсәйет ҡыҙы - уның ышаныслы ярҙамсыһы, рухташы. Айһылыу менән Миләш исемле ике ҡыҙы ла рәссамлыҡ юлын һайлаған, махсус белем алып, ошо ижад донъяһында йәшәй. Зәбир Теүәлев Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылында 1962 йылда тыуа. Өфөлә юғары белем ала. 2000 йылда Урал аръяғында "Баймаҡ" рәссамдар клубы асылғас, иң әүҙемдәр рәтенә баҫа: Әпек-Бәхтегәрәй ауылында үҙенең оҫтаханаһын булдырып, тыуған яҡ тәбиғәтен һүрәтләп, туристарҙы йәлеп итеү, йәштәргә рухи-эстетик тәрбиә биреү эшенә сума. Тынғыһыҙ рәссамдың девизы: "Кояштың һәр көнө эш менән үтһен, һәр нуры ижад емешенә әйләнһен". Күңелендә һәм хеҙмәтендә ҡояш йөрөткән замандашыбыҙҙың картиналары 24 октябргә хәтле "Урал" галереяһының ике залын биләп торасаҡ.

Кинйә МӘЗИТ.

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт: Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
25 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 2123/10